ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24-30 сентябрь (нарысай) 2016

№39 (717)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ололаһаң олоно...**
ололарҙар үҙенде



3

**Дәреслектәр...**
талапҡа яуап бирмәй



6

**Иленде, теленде, еренде һаҡлау...**
Аллаһы Тәғәләнең аманаты



8-9,12

**Уҡытыусым!**
(Халыҡ-ара уҡытыусылар көнөнә байрам сценарийы)



11

**ТВ-программа** 14

***Почтальондар иғтибарына! Гәзит-журналдарҙың таралыуы һеҙҙең егәрлелек, ныҡышмалыҡ, һеҙҙең йүгереп йөрөүҙәр аша атҡарылғанын беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Хеҙмәтегеҙҙе һүҙ менән генә түгел, бүләктәребеҙ менән дә билдәләмәксебеҙ. Иң күп "Киске Өфө"гә яҙҙырыусы почта хеҙмәткәрҙәрен бүләктәр көтә.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Республикала һәм баш ҡалабыҙҙа көҙгө йәрминкәләр башланды. Унда ниҙәр һатып алаһың, үҙең нимә һатаһың?



***Рәшиҙә ҒАБДРАХМАНОВА, Шишмә районы, йәрминкәлә ҡатнашыусы:*** Беҙ, яҡын-тирә районда йәшәүселәр, баш ҡала йәрминкәләрен дүрт күҙ менән көтөп алабыҙ, сөнки шәхси хужалығыбыҙҙа етештергәнде ошонда ғына һата алабыҙ һәм бер аҙ файҙа алыуға өлгәшәбеҙ. Мин йәрминкәнән тороп ҡалғаным юҡ, көҙ етһә, ирем менән аҙна һайын баҙарға киләбеҙ. Алыуын бер нәмә лә алмайбыҙ, мин - ҡаҙ, өйрәк, тауыҡ ите, май-ҡаймаҡ, эремсек, ә ирем картуф, сөгөлдөр, ҡабаҡ һата. Беҙҙең ауылда халыҡ уңған, Өфө яҡын булыуға ҡарамаҫтан, күпселек мал, ҡош-ҡорт аҫрай, картуф, кәбеҫтә, башҡа төр йәшелсә-емеш үҫтерә - үҙендекенә ни етә! Беҙҙең дә хужалыҡ ҙур ғына: өс баш һауын һыйыры, ваҡ мал, иллегә яҡын ҡаҙ-өйрәк. Себеш сығарғандарынан һуң тауыҡтарҙың иҫәбенә лә сыҡҡан юҡ әле... Мал аҙығы, бесән дә әҙерләргә кәрәк уларға, шуға башмаҡтарҙы һимертеп, шулай уҡ һуғым мәлдәрендә йәрминкәгә сығарабыҙ. Йәш ит айырыуса үтемле була баҙарҙа. Әйтеүемсә, ауыл ерендә үҙеңдән артып ҡалғанды алыусы бик һирәк. Аҙна урталарында ла өйҙә ултырмайбыҙ шуға күрә - машинабыҙға тейәйбеҙ ҙә, Шишмә баҙарына алып сығабыҙ продукцияны. Улыбыҙ Себерҙә эшләй, киленебеҙ декрет отпускыһында. Йорт-ҡура, мал-тыуар ҡараулы, етештергәнебеҙҙе бер көндә генә һатып бөтөрә алмаһаҡ, Өфөлә тороп ҡалғылайбыҙ: бер туған апайым Сипайлово баҙарына яҡын ғына йәшәй. Уны ла йыл әйләнәһенә ауыл күстәнәстәренән өҙмәйбеҙ.

Баҙар-йәрминкә юлын бер кем дә ҡыҙыҡ эҙләп тапамай торғандыр инде ул. Аҡса тип тырышыуыбыҙ шунан: эргәбеҙҙә йорт һалып, улыбыҙҙы башҡа сығарыу ине ниәтебеҙ. Уның да Себер сығып китеүенең ғиләһе шунда. Кесе улыбыҙ ҙа армиянан ҡайтҡас та өйләнергә йыйына. Уға ла өй һалып бирергә тура килер, моғайын. Ул әйткән була ла ул, кәләшем менән ситкә сығып китәбеҙ, бында эш юҡ, тип. Ә бына ҡасан теләһәләр ҙә ҡайтып төпләнергә үҙ йорттары булһын әйҙә, тибеҙ. Ситтә бит улар өсөн бер кем дә әҙерләп ҡуймаған. Хәлебеҙ барҙа, бына шулай балаларға ярҙам итергә тырышып ятҡан көнөбөҙ.

***Рафиҡ АБДУЛЛИН, эшҡыуар:*** Мин бына 15 йылдан ашыу инде Нуриман районына йөрөп эшләйем. Атайымдың умартаһы, йорт-хужалығы тороп ҡалғайны. Урман эсендә ултырған бәләкәй бер утар, ни бары тиҫтәләгән генә хужалыҡ бар бында. Мәктәп юҡ, ә балаларҙы уҡытырға кәрәк, шуға ике бала менән ҡатыным Өфөлә йәшәйҙәр, аҙна һайын ҡайтып торам. Атайымдың донъяһын бөтәйтеп, ҙурайтып алдым, күстәрҙе арттырҙым. Ҡустым менән икебеҙгә иллеләгән умарта тотабыҙ, киләсәктә хужалыҡты тағы ла киңәйтергә ниәтләйбеҙ. Көҙгө йәрминкәләр етә башлау менән бал фләктәрен Өфөләге фатирға ташыйбыҙ һәм ҡатындарыбыҙ ярҙамында уны һата ла башлайбыҙ. Быйыл бал былтырғы кеүек мул булманы инде, йәйҙең аномаль торошо ауыл хужалығына ҙур зыян килтерҙе, шулай ҙа йәрминкәгә сығарып һатырлыҡ шифалы, татлы аҙыҡ туплай алдыҡ: Павловка һыуһаҡлағысына яҡын булыу беҙҙең өсөн бик уңайлы.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҺӨЙӨНСӨ!

# ӨФӨЛӘ - ЯҢЫ КҮПЕР!



**Бөгөн Ағиҙел йылғаһы аша һалынып, Галле урамы киҫелешенә сыҡҡан күперҙә һуңғы эштәр башҡарыла.**

Ул тулыһынса асфальт менән ҡапланған, яҡтыртыу сығанаҡтары, барьер ҡоймалары ҡуйылған. Тиҙҙән яңы күпер менән бер рәттән иҫкеһенә лә водителдәрҙе һауа торошо, тиҙлек тураһында иҫкәртеп тороусы автоматлаштырылған идара итеү системаһы урынлаштырыласаҡ.

Мәскәү ҡалаһының "Күперҙәр" норматив-һынау үҙәге экспертары яңы объектты һынай башланы. Был бик тә мөһим һәм технологик яҡтан ҡатмарлы процесс, сөнки объекттың айырым участкалары төрлө белгестәрҙең эш һөҙөмтәһен берләштереүҙе талап итә. Белгестәр фекеренсә, уларға ике этапта үткәрелгән һынау һөҙөмтәләрен тулыһынса анализлау өсөн 5 көн ваҡыт кәрәк.

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# АУЫЛ КИЛӘСӘГЕ...

## үҙ ҡулыбыҙҙа

***Флүзә АРҒЫНБАЕВА, Баймаҡ районы Ҡолсора ауылы биләмәһе башлығы:*** Ауылдар бөтә, йәштәр ауыл ерендә ҡалмай, тип төшөнкөлөккә бирелгән кешеләрҙең фекере менән килешмәйем. Ауылдарҙың киләсәге ауыл халҡының үҙенән тора, һәм ул өмөтлө. Бына, мәҫәлән, беҙҙең Ҡолсора ауылы биләмәһенең Муллаҡай ауылында үткәрелгән өмәләргә дәррәү сыҡҡан оло ағайҙарҙың әүҙемлегенә тәүҙәрәк аптырай торғайным. Уларҙы был өмәләргә өйҙән-өйгә йөрөп саҡырмайбыҙ ҙа, әммә барыһы ла килә, ихлас итеп эште атҡарып та ҡуя. Улар үҙенең йәшәгән төйәге, ауылы өсөн тырыша шулай. Улар кемдәрҙер, ҡайҙандыр килеп, был ауылдың сүп-сарын таҙаларға, зыяраттарҙы йүнәтергә, юлдарҙы рәтләргә тейеш түгел икәнен яҡшы аңлай. Был ауыл уларҙың үҙенә - ошонда йәшәгән халыҡҡа, киләсәктә уларҙың балаларына кәрәк. Быны беҙҙең ауыл биләмәһе кешеләре бик яҡшы аңлай, шуға ла ситтән ярҙам көтөп ятмай. "Әйҙә, шуны эшләйек" тиҙәр ҙә, йыйылышып сығып, теге йәки был эште еренә еткереп атҡарып та ҡуялар.

Эйе, һәр эштең башында ошонда йәшәгән халыҡ үҙе торорға тейеш, тип иҫәпләйем. Быйыл ауылдарыбыҙға әсәй-атайҙары йортон йүнәтергә ҡайтыусылар байтаҡ булды, уларҙан өлгө алып, киләһе йыл тағы бер нисә ғаилә ошо уҡ эште башҡарасаҡ икәненә иманым камил. Мәктәбебеҙ күптән ремонтланғаны юҡ ине, быйыл уҡытыусылар коллективы инициативаны үҙ ҡулына алып, аҡса йыйып, ремонтты үҙҙәре эшләне. "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Реаль эштәр" проектына йыл да ғариза бирәбеҙ, былтыр шул проект сиктәрендә дүрт ауылға ла спорт инвентарҙары алдыҡ, Муллаҡай ауылы урамдарына яҡтылыҡ үткәрҙек, быйыл Ҡолсора ауылы урамдарына яҡтылыҡ үткәреүгә ғариза бирҙек, киләһе йылға мәктәпте һәм клубты ремонтлау буйынса документтар әҙерләйәсәкбеҙ. Республикала Урындағы инициативаларҙы күтәрмәләү программаһы тормошҡа ашырыла башлағас, үҙебеҙҙең ауыл биләмәһен төҙөкләндереүгә йүнәлтелгән проекттарға ярҙам алыуға өлгәштек. Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн тегеү цехы асылды, хәҙер ир-егеттәргә эш урыны булдырһаҡ, киләсәктә күптәргә ауылда эшләп йәшәргә лә мөмкин булыр. Фермерлыҡ, шәхси эшҡыуарлыҡ өлкәһендә башҡараһы эштәр байтаҡ. Беҙ бына ошондай ыңғай һөҙөмтәләргә бергә кәңәшләшеп, ярҙамлашып эшләп өлгәшә алдыҡ. Халыҡ үҙе ҡыҙыҡһыныу күрһәтеп, тәҡдимдәрен әйтеп, йәшәйешен яҡшыртырға ынтылып торғас, беҙгә лә эшләүе еңел. Тимәк, республиканың башҡа төбәктәрендә лә халыҡ инициативаны үҙ ҡулына алып, бер аҙ тырышлыҡ күрһәтеп, ауыл хәлен яҡшырта ала.

Шулай уҡ йәштәрҙе тәрбиәләү буйынса ла һәр кемебеҙ үҙенә яуаплылыҡ алырға өйрәнһен ине тип әйтә йөрөйбөҙ. Оло быуын кешеләре белә, элек балаларҙы һәм йәштәрҙе бөтә ауыл менән тәрбиәләй торғайнылар. Урамдың ыңғай тәрбиәһе ине ул. Беҙ был тәрбиәне норма итеп ҡабул итә, ололарҙан ояла торғайныҡ. Шуға беҙҙең быуын тәрбиәле, тәртипле булып үҫте. Мин ауылдарыбыҙҙағы ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар йәштәрҙе тәрбиәләү буйынса эш алып барһа ине, тип теләйем. Киләсәгебеҙ йәштәр ҡулында икән, уларға ҡарата ла битараф булмайыҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Республикала һәм баш ҡалабыҙҙа көҙгө йәрминкәләр башланды. Унда ниҙәр һатып алаһың, үҙең нимә һатаһың?

(Башы 1-се биттә).

***Флүрә СӘЛИХОВА, хеҙмәт ветераны:*** Республика районданрында һәм баш ҡалабыҙ Өфөлә көҙгө-ҡышҡы йәрминкәләр үткәреү бик күптәнән инде һәйбәт йолаға әүерелде. Ҡала халҡы уны айырыуса көтөп ала, йәрминкәгә, тип, аҡсаһын да һаҡлабыраҡ тота. Ысынлап та, бында юҡ ризыҡтың үҙе юҡ: бөтәһен дә һатып алырға мөмкин, аҡсаң ғына булһын. Был сара үҙебеҙҙең ауыл хужалығы етештереүселәре өсөн иркенләп үҙ тауарын һата торған берҙән-бер урын, тиергә лә була. Һуңғы йылдарҙа, әлбиттә, "Урындағын һайла, үҙебеҙҙекен һатып ал!" тигән саҡырыу буйынса Башҡортостан етештереүселәре тауарҙарын һатыуға сығарыу буйынса байтаҡ саралар күрелә. Мәҫәлән, "Батыр" компанияһы "Башҡортостан продукты", "Байрам", "Һабантуй" магазиндары аша урындағы етештереүселәр продукцияһын һатыуға сығара башланы, тик бында бөтөн етештереүселәр ҙә - айырыуса алыҫ райондарҙағы шәхси хужалыҡтар даими хеҙмәттәшлек итә алмай: юл сығымдары килемдәрен ҡаплауға ла етмәйәсәк. Ә бына ҡала, район йәрминкәләренә бер нисә тапҡыр килеп ҡайтыу уларҙың ҡулынан килә торған эш.

Өфө ҡала округы хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, баш ҡалала йыл һайын фермерҙар өсөн генә түгел, ә йорт яны һәм баҡса участкаларында үҫтерелгән һәм үҙ хужалыҡтарында етештерелгән ауыл хужалығы продукттарын һатыуға сығарыу өсөн махсус майҙансыҡтар, сауҙа итеү урындары әҙерләнә. Көҙгө уңыш йәрминкәләре үтеп китеү менән 3 декабрҙән ит йәрминкәләре башлана. Тик шулай ҙа был саралар ғына аҙ, күрәһең. Шуға күрә лә ошо йылдың июнендә БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Аграр мәсьәләләр, экология һәм тәбиғәтте файҙаланыу комитеты ултырышында Башҡортостан аграрийҙарына үҙҙәре етештергәнде һатыу өсөн сауҙа майҙансыҡтары ҡытлығы мәсьәләһе күтәрелде, тип уҡыным. Унда БР Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәт идаралығы етәксеһе Зөлфирә Аҡбашева шулай тип сығыш яһаған: "Бөгөн крәҫтиән хужалығы бөлөүгә бара. Миндә етештерелгән продукцияны һатырға мөмкинлек булмауға зарланған хаттар бик күп. Әле бына ошо хаҡта ауылда крәҫтиән хужалығы алып барыусы 7 ҡатын-ҡыҙҙың мөрәжәғәте ята. Уларға ҡала баҙарҙарына юл сикләнгән. Бынан тыш, алыҫҡа аҙыҡ-түлек ташыуға сығымдар ҙа күп китә. Һөҙөмтәлә ауыл хеҙмәтсәндәре уңышты, әйтәйек, 50 һумға аралашсыға биреп ебәрә икән, улары иһә артабан продукция хаҡын өс тапҡырға арттырып, 150-гә һата. Миңә был хаҡта Туймазы, Бүздәк йәшелсәселәре йыш мөрәжәғәт итә: улар үҙҙәре үҫтергәнде һатыу өсөн бер ҡайҙа ла эләгә алмай..."

Ҡомһоҙ аралашсыларҙан, был өлкәләге коррупциянан ҡотолоу юлын ҡайһы бер етештереүселәр продукцияһын дәүләткә һатыуҙа күрә, тик тағы ла шуныһы бар: ә был өлкәлә хаҡтар системаһы ниндәй булыр икән һуң?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Ҡыуаныслы хәбәребеҙ бар: Рәсәй почтаһы яҙылыу хаҡтарына бер аҙ ташлама яһаны, йәғни хәҙер һеҙ 50665 индекслы гәзитебеҙгә - 485 һум 40 тингә, 50673 индексына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) 515 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ. Сентябрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән 10 кеше 2017 йылға "Башҡортса дини календарь", дүрт кеше "Бураҡаевтар ижады", шулай уҡ башҡа китаптарға лайыҡ буласаҡ.**




● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 420 һумға яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - **258 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **258 һум**.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн онлайн яҙылыу " һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "ВДНХ-Экспо" күргәҙмәләр комплексында ойошторолған I "Транспорт системалары. Махсус техника һәм ҡорамалдар" күргәҙмәһен ҡараны. Күргәҙмәлә бөтәһе илдең 10 төбәгенән, шул иҫәптән Мәскәүҙән, Санкт-Петербургтан, Татарстандан, Силәбе, Кемеров, Свердловск, Брянск, Нижегород өлкәләренән 70-кә яҡын компания ҡатнаша.

✓ 11 октябрҙә, Республика көнөндә, Башҡортостан музейҙары үҙ ишектәрен аса. "6, 7 һәм 10 октябрҙә тантаналы йыйылыштар һәм концерттар була. Байрам алдынан халыҡ байрамдары, тамашалар, йәштәр өсөн флешмобтар, парадтар ойошторола. Бөтә мәҙәниәт учреждениеларында класс сәғәттәре үтә", тип белдерҙе мәҙәниәт министры Ә. Шафиҡова. Бынан алда Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы Рәйесе Константин Толкачев республиканың барлыҡ музейҙарында Асыҡ ишектәр көнө уҙғарыу хаҡында тәҡдим индергәйне. Әминә Шафиҡова башланғысты хупланы.

✓ Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары көҙгө сессиялағы беренсе парламент ултырышы башланыр алдынан хәйриә акцияһы ойошторҙо. Парламентарийҙар балалар йорттары китапханалары, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр, инвалидтар һәм ветерандар өсөн республиканың төп матбуғат баҫмаларына яҙылды. Республика Дәүләт Йыйылышы Рәйесе Константин Толкачёв коллегаларына өлгө күрһәтеп, бер юлы бер нисә баҫмаға яҙылды. Республикала ошондай хәйриә акцияһы беренсе тапҡыр ойошторола. Проектҡа министрлыҡ һәм ведомство етәкселәре ҡушылыр, тип ышана ҡатнашыусылар.

✓ Бөгөн Ырымбурҙа "Каруанһарай" тарихи-мәҙәни комплексының асылыуына 170 йыл тулыуға арналған байрам саралары үтә. Уны Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты һәм Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы ойоштора. Республиканың көньяҡ райондары, Ырымбур өлкәһе райондары һәм ҡалаларындағы башҡорт ҡоролтайҙары рәйестәренең киңәйтелгән ултырышын үткәреү, күргәҙмәләр, этно-фольклор ихаталар ойоштороу ҡаралған. "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле, "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө, "Далан" эстрада төркөмөнөң концерты була.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ОЛОЛАҺАҢ ОЛОНО...

## ололарҙар үҙенде

**Һәр миҙгелдең үҙенең матурлығы бар. Әлеге миҙгелем - ҡартлыҡ. Миңә ҡалһа, ул күпте күреп, күпте уҡып, аҡыл кергән миҙгел. Шуға күрә лә йәшәүҙең мәғәнәһен аңлайһың, көнөлөң көр, иркелә. Үпкәләү, гәрләнеүҙәр, кәмһенеүҙәр ҙә артта ҡалды. Нисек кенә тапап-иҙеп китмәһендәр, шуның артынса уҡ "шытып" сығаһың. Һине хаҡһыҙға кәмһеткән кешенең үҙен йәлләп ҡарайһың. Мин хәҙер ошондай хәлдә йәшәйем. Ләкин минең ошо эске торошомдо йәштәр, урында эшләүсе чиновниктар, ҡайһы саҡта врачтар ҙа аңламай, уларҙы бимазалап йөрөгән бер йолҡош кеүек ҡарайҙар, оло тип тормайҙар - ҡаты бәреләләр.**



Бер ваҡыт шулай, Өфөлә көнө буйы бер поликлиникала ултырырға тура килде. Ярты йыл элек үк сиратҡа яҙылып, операцияға ятырға тип килгәйнем. Үҙебеҙҙең Салауат ҡалаһы поликлиникаһында тикшереү үткән анализдарымды килтермәгәс, дауаханаға һалманылар. Мине инеп ала торған машинаны оҙаҡ көтөргә тура килде. Дауаханаға һалалар, тип уйлап, сумка тултырып ризыҡ алып килгәйнем. Шуларҙы бер аҙ бушатайым, тип, бал банкаһын һәм бауырһаҡты үҙем әле генә булып сыҡҡан кабинеттағы врачҡа ҡалдырып китергә уйланым. Ҡорбан байрамы алдынан сауап булыр, йәнәһе. Ишек төбөндә көтөп ултырыусы берәү ҙә булмағас, кабинетына инеп, врачты буласаҡ байрам менән ҡотлау телмәремде башларға ла өлгөрмәнем, уның тупаҫ ҡысҡырыуынан баҙап, туҡтап ҡалдым. "Выйди сейчас же!" тип екерҙе врач миңә, үҙенең әсәһе йәшендәге инәйгә. Үҙебеҙҙең милләт кешеһе, фән кандидаты, күренекле врачтың тупһайған, ҡыҙарған йөҙөнә ҡарап, бик ныҡ аптыраным, күстәнәсте лә бирә алмайынса, боролоп сығып киттем.

Был хәлдә шул дауаханала дауаланып сыҡҡан бер хажия әхирәтемә һөйләгәйнем. "Үпкәләмәнеңме? Мин булһам, илар инем, һинең иманың көслөрәк икән", - тине әхирәтем. Иман ҡартайғас ҡына нығына шул (әхирәтем минән ун йәшкә йәшерәк).

Ярай, дауахаваларға мөрәжәғәт итеүселәр бер беҙ генә түгел, врачтар, ысынлап та, беҙҙән, ҡарт-ҡоронан йөҙәп тә бөтәлер инде. Әммә беҙҙе, пенсионерҙарҙы, ярларға тейешле учреждениеларҙа ла шундай уҡ тупаҫлыҡ менән осрашабыҙ бит. Халыҡты социаль яҡлау идаралыҡтарын әйтәм. Йөҙ һумлыҡ льготаға яңы ҡарар сыҡһа, унарлаған белешмә йыйып аптыраталар. Ә уларҙың үҙҙәрендә бөтә мәғлүмәттәр ҙә бар. Бер шулай, халыҡса әйткәндә, соцобесҡа инеп, бер документ тураһында мәғлүмәт алырға уйланым. Мин инә торған кабинеттың ишек төбөндә бер кеше лә юҡ, эстә бер пенсионер ғына ултыра. Ул килеп сыҡҡас, кабинетҡа инергә уҡталһам, ишекте теге яҡтан этеп, астырмайҙар. Шунан бер ҡыҙҙың башы күренә һәм "Технический перерыв" тип, "Минең һорауым бәләкәй генә..." тиеүемде лә ишетмәйенсә, ишекте шап иттереп ябып ҡуя. Ә бит минең һорауыма "Эйе" йә "Юҡ" тип кенә әйтергә кәрәк ине. Ошо яуапты алыр өсөн "Технический перерыв"та сәй эскәндәрен ярты сәғәт көтөп ултырҙым...

Үҙем өсөн бер нәмә асыҡланым: беҙҙең кеүек ғүмер аҙағына яҡынлашҡан әбей-бабайҙы берәү ҙә яратмай. Мөхәббәт тураһында әйтмәйем, һүҙем көндәлек тормошобоҙ хаҡында бара. Ҡайҙа ғына барһаҡ та, хакимиәт етәкселәренәме, магазинғамы, табипҡамы, беҙҙе этәләр, ҡыуалар, кәмһетәләр. Был хәлгә өйрәнеп тә бөтөп барабыҙ шикелле. Һәр хәлдә, йәш саҡтағы кеүек ярһымайбыҙ, иламайбыҙ, рәнйемәйбеҙ. Киреһенсә, көлөңкөрәп ҡарайбыҙ. Башҡалар нисектер, үҙем шулай. Бөгөн йылы кабинеттарҙа маһайып ултырған чиновниктарҙың алдағы тормоштарын күҙ алдына килтерәм дә, үҙҙәрен йәлләп тә ҡуям. Тағы бер нисә тиҫтә йылдан улар үҙҙәре лә беҙҙең хәлгә төшә ләбаһа, шуны аңламайҙармы икән ни? Хәйер, беҙ үҙебеҙ ҡылғандарҙы бик күреп бармайбыҙ шул, үҙ ваҡытында баһа бирмәйбеҙ. Ә Аллаһы Тәғәлә күрә, һәр бер аҙымыбыҙҙы, ҡылған ғәмәлдәребеҙҙе теркәп бара. Аҙаҡ килеп, шулар өсөн һәр беребеҙгә яуап тотор көн киләсәк.

Беҙҙе яратмауҙарының тағы бер сәбәбе барҙыр, тип уйлайым үҙемсә. Беҙ хәҙер йөмһеҙ, ҡартлығыбыҙ йыйырсыҡтар, сәстәребеҙгә ҡунған сал булып, әллә ҡайҙан йәштәрҙе өркөтөп тора. Аяҡтарыбыҙҙа - быйма. Өҫтөбөҙҙә ҡасандыр эшләгән ваҡыттарҙа алынған кейем-һалым. Ошондай ҡиәфәттә беҙ фырт ҡына кейенеп, ҡиммәтле хушбуйҙар һөртөп, һөрмәләр тартып йөрөгән йәштәрҙең тыныслығын боҙорға батырсылыҡ итәбеҙ, етмәһә. Башҡа һыйырлыҡ хәлме ни был?..

Нисек кенә булмаһын, мин әле ғәйепләберәк телгә алған белгестәр үҙ эш урынында тырышлыҡ күрһәтеп, уңышҡа ла өлгәшәләр, етәкселәренә лә ярай беләләр. Әммә кешегә эш фәнен белеү генә етмәй шул, иң тәүҙә ниәттәрең изге, башҡарғаның ихлас булырға тейеш. Бәйғәмбәребеҙ әйтеп ҡалдырған бит: "Кеше башҡаларға рәхимле, шәфҡәтле, мәрхәмәтле булмаһа, Аллаһы Тәғәлә уның үҙенә лә рәхмәт ҡылмаҫ..." Ҡорьән-Кәримдә: "Доғаһыҙ тәҡдир үҙгәрмәҫ, изгелекһеҙ ғүмер оҙаймаҫ"- тигән юлдар ҙа бар. Тимәк, изгелекле булмаһаҡ, ғүмерҙең ҡыҫҡарыуы ла ихтимал. Шуға күрә лә йәлләйем мин изгелеккә, шәфҡәтлеккә, рәхимлеккә һаран әҙәмдәрҙе.

**Зәйтүнә КӨСӘПОВА.**
**Салауат ҡалаһы.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# БЕР ТӨРЛӨ ҺӨЙЛӘЙҘӘР,

## икенсе төрлө...

**Шулай гәҙәткә ингән: көнөлөм көр булһын өсөн һәр атҡан таң һайын тиерлек шағирыбыҙ Мостай Кәримдең 1941 йылда яҙған ошо шиғырын ҡабатлайым:**

*Сал ҡартлығын һаҡлап ҡарттарымдың,*
*Һылыуҙарын һаҡлап илемдең,*
*Бөйөклөгөн һаҡлап Иҙелдең,*
*Тыуасаҡ таң, тыуасаҡ яҙ өсөн,*
*Яҙын япраҡланыр гөл өсөн,*
*Тыуыр балам, йырланыр йыр өсөн,*
*Йыр өсөн һәм тыуған ер өсөн -*
*Мин фронтҡа китәм, иптәштәр.*

Эйе, шундай дәһшәтле йылдарҙа ла юғары илһөйәрлек, ныҡлы рух солғаған кешеләрҙе. Әммә күпме ҡорбандар биреп, яуыз дошманды, фашизмды еңгән халҡым әлеге көндәрҙә ниңә көсһөҙләнә, ниңә рухы һүнә бара икән, тип уйланам. Ә бит был күренеш бөгөн генә түгел, 1970 йылдарҙа уҡ күҙәтелә башлағайны. Иҫемдә, 1972 йылда Мәскәүҙә уҡыу йорто тамамлап, диплом тотоп, Өфөгә ҡайттым. Унға, һулға бәреләм, эшкә урынлаша, торлаҡ таба алмайым. Бер көн мәктәп йылдарындағы бер уҡытыусымды осраттым һәм унан:

- Ағай, Өфөлә һәйбәт кешеләр күренмәй, ҡайҙа юғалдылар улар? - тип һорамай булдыра алманым. Уҡытыусы ағайым көрһөндө лә:

- Мәскәүҙә, Третьяков музейында Ивановтың "Явление Христа народу" картинаһын күрҙеңме? - тип һораны.

- Эйе, ҙур бер стенаны биләп эленеп тора ул, ә бүтән стеналарҙа шул әҫәрҙә йыйылған йөҙҙәрҙең эскиздары эленгән, - тинем. Уҡытыусым:

- Эскиздарҙың атамалары "Үкенеүсе", "Икеләнеүсе", "Ҡурҡыусы" һ.б. тип аталғанына ла иғтибар иткәнһеңдер. Бына шундайҙар ғына ҡала бара шикелле хәҙер тормошобоҙҙа. Ҡурҡыу хисе күңелдәргә ныҡлап инеп урынлашты. Күпме гәйрәтле, көслө рухлы ирҙәр яу яланында ятып ҡалды бит. Хәҙер иһә "йәшел йылан" яу асты халыҡҡа. Ул да ныҡлап ҡолға әйләндерә бара ир-егеттәребеҙҙе... - тип тамамланы һүҙен.

...Иҫемдә, бәләкәй саҡта "Минең уйымды әйтеп бир" тигән уйын уйнап сығарғайныҡ. Беҙ һуғыш йылдарында тыуған балалар булараҡ, уйҙарыбыҙ Чапай, Буденный, Гитлер, фашист, һуғыш, Еңеү, йондоҙ кеүек һүҙҙәргә бәйле ине. Яуап бирә алмаһаң, уй уйлаусы "Йә әйт, улайһа, яҡшы кешеме, әллә насар кешеме?" йәки "Насарлыҡмы, әллә яҡшылыҡмы?" тип ярҙам да итеп ебәрә ине. Яратып уйнай инек был уйынды. Сөнки ул Ышанысҡа ҡоролғайны. Яҡшылыҡҡа, батырлыҡҡа, шәхестәргә ышаныуға.

Ә бөгөнгөләрҙе күҙәтһәң, шул бөйөк Ышаныс хисен емереү бара һымаҡ. Төрлө кимәлдә. Дәүләттәр менән дәүләттәр, ойошмалар менән ойошмалар, кешеләр менән кешеләр араһында ышаныс бер һелтәүҙә юҡҡа сығарыла. Хатта ышанып таянырҙай закондар ҙа юҡ тиерлек...

Тағы бала саҡтағы "Минең уйымды әйтеп бир" тигән, ышанысҡа, тоғролоҡҡа, сафлыҡҡа ҡоролған уйыныбыҙ иҫкә төшә. Бөгөнгө "уй уйлаусылар"ҙың уйын әйтеп биреп ҡара һин: бер төрлө уйлайҙар, икенсе төрлө һөйләйҙәр, өсөнсө төрлө эшләйҙәр...

**Айгөл АХУНОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостан халҡы "ҡыҙыу линияға" медицина ярҙамының асыҡлығы һәм сифаты буйынса һорауҙар менән мөрәжәғәт итә ала. Халыҡ менән һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең республика буйынса бүлексәһе етәксеһе Динара Гашимова эшләйәсәк. Телефон аша мөрәжәғәттәр 28 сентябрҙә иртәнге сәғәт 10-дан көндөҙгө 1-гә тиклем Рәсәй Президентының Башҡортостандағы ҡабул итеү бүлмәһендә ҡабул ителә. "Ҡыҙыу линия" телефондары: (347) 229-74-58, 229-74-76.

✔Рәсәй милләтенең берҙәмлеген нығытыу өсөн республика ҡаҙнаһынан 341 миллион һумдан ашыу аҡса йүнәлтелә. Аҡса 2020 йылға тиклем иҫәпләнгән "Башҡортостанда Рәсәй милләтенең берҙәмлеген нығытыу һәм халыҡтарҙы этномәҙәни үҫтереү" махсус программаһына ярашлы буленә. Программа сиктәрендә "Граждандыҡ берҙәмлеген нығытыу һәм милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе яйға һалыу", "Башҡорт халҡының үҙенсәлеген һаҡлау һәм үҫтереү", "Башҡортостан халыҡтарының этномәҙәни төрлөлөгөн һаҡлау" ярҙамсы программаларын тормошҡа ашырыу ҡаралған.

✔Башҡорт дәүләт филармонияһы солисы Марсель Ҡотоев Ҡаҙағстан радиоһы проекты - "Бөйөк даланың тауышы" IV Халыҡ-ара радиофестивалендә Башҡортостан исеменән сығыш яһай. Ул "Ана туралы жыр" ҡаҙаҡ халыҡ йырын башҡарып, "Яңы исем" номинацияһында тәүге урынға сыҡты. 28 сентябрҙә фестивалдең гала-концерты, еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы була.

✔Башҡортостанда янғынға ҡаршы махсус режим бөтөрөлдө. Был урман янғындарына бәйле хәлдең тотороҡланыуына бәйле. Янғын хәүефе миҙгеле башланғандан алып Башҡортостанда 148 урман янғыны теркәлгән. Шуларҙың 37-һе - халыҡтың ут менән һаҡһыҙ эш итеүе, 88-е йәшен арҡаһында сыҡҡан, дүртәүһе ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары сүплегенән күскән, тағы икәүһе ауыл хужалығы үртәнән тоҡанған. Ҡалған 17 янғындың сәбәптәре асыҡлана. Төбәктә янғындан зыян күргән урмандарҙың дөйөм майҙаны яҡынса 615 гектар тәшкил иткән.

✔Республикала килһе йылғы уныш өсөн ерҙе эшкәртеү дауам итә. Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, яҡынса 823 мең гектар майҙанда ер тунға һөрөлгән, был пландың 57 процентын тәшкил итә. Стәрлетамаҡ районы аграрийҙары тәүгеләрҙән булып тунға һөрөүҙе тамамланы.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## БАРЫҒЫҘ ҘА ӨМӘГӘ!

**Баш ҡалала территорияларҙың таҙалығына, төҙөклөгөнә, тышҡы йөҙөнә ҙур иғтибар бирелә.**

Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр көн һайын һәм тәүлек әйләнәһенә, ялһыҙ, байрамһыҙ үҙҙәренә беркетелгән участкаларҙың таҙалығын хәстәрләй. Ҡалала төҙөкләндереү эштәре 15 сентябрҙә башланып, 20 октябргә тиклем дауам иткән территорияларҙы санитар таҙартыу буйынса айлыкта ла дауам итәсәк. Предприятие, ойошма, учреждениелар етәкселәренә үҙҙәренә беркетелгән территорияларҙы таҙартыу йөкмәтелгән. Бөгөн, 24 сентябрҙә, Өфөлә дөйөм ҡала өмәһе үтә.

## ХАЛЫҠ ШАҒИРЫН ХӨРМӘТЛӘП

**Профсоюздар йорто эргәһендәге әҙиптең исемен йөрөткән һәм уның һәйкәле торған скверҙа Башҡортостандың Халыҡ шағиры Мостай Кәримдең Хәтер кисәһе үтте.**

Сарала Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, шағирҙың яҡындары һәм туғандары, Башҡортостан яҙыусылары, М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы, ҡаланың милли йөкмәмбе мәктәбе уҡыусылары, туған телдәр уҡытыусылары һәм ҡала халҡы ҡатнашты.

Мостай Кәрим "Өфө ҡалаһының почетлы гражданины" исемен алыуы менән ғорурланып, бик йыш, бөтөн донъяла билдәле булып та, властар һәм халыҡ тарафынан танылып та, үҙ ҡалаһында абруйын булмауы мөмкин, тип ҡабатлар булған. Ысын халыҡ шағиры булараҡ, ул һәр саҡ халыҡ араһында, уның күҙ алдында булды. Бөгөн дә Мостай Кәрим исемендәге сквер халыҡ менән тулы, был урын өфөләрҙең генә түгел, баш ҡала ҡунаҡтарының да яратҡан урынына әүерелде.

## БАШҠОРТ БАЛЫ ДАНЫ

**Башҡортостан вәкилдәре Ҡаҙағстанда "Апиславия" XXI Умартасылар ойошмалары федерацияһы конгресында лайыҡлы сығыш яһаны.**

Республика командаһы иҫәбендә конгресс күргәҙмәһенең Гран-приһы, "Балауыҙҙан яһалған әйберҙәр" номинацияһында - алтын, "Кәрәҙле бал" һәм "Бер төрлө сәскә балы" номинацияларында көмөш миҙалдар бар. "Төргәк дизайны" номинацияһында Башҡортостан бронза миҙал яуланы. Бынан тыш, төбәк "Апиславия-2016" конгресының махсус призына - кәрәҙҙәге бал ҡорто рәүешендә эшләнгән сувенир сәғәтенә лайыҡ булды. Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, республика 29 ил араһында Рәсәй намыҫын яҡланы. Беҙҙең илдән Башҡортостан предприятиелары ғына ҡатнашты. Улар иҫәбендә Башҡортостан апитерапия һәм умартасылыҡ буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге, шулай уҡ республиканың фермер хужалыҡтары бар. Күргәҙмә-йәрминкәлә 100-ҙән ашыу төр продукция тәҡдим ителде. "Апиславия-2016" халыҡ-ара конгресында яуланған уныш 2021 йылда Өфөлә "Апимондия" халыҡ-ара форумын һәм "АпиЭКСПО" халыҡ-ара күргәҙмәһен уҙғарыуға дәғүә иткән Башҡортостан өсөн айырыуса мөһим. Умартасылыҡ өлкәһендәге ике ҙур сараны үткәреү урыны киләһе йылда билдәле буласаҡ.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҺАЙЛАУҘАР ҮТТЕ,

## һөҙөмтәләр барлана




**Берҙәм һайлау көнөндә Башҡортостанда 3 млн 40 мең 701 һайлаусының 2 млн 121 мең 993-ө һайлау хоҡуғын файҙаланған, был һайлаусыларҙың 69,78 процентын тәшкил итә. Иҫәпләүҙәр буйынса, партиялар араһында "Берҙәм Рәсәй" беренсе урында, һайлаусыларҙың 56,37 проценты улар өсөн тауыш биргән. Икенсе урында - КПРФ, өсөнсө урында - ЛДПР. "Ғәҙел Рәсәй" сәйәси партияһы 6,88 процент тауыш йыйған, ҡалған партияларҙың һәр береһенә республика һайлаусыларының 1 проценттан кәмерәк тауышы бирелгән.**

Дәүләт Думаһында Башҡортостан халҡының мәнфәғәттәрен дүрт парламент партияһынан 15 депутат яҡлаясаҡ. Төбәктә "Берҙәм Рәсәй" партияһы иң күп мандатҡа эйә булды - республика халҡы 11 кешегә ышаныс белдерҙе. Алты кеше партия исемлеге буйынса үтте. Улар - Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов, Инга Юмашева, Рафаэль Мәрҙәншин, Рима Баталова, Рәмзил Ишһарин һәм Фәрит Ғәниев. Тағы ла бишәүһе бер мандатлы округтарҙа еңеп сыҡты. Улар - Павел Качкаев, Илдар Бикбаев, Зөһрә Рәхмәтуллина, Зариф Байғуҫҡаров һәм Алексей Изотов.

6-сы Нефтекама бер мандатлы һайлау округында "Гражданлыҡ платформаһы" федераль сәйәси комитеты башлығы Рифат Шәйхетдинов еңеү яуланы.

Партия исемлеге буйынса республиканан Дәүләт Думаһына Александр Ющенко (КПРФ), Гаджимурад Омаров ("Ғәҙел Рәсәй") һәм Иван Сухарев (ЛДПР) үтте.

Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға өстәмә һайлауҙар ике округ - 2-се Иноре бер мандатлы һайлау округы һәм 19-сы Нарыш бер мандатлы һайлау округы буйынса үтте. Унда 8 кандидат үҙ-ара көс һынашты. Һөҙөмтәләр буйынса, 2-се Инорс округы буйынса Өфө ҡала округы Советы рәйесе Евгений Семивеличенко, Нарыш округы буйынса Раил Фәхретдинов еңде.

Һайлауҙарҙа Баҡалы, Ҡаризел, Тәтешле һәм Саҡмағош, Өфөлә Дим, Совет һәм Калинин районы халҡы әүҙем ҡатнашты.

Өфө ҡала округы Советы һайлауҙары һөҙөмтәләре буйынса "Берҙәм Рәсәй" - 23 мандат, КПРФ - 4 мандат, ЛДПР - 3 мандат, "Рәсәй патриоттары" - 1 мандат, "Йәшелдәр" Рәсәй экологик партияһы - 1 мандат, "Рәсәй пенсионерҙарының ғәҙеллек өсөн партияһы" 1 мандат алды. Бынан тыш, Өфө ҡала Советының IV саҡырылыш депутаттары исемлегенә үҙен тәҡдим итеүсе 3 кандидат инде. Бер мандатлы округтар буйынса Юрий Смирнов ("Берҙәм Рәсәй"), Сергей Копысов ("Берҙәм Рәсәй"), Сергей Гордеев ("Берҙәм Рәсәй"), Таһир Сафиуллин ("Берҙәм Рәсәй"), Руслан Кинйәҡәв ("Йәшелдәр" Рәсәй экологик партияһы), Юрий Васильев ("Берҙәм Рәсәй"), Павел Васильев ("Берҙәм Рәсәй"), Алина Сөләймәнова ("Берҙәм Рәсәй"), Юлия Романчева (КПРФ), Артур Абдуллин (үҙен тәҡдим итеүсе), Айҙар Зөбәйеров ("Берҙәм Рәсәй"), Тимофей Вохмин ("Берҙәм Рәсәй"), Светлана Родионова ("Рәсәй пенсионерҙарының ғәҙеллек өсөн партияһы"), Марат Әхмәҙуллин ("Берҙәм Рәсәй"), Андрей Носков (үҙен тәҡдим итеүсе), Иосиф Марач (үҙен тәҡдим итеүсе), Вадим Лукьянов ("Берҙәм Рәсәй"), Андрей Борисов ("Берҙәм Рәсәй") һайланды.

Берҙәм һайлау округы буйынса ҡала округы Советы составына "Берҙәм Рәсәй" партияһынан Валерий Трофимов, Руслан Солтанов, Руслан Ғизәтуллин, Сергей Бубличенко, Руслан Зинәтуллин, Ирина Николаева, Александр Соснин, Тәнзилә Ниғмәтуллина, Руслан Ишбулатов, Рөстәм Мукаев, Николай Калмацкий, КПРФ вәкилдәре Юнир Ҡотлоғужин, Анатолий Горячев, Вадим Рамазанов, "Рәсәй патриоттары" вәкиле Артур Хажиғәлиев, ЛДПР вәкилдәре Владимир Жириновский, Иван Сухарев һәм Вячеслав Рябов инде.

Баш ҡаланың вәкәләтле органдарына депутаттар 18 бер мандатлы һайлау округы һәм берҙәм ҡала округы буйынса үтте. Һайлау алды кампанияһында 208 кандидат көс һынашты. Кандидаттар араһында өсөнсө саҡырылыш депутаттары ла бар ине.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ЭШҠЫУАРҘАР ҺӘМ...

**2016 йылдың сентябренән Башҡортостан Республикаһы буйынса Росреестр идаралығы күсемһеҙ милеккә хоҡуҡты дәүләт тарафынан теркәүҙең ваҡытын ҡыҫҡартты һәм федераль ҡануниәт буйынса 10 эш көнө урынына 7-8 эш көнөнә ҡалдырҙы. Хәҙер Башҡортостанда эшҡыуарҙар күсемһеҙ милеккә хоҡуғын 5-7 эш көнө эсендә теркәй ала.**

Юридик шәхестәрҙең ғаризаһы буйынса Өфөлә һәм Өфө районында урынлашҡан объекттарҙы теркәү - 7, башҡа ҡала һәм районлар өсөн 5 эш көнө эсендә башҡарыласаҡ. Өфөләр бының өсөн документтарҙы СССР-ҙың 50 йыллығы урамы, 30/5 адресы буйынса урынлашҡан Күп функциялы үҙәк офисы аша тапшырырға тейеш. Күп функциялы үҙәк менән БР буйынса Росреестр идаралыҡтары офистары бергә ҡушылған ҡала һәм райондарҙа документтарҙы Күп функциялы үҙәктән Росреестрға һәм унан кире үҙәккә алып ҡайтыуға киткән ваҡыт (тағы ла 4 эш көнө) өҫтәлмәйәсәк. Был яңы-

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Халыҡ-ара шашка буйынса 2016 йылдағы Донъя кубогының финал һөҙөмтәләре билдәле булды. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында былтырғы еңеүсе Тамара Танһыҡҡужина икенсе урын алды, өсөнсөлә - Айгөл Иҙрисова. Ир-егеттәр араһында гәмәлдәге донъя чемпионы Александр Георгиев - өсөнсө, Айнур Шайбәков - дүртенсе, Муродулло Амриллаев һигеҙенсе урын яуланы.

✔Өфөлә Рәсәй Рәссамдар союзының Алтын коллекцияһы менән танышырға мөмкин. Экспозиция М.В Нестеров исемендәге художество музейының дүрт залында урынлашҡан. Ул XX быуат рәссамдарының һынлы сәнғәт, графика, скульптура, халыҡ сәнғәте әҫәрҙәренән, совет һынлы сәнғәте коллекцияһынан тора. Әҫәрҙәрҙең төп йүнәлеше - тормошто реаль һүрәтләү. Күргәҙмә XX быуат һынлы сәнғәт тарихының ҙур осорон үҙ эсенә ала. Музейға ҡуйылған иң беренсе эш - 1913, иң һуңғыһы 1993 йылда иждат ителгән. Күргәҙмә 13 ноябргә тиклем эшләй.

✔Өфөлә Фёдор Шаляпин исемендәге I Халыҡ-ара вокалсылар конкурсы асылды. Унда Башҡортостандан Башҡорт опера һәм балет театры солистары Артур Ҡәйепҡолов, Элина Ғәлимуллина, Рим Рәхимов, Салауат Кейекбаев, Башҡорт дәүләт филармонияһы солистары Динә Хөсәйенова һәм Әлиә Исҡужина, Өфө сәнғәт институты студенттары Дамир Тайыпов һәм Кирилл Белов ҡатнаша. Сығыштарҙы Рәсәйҙең күренекле мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре баһалай. Баһалама комиссияһы рәйесе - Башҡортостандың халыҡ артисы Асҡар Абдразаҡов.

✔Башҡортостан биләмәһенә сусҡаларҙың Африка тағунын индермәү өсөн Илеш һәм Бүҙәк райондарындағы трассаларҙа автотранспорт өсөн махсус йыуыу пунктары асылды. Бында ветеринария хеҙмәте контроле аҫтында сусҡа ите, ҡатнаш аҙыҡ һәм малсылыҡ ҡалдыҡтарын ташыған автотранспортты йыуалар һәм дезинфекциялайҙар. Башҡа йүнәлештәрҙә лә, атап әйткәндә, Ырымбур өлкәһе менән сиктәш трассала ошондай пункттар асыу күҙаллана. Быйыл алты айҙа илдең 17 төбәгендә сусҡаларҙың Африка тағуны сире осраҡтары теркәлгән. Башҡортостан хәүеф янаған төбәккә индерелгән.

✔Кино йылында Башҡортостан асылған кинозалдар һаны буйынса лидерҙар иҫәбенә инде. Учалы, Дүртөйлө, Күмертау ҡалаларында кинотеатрҙар асылды, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәтендә.

✓ *Проект 2016 йылдың 1 июненән федераль программа буйынса бирелгән ипотека кредиттары буйынса процент ставкаһын өҫтәмә субсидиялауҙы күҙ уңында тота.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ!

**Быйылғы уҡыу йылы Башҡорт дәүләт аграр университеты студенттары хәтерендә ныҡ уйылып ҡалыр, моғайын. Ни өсөн тигәндә, 1 сентябрь Рәсәйҙәге комбайндар етештереүсе иң төп завод - "Ростсельмаш" компаниялар төркөмө БДАУ студенттары өсөн өр-яңы, мультимедия ҡоролмалары менән йыһазландырылған заманса уҡыу бүлмәһе һәм ғәмәли әсбап-комбайн бүләк итте. Аудиторияның һәм комбайндың асҡыстарын яңы хужаларына тапшырыу тантанаһында "Ростсельмаш"тың Башҡортостандағы рәсми дилеры "Акрос РБ" компанияһы хеҙмәткәрҙәре, шулай уҡ "Ростсельмаш"тың Башҡортостандағы вәкиле, БР Ауыл хужалығы министрлығы белгестәре, БДАУ уҡытыусылары һәм студенттар ҡатнашты.**



# СТУДЕНТТАРҒА БҮЛӘККӘ...

## комбайн һәм аудитория!

Уҡыу йорто проректоры Марс Фархшатов үҙенең тәбриклəү сәләмен ҡушып, былай проекттарҙың әһәмиәтен, "Ростсельмаш" менән ике яҡ өсөн дә файҙалы хеҙмәттәшлектең артабан да дауам итеренә ышаныысын белдерҙе. Киләсәктә университет студенттарын компанияға практика үтергә ебәреү, уларҙың иң-индәрен "Ростсельмаш"та эшкә ҡалдырыу мөмкинлеге тураһында ла әйтте. Компанияның Башҡортостандағы рәсми вәкиле Алексей Таможников проректорҙың һүҙҙәрен ҡеүәтләп: "Ауыл хужалығы тармағында, ерҙә эшләүсе хеҙмәткәрҙәрҙең, йәки беҙҙең төп һатып алыусыларыбыҙҙың талабын сифатлы итеп ҡәнәғәтләндереү - "Ростсельмаш" компанияһының стратегик маҡсаты булып тора", - тине һәм заводтың үткәне, бөгөнгөһө менән ҡыҫҡаса таныштырып үтте. Билдәләнеүенсә, "Ростсельмаш" - "Нива", "Дон" комбайндарын етештереүсе 1929 йылдан эшләп килгән компания, ул әлеге көндә Рәсәйҙә, АҠШ-та, Канадала, Европала эшләп килгән 13 предприятиенан торған берләшмәне тәшкил итә, уның тауары донъяның 56 илендә ҙур һорау менән файҙалана.

Башҡорт дәүләт аграр университетына күрһәтелгән ярҙам тәүгеһе түгел икән - быға тиклем дә бер аудитория һәм бер комбайн бүләк ителгән булған. Компания "Мәғариф" программаһына ярашлы илдең ауыл хужалығы белгестәре әҙерләүсе башҡа юғары уҡыу йорттарына ла ошондай уҡ ярҙам күрһәткән. "Ростсельмаш"тың былай ярҙамының маҡсаты - улар етештергән техниканы файҙалана, йүнәтә белгән һәм уның сит ил машиналарынан ҡалышмаған, хатта ҡайһы бер күрһәткестәре буйынса уларҙы үтеп киткән техника булыуын аңлаған белгестәр тәрбиәләү. Заманса мультимедия ҡоралмалары, уҡыу әсбаптары менән йыһазландырылған аудиторияла теоретик белемгә эйә булған механика факультеты студенттары үҙҙәренең белемен университет эсенә уҡ индерелгән "Акрос 550" комбайнын һүтеп-йыйып, ғәмәлдә ҡулланып өйрәнәсәк. Тимәк, "Ростсельмаш"тың изге ниәте аҡланасаҡ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

***Ил йәшәһен өсөн ул үҙен-үҙе туйындырыу көсөнә эйә булырға тейешлеге тураһында киң мәғлүмәт сараларында йыш әйтелә. Унышлы эшләп килгән "Ростсельмаш" командаһының үҙ тауарын энәһенән-ебенә тиклем белгән белгестәр тәрбиәләргә ынтылып, ауыл хужалығы тармағын көс һалыуында иҡтисади тотороҡлоҡҡа ынтылыш менән бергә, халыҡтың юғары кимәлдәге көнитмешен һәм дәүләттең һаҡланып ҡалыуын тәьмин итерлек идея төҫмөрләнгәндәй.***

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

лыҡ Өфө ҡалаһына ла ҡағыла: юридик шәхес исеменән Өфөләге күсемһеҙ милек объекттарына өҫтә әйтелгән адрес буйынса документтар тапшырылғанда был көндәр өҫтәлмәйәсәк, тимәк, Өфө эшҡыуарҙары күсемһеҙ милеккә хоҡуҡын 7 эш көнө эсендә теркәйәсәк. Документтарҙы электрон формала тапшырғанда хоҡуҡты теркәү 2 көн эсендә башҡарыла. Быға тәҙәүсе беренсе ҡатнашыусы менән тәҙәләштә өлөшсө булараҡ ҡатнашыу тураһындағы килешеүҙәр инмәй, уларҙы теркәү - 4 эш көнө. Хоҡуҡты ҡыҫҡартылған ваҡытта - 5 эш көнө эсендә теркәү граждандарҙың льготалы категорияһына ла ҡағыла: күп балалы ғаиләләр һәм инвалид бала тәрбиәләгән атаәсәләр ер биләмәһен теркәгәндә, шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар һәм ышаныс ҡағыҙы буйынса уларҙың исеменән сығыш яһаусылар.

Хәҙер Росреестр порталы аша күсемһеҙ исемлекте кадастр иҫәбенә ҡуйыу ҙа аҙыраҡ ваҡытта атҡарыла: ер участкалары өсөн - 3 эш көнө, капиталь төҙөлөш объекттары өсөн 5 эш көнөнә тиклем.

# ...ЙӘШТӘР ҠОЛАҒЫНА

% **Башҡортостан Хөкүмәте торлаҡ кредиттары буйынса проценттарҙы түләүгә сығымдарҙың бер өлөшөн республика ҡаҙнаһынан өҫтәмә субсидиялау тәртибен раҫланы.**

Документ төбөктә федераль субсидиялау программаһы сиктәрендә бирелгән кредиттар буйынса ипотека процент ставкаһын йылына 10 процентҡа тиклем өҫтәмә субсидиялау иҫәбенә яңы торлаҡҡа дәғүә итеүсеәләр һанын арттырыуға йүнәлтелгән пилот проектын тормошҡа ашырыу өсөн әҙерләнгән. Алдан хәбәр ителгәнсә, проект 2016 йылдың 1 июненән федераль программа буйынса бирелгән ипотека кредиттары буйынса процент ставкаһын өҫтәмә субсидиялауҙы күҙ уңында тота. Программала ҡатнашыусыларҙың исемлеге "Рәсәй ғаиләһе өсөн торлаҡ" программаһында ҡатнашыуға хоҡуҡлы граждандар менән сикләнгән. Бында торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаждар сифатында иҫәптә тороусылар, шулай уҡ 35 йәшкә тиклемге йәш ғаиләләр һәм күсемһеҙ милектәре булыу-булмауға ҡарамаҫтан, ике һәм унан да күберәк балиғ булмаған бала тәрбиәләгән ғаиләләр инә.

Сара республика ҡаҙнаһы аҡсаһы иҫәбенә финанслана. 2016 йылда ошо маҡсатҡа 27,7 миллион, киләһе йылдарҙа йыл һайын 50 миллион һум ҡаралған. Финанслау күләменән сығып, программаға 1800 самаһы кредитты индерергә мөмкин. Ҡабаттан иҫәпләгәндә, өҫтәмә торлаҡ төҙөү яҡынса 97 мең квадрат метр тәшкил итәсәк.

## ҺОРАУ-ЯУАП



### ТАШЛАМАЛАР

**Ағайыма, II төркөм инвалиды булараҡ, торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр менән ҡулланған өсөн ташлама ҡаралған. Әлегә тиклем ул ошо хоҡуғы менән ҡулланып килде, ләкин барлыҡҡа килгән бурысы һөҙөмтәһендә ташламаны алдылар. Был законға ярашлымы?**

**Яуап:** Законда торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙә ташламалар менән ошо өлкәлә бурысы булмаған кеше генә ҡулланыу хоҡуғына эйә, тиелгән. Тимәк, ағайығыҙға ҡарата закон боҙолмаған. Шулай ҙа, әгәр ташлама хоҡуғына эйә булыусы торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр күрһәтеүсе ойошма менән бурысын ҡайтарасағы тураһында килешеү төҙөһә, компенсация туҡталмай. Был РФ Торлаҡ кодексының 160-сы статьяһында аныҡланған. Шуға күрә, әгәр ҙә ағайығыҙ тиҙ арала бурысын ҡаплау мөмкинлегенә эйә булмаһа, тәү сиратта ошондай килешеү төҙөү тураһындағы үтенес менән хеҙмәт күрһәтеүсегә мөрәжәғәт итә ала. Ләкин былай килешеү төҙөү ҡулланыусының да, коммуналь ойошманың да ихтыяры нигеҙендә башҡарыла һәм былай килешеүҙе мотлаҡ төҙөүҙе ағайығыҙ талап итә алмай.

### ҠЫҪҠАРТЫУ

**Улымды яңғыҙым тәрбиәләйем. Уға оҙаҡламай 15 йәш тула. Эш урынымда мине ҡыҫҡарта алалармы?**

**Яуап:** Законға ярашлы, 14 йәшкә тиклемге баланы бер үҙе тәрбиәләгән әсәне (атаны) ҡыҫҡартырға ярамай. 15 йәше тулған баланы ҡараусы яңғыҙ әсәй йәки атай былай хоҡуҡтан мәхрүм.

### АЛИМЕНТ

**Иремдең тәүге ғаиләһендә тәрбиәләнгән балаға алимент түләү бурысы уның үлеменән һуң миңә күсәме?**

**Яуап:** Алимент түләүсе кешенең вафатынан һуң алимент йөкләмәһе юғала. Былай йөкләмә мираҫ буйынса күсмәй, ә автоматик рәүештә туҡтай. Һеҙгә хафаланыу өсөн бер ниндәй ҙә сәбәп юҡ.

### ҺАЛЫМСЫЛАР НИ ӘЙТЕР?

**Мин хеҙмәт биржаһында иҫәптә торам. Биржа түләгән аҡсанан башҡа ғаиләбеҙҙә бүтән килем юҡ. Фатир, баҡса һәм еңел автомобиль өсөн һалым түләү бик ауырға төшә. Бәлки, минең кеүек эшһеҙлек буйынса иҫәптә тороусыларға ниндәй ҙә булһа ташламалар ҡаралғандыр?**

**Яуап:** Ҡыҙғаныуға күрә, эшһеҙлек буйынса хеҙмәт биржаһында иҫәптә тороусыларға һалым түләүҙә бер ниндәй ҙә ташламалар юҡ. Һеҙгә финанс хәлегеҙҙең ауыр булыуын иҫбатлаусы документтарҙың күсермәһен беркетеп, түләү буйынса кисектереүҙе йәки әҙләп түләүҙе һорап ғариза яҙып, урындағы һалым инспекцияһына мөрәжәғәт итеү, бәлки, ыңғай һөҙөмтә бирер. Һалым инспекторҙары хәлегеҙгә инеп, һалымдарҙы түләүгә бирелгән ваҡытта оҙайтырға йәки бүлеп түләргә рөхсәт бирергә мөмкиндәр.

**Наҙгөл САФУАНОВА әҙерләне.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тән бешкәндә

❖ Яңы ғына бешкән урынға әсе ҡаймаҡ һөртөргә.

❖ Ҡаты итеп бешерелгән йомортҡаны һыуыҡ һыуҙа тотоп, һарыһын алырға ла, сәнскегә сәнсеп, талғын ут өҫтөндә тоторға. Унан шыйыҡса бүленеп сығыр, уны балғалаҡҡа йыйып тороғоҙ. Был "май"ҙы бешкән тиргә һөртөргә. Ныҡ бешкән ерҙә лә йөй ҙә ҡалмаç был дауанан һуң.

❖ Бер йомортҡа ағын бер ҡалаҡ йомшаҡ май менән туҡырға һәм бешкән ергә һөртөргә. Аҡһым яраны киптерә, ә май туҡымаларҙы туҡландыра, бактерияларҙ ҙа үрсей алмай.

### Арҡа мейеһе ауыртһа

❖ Арҡа мейеһе (умыртҡалыҡта) ауыртһа, ҡара торманы ҡабығын әрсемәйенсә ҡырғыстан үткәрергә, һутын һығырға, торманың сепрәккә һалып, ауыртҡан ергә ҡуйырға. Бинт, уның өҫтөнән мамыҡ шәл йәки шарф менән бәйләп ҡуйырға. Әсетә башлаһас, сисеп алырға.

❖ Ауыртҡан ергә йоҡаҡ ҡына итеп бал һөртөргә лә, ике ҡат ҡағыҙ таҫтамал менән ҡапларға. Өҫтөнә ике горсис ҡағыҙы (горчичник) ҡуйырға, мамыҡ шәл менән ҡапларға. Был дауаны 1,5 сәғәттән ары тотмаҫҡа.

### Үҙәк көйгәндә

❖ Үҙәк ныҡ көйгәндә ҡайын ботағын яндырып, шуның көлөн һыу менән эсергә.

### Тынысланыу өсөн

❖ Тиҙ ҡыҙып киткән кешене "һүрелтеү" өсөн 1/3 стакан сөгөлдөр һутын 2-3 сәғәт һалҡынса урында тоторға, шул уҡ күләмдә бал ҡушырға, көнөнә 2-3 тапҡыр эсергә.

### Йоҡоһоҙлоҡ

❖ Ныҡ көйәләнеп, йоҡлай алмаһағыҙ, бер ҡалаҡ һуҡыр кесерткәнде сәй кеүек бешереп эсергә.

### Һаҡланығыҙ

❖ Ирен буяғыстарҙың ҡулланыу ваҡыты сыҡҡан булһа, ташлағыҙ. Уны һөрткәндән ирендәрҙә яман шеш, ҡутыр, күпертке барлыҡҡа килеүе ихтимал.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

***✓ Сит ил әкиәт геройҙары, йәнһүрәттәре геройҙарын ҡулланғансы, балаларға кескәй саҡтан билдәле башҡорт халыҡ әкиәттәрендәге батырҙар тураһында мәсьәләләр төҙөү отошло килеп сығыр ине.***



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

Башҡорт халыҡ медицинаһында 30-ҙан ашыу төрлө минералдар һәм химик матдәләр ҡулланылған: уларҙың ҡайһылары менән (көкөрт, әсеүташ, күкташ һ.б.) айырыуса йыш файҙаланғандар.

Эсәктәрҙә паразит селәүсен булғанда, эс ауыртҡанда, йүткереү йөҙәткәндә, сиҡан йыш сыҡҡанда көкөрт онтағын ҡулланғандар. Ҡулланыуҙың ике төрө билдәле: бер семтем (йәки ярты балғалаҡ) көкөрт онтағын, икмәккә һибеп, иртәнсәк һәм кисен ас ҡарынға ашағандар йәки шул уҡ миҡдарҙағы көкөрттө ярты стакан һөткә йәки ҡатыҡҡа һалып болғатып, шулай уҡ иртәле-кисле эскәндәр. Утта ҡыҙҙырып, ныҡ киптерелгән көкөрт онтағын сейләнеп торған яраға, ҡырҡылсан тимерәү таптарына һибелгән, көкөрттән дауа майы ла яһалған. Дауа майын әҙерләү өсөн көкөрт булмаһа, көкөртлө матдәләр (шырпы башы, дары) ҡулланылған.

Әсеүташты ауыҙ, тел боҙолғанда, ауыҙлыҡ ауырыуынан файҙаланғандар. Әсеүташ кисәген кәнфит кеүек һурғандар йәки был минералды онтап ҡыҙҙырғандар ҙа зарарланған ергә һипкәндәр. Иретмә яһап, ауыҙҙы сайҡау рәүешендә ҡулланыу ҙа билдәле. Күҙ ҡабағы ситтәре сейләнгәндә лә әсеүташ иретмәһе һөртөлгән. Теш ите оҙаҡ эренләп шешеп йөрөһә, уны әсеүташ онтағы менән ышҡығандар. Йүткереү оҙаҡҡа һуҙылғанда бер семтем әсеүташ онтағын ҡурай ярҙамында өрөп тамаҡ төбөнә индергәндәр. Күҙгә арпа сыҡҡанда ла уны әсеүташ менән көйҙөргәндәр.

Күкташ төрлөсә ҡулланылған. Онтап ҡыҙҙырып киптерелгән күкташ менән сейләнеп торған яраны, эренле сабыртманы эшкәрткәндәр. Ауыҙ эсе боҙолғанда ошондай уҡ сара ҡүрелгән. Эренле сабыртмаға ҡаршы күкташ онтағынан әҙерләнгән дауа майы ла ҡулланылған. Ауыҙ эсе боҙолғанда күкташ иретмәһе менән сайҡағандар. Һыҙлаған теш соҡорона күкташ бөртөгө һалғандар.

Башҡорт халыҡ медицинаһы дауалары араһында гәҙәттәге аш тоҙо ла бар. Теш ите эренләп шешкәндә ваҡ итеп төйөлгән аш тоҙо менән ышҡығандар. Аяҡ табандары ныҡ тирләгәндә аш тоҙо иретмәһенә баҫҡандар (2-3 аш ҡалағы тоҙ бер литр тирәһе эҫе һыуҙа иретелгән). Һинатыр онтағы күк йүтәл булғанда, йөрәк ауыртҡанда, эс киткәндә эселгән. Уны бысаҡ осона һыйырлыҡ ҡына миҡдарҙа ас ҡарынлай иртәле-кисле йотҡандар. Дауаланыу бер нисә көн барған. Нишатырҙың көсһөҙ иретмәһен күҙгә аҡ төшкәндә һөрткәндәр.

Дауалау маҡсатында терегөмөш тә ҡулланылған. Уның кескәй генә тамсыһын ҡолаҡтан эрен киткәндә ҡолаҡ тишегенә һалғандар. 1-2 сәғәт үткәс, терегөмөш ҡолаҡтан алынған. Йөҙәткес эс китеү менән яфаланғанда бәләкәй генә терегөмөш тамсыһын йотҡандар.

Башҡорттарҙа "яра ташы" тип йөрөтөлгән матдә (кальцит) онталған хәлдә тимерәү таптарына һибелгән. Был минерал халыҡ хирургияһында ла ҡулланылған. Күҙ шешкәндә таң алдынан алынған йылға, күл һыуы менән йыуғандар. Ләм, ҡом, ҡыҙыл балсыҡ нигеҙҙә халыҡ физиотерапияһы һәм хирургияһында ҡулланылған.

Материалдар күрһәтеүенсә, башҡорт халыҡ медицинаһында ҡысытыу менән үтеүсе күп төрлө тире ауырыуҙарын нефть менән дауалағандар. Эсәк-ҡарында паразит селәүсендәр булғанда аҙ миҡдарҙа кәрәсин эскәндәр. Карбол кислотаһы менән сылатып, теш һыҙлауын баҫҡандар. Шул маҡсатта нишатыр спирты, хушбуй ҡулланылған.

Кер һабыны менән йыуып, бешегеүҙе дауалағандар. Күҙ шешкәндә еҫле һабын менән йыуынғандар.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**
**(Дауамы бар).**

*ҺИММӘТЛЕ ФЕКЕР*

# ДӘРЕСЛЕКТӘР...

## талапҡа яуап бирмәй

**Беҙ, уҡытыусылар, милли мәктәптәрҙә балаларҙы башҡортса фекерләргә өйрәтеү мөһим, тигән талап менән килешәбеҙ. Быны өсөн баланы башланғыс синыфтан алып башҡортса яҙылған дәреслектәр буйынса уҡытырға кәрәк. Ләкин бөгөнгө дәреслектәр ошо талапҡа ниндәй кимәлдә яуап бирә һуң?**




Башланғыс синыфта уҡыу-уҡытыу комплектын һайлап алыу мөмкинлеге юҡ, сөнки "Математика" (Демидова, Козлова), "Тирә-яҡты өйрәнеү" (Вахрушев) дәреслектәре генә башҡортсаға тәржемә ителгән. А.А. Вахрушев авторлығындағы "Тирә-яҡты өйрәнеү" дәреслегендә темалар эҙмә-эҙлекле бирелмәгән, был үҙләштереүҙе ауырлаштыра. Л.Н. Әминова, М.С. Дәүләтшина авторлығындағы "Рус теле" дәреслеге эш дәфтәре менән тап килмәй. Был уҡыусыларға дәрескә әҙерләнгәндә мәшәҡәт тыуҙыра.

Бындай етешһеҙлектәрҙе төҙәткәндә беренсе синыф уҡыусылары өсөн "Литературное чтение" дәреслеген (авторы: Т.Е. Харисова, Ф.Ш. Сынбулатова) өлгө итеп күрһәтергә булыр ине. Сөнки дәреслек менән эш дәфтәре бер-беренең тап килтереп, эҙмә-эҙлекле итеп төҙөлгән. "Әлифба", "Башҡорт теле", "Әҙәби уҡыу" дәреслектәре лә уңышлы эшләргә мөмкинлек бирә, уҡыусылар яратып ҡабул итә.

Ә бына башланғыс синыфтар өсөн Т.Е. Демидова, С.А. Козлова авторлығындағы "Математика" дәреслектәрендә башҡорт балаларына таныш булмаған әкиәт геройҙары мәсьәләләрҙең төп йөкмәткеһен тәшкил итә. Мәҫәлән, беренсе синыф уҡыусылары Пеппи-Длинный чулок тураһында әкиәтте уҡымаған, улар был әҫәрҙәге геройҙарҙы белмәй. Әкиәт тураһында һөйләп, геройҙары менән таныштырмайынса, балалар мәсьәләнең айышына төшөнә алмай.

Әйткәндәй, Т.Е. Демидова авторлығындағы был математика дәреслеге өс киҫәктән тора. Мәктәпкә бала 1-10 араһында һандарҙы танып белеп, бер ни тиклем ҡушып-алырға өйрәнеп килә. Шуға күрә дәреслектең беренсе киҫәге ауырлыҡ тыуҙырмай. Был осорҙа һандарҙы берәрҙән унға тиклем өйрәнеп, уларҙың составы өстөндә ныҡлы эш алып барыла. Ә бына дәреслектең икенсе киҫәген үткәндә мәғәнәһе яғынан тормошҡа тап килмәгән мәсьәләләр осрай. Мәҫәлән, математика дәреслегенең 47-се битендә (3) шундай задание бирелгән: "Гөлбикә исемле ҡыҙҙың 3 бәшмәге бар, ә Гөлбикә исемле әбейҙең 2 бәшмәккә күберәк. Гөлбикә әбейҙең нисә бәшмәге бар?" Баланың башын бутап, бер төрлө исем алғансы, Миңлебикә - Гөлбикә тип яҙырға ла булыр ине.

50-се биттә (1) "Маймылдың 6 салбары һәм 3 күлдәге бар. Салбарҙар күлдәктәрҙән нисәгә күп?" - тигән мәсьәлә бирелгән. 58-се биттә (1) "Караҫҡының әхирәттәре - 3 ҡарға һәм 7 һайыҫҡан. Һайыҫҡан әхирәттәр ҡарға әхирәттәрҙән күпмегә күберәк?" - тигән заданиены үтәргә ҡушыла. 63-сө биттә (5) "Клоун Шпунтиктың - 5, ә клоун Мымриктың 4 өйрәтелгән сысҡаны бар. Шпунтиктың өйрәтелгән сысҡандары Мымриктыҡынан нисәгә күберәк?"

Ошондай мәсьәләләр осрағанда һанаулы ғына дәрес ваҡыты балаға бөтөнләй кәрәкмәгән нәмәләрҙең мәғәнәһен аңлатыуға сарыф ителә. Быны урынына Башҡортостандың географик атамалары, төрлө башҡорт халыҡ уйындары, ғаилә ағзалары тураһында йөкмәткеле мәсьәләләр биреп була бит. Сит ил әкиәт геройҙары, йәнһүрәттәре геройҙарын ҡулланғансы, балаларға кескәй саҡтан билдәле башҡорт халыҡ әкиәттәрендәге батырҙар тураһында мәсьәләләр төҙөү отошло килеп сығыр ине. Уҡыусылар башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады, мәҙәниәте, әҙәбиәте, тарихын белеп үҫер ине.

Беренсе синыф өсөн "Математика" дәреслегенең өсөнсө киҫәгендә лә 10-20 тиклемге һандар темаһы бик ауыр, аңлайышһыҙ бирелгән. Тиҫтә аша ҡушыу-алыу - башланғыс класта иң төп белемгә нигеҙ һала торған темаларҙың береһе. Дәреслектең 20-21-се битендәге теманы аңлатыу материалы бөтөнләй буталсыҡ, китапҡа ҡарап эшләрлек түгел. Шуға, күп осраҡта дәрестә математика китабын ҡулланмай, башҡа сығанаҡтарҙан кәрәкле материалдар табып уҡытырға мәжбүрбеҙ.

Дүртенсе синыфта ла балаларға ошо уҡ Т.Е. Демидова, С.А. Козлова, А.П. Тонких авторлығындағы "Математика" китабы буйынса белем бирәбеҙ. Был дәреслектә лә тәржемәләр дөрөҫ түгел, эш төрҙәре йәш үҙенсәлектәрен иҫәпкә алмай төҙөлгән. Мәҫәлән, бер дәрес эсендә өс мәсьәлә, миҫалдар, тигеҙләмәләр, геометрик мәсьәләләрҙе эшләргә кәрәк. Уҡыусылар уларҙы эшләп өлгөрмәй, тиҙ-тиҙ генә үткән теманы аңламай ҡалырға ла мөмкиндәр. Сөнки икенсе дәрестә яңы тема көтә, ә класта психик үҫеше тотҡарланған балалар уҡыуы ла ихтимал бит.

Милли мәктәптәр өсөн дәреслектәрҙе үҙ ерлегебеҙҙә таянып, башҡорт балаһына аңлайышлы, күңеленә ятырлыҡ итеп үҙ ғалимдарыбыҙ төҙөһә ине, тигән теләктә еткерәбеҙ тағы ла.

**Ишембай районы**
**Маҡар ауылы урта мәктәбенең**
**башланғыс синыф**
**уҡытыусылары.**

*ҺАБАҠТАР*

# ЯҠЫНДАРЫҢА КӘРӘКҺЕҢ...



**Бик билдәле психолог үҙенең семинарын 500 һумлыҡ аҡса тотҡан ҡулын күтәреп башлап ебәрә. "Кем ошо аҡсаны алырға теләй?" тигән һорау яңғырай. Уны тыңларға йыйылған ике йөҙләп кешенең барыһы ла ҡулын өҫкә күтәрә.**

- Һеҙҙең арағыҙҙан берәү был аҡсаны ҡулына алғанға тиклем мин уның менән бер нәмә эшләйем, - тип дауам итә психолог һәм аҡсаны устарында бөгәрләп, йомарлап күрһәтә. Әммә залдағылар һаман да аҡсаны ҡулына төшөрөргә теләүен белдерә. Шунан психолог купюраны бысраҡ иҙәнгә һалып, итеге менән тапай, бөгәрләнгән аҡсаны күтәреп, тағы шул бер үк һорауын бирә. Йыйылған халыҡ тағы ла аҡсаны алырға теләк белдереп, ҡулдарын һона.

- Ҡәҙерле дуҫтар, - ти психолог, - һеҙ әле генә бик ҡиммәтле фәһем алдығыҙ. Күреп торағыҙ, мин был аҡсаны нимә генә эшләтһәм дә, һеҙ барығыҙ ҙа уны ҡулығыҙға төшөрөргә теләй. Сөнки ул үҙҡиммәтен юғалтманы, ул һаман да 500 һумлыҡ купюра булып ҡалды.

Тормошта ла шундай хәлдәр була: беҙ барған юлдан тайпылырға, яулаған бейеклектәрҙән ҡолап төшөргә, бысраҡҡа буялырға, иҙелергә мөмкинбеҙ. Шундай саҡтарҙа үҙеңде ҡулыңдан бер нәмә килмәгән, файҙаһыҙ кеше итеп тойоуың да бар. Әммә һинең менән нимә генә булһа ла, һин үҙҡиммәтеңде юғалтмайһың. Бысраҡһыңмы йә таҙаһыңмы, кейемең бөтәрләнгәнме йә үтекләнгәнме, һин кәрәк булған кешеләреңә һәр ваҡыт ҡиммәтле, ҡәҙерле булып ҡалаҫаҡһың..."

✓ *Башҡорттар Өфө ҡәлғәһен бер ни тиклем ваҡыт Имән ҡала тип атап йөрөтә. "Ҡала" һүҙе төркисә "калан"дан килеп сыҡҡан, ул хакимға түләгән яһаҡты белдергән. Өфө ҡалаһы Алтын Урҙа дәүерендә лә яһаҡ түләү урыны булған.*



*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

**2004 йылда баш ҡалабыҙ Өфөнөң 430 йыллығы билдәләнеп, байрам тантаналары ойошторолғайны. Эйе, 1574 йылда Иван Грозный әмеренә буйһоноп, Мәскәү баяры Иван Нагой командалығы аҫтында бында килгән батша стрелецтары Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалғанын бер кем дә инҡар итергә йыйынмай. Әммә борон-борондан тап ошо урынды яҡын-тирәлә йәшәгән ҡәүемдәр төйәк иткән, уларҙың торлаҡ, оҫтахана, нығытма урындары әле лә табыла тора. Боронғо риүәйәттәр ҙә, тарихи документтар ҙа ошоға дәлилдәр. Академик, тарих фәндәре докторы, билдәле археолог Нияз Мәжитов етәкселегендә асылған "Өфө-2" ҡаласығында табылған ҡомартҡылар ҙа ошо хаҡта һөйләй. Эҙәрмән-тикшеренеүсе Радик ВӘХИТОВтың "Сәмреғош ҡанаты аҫтына" исемле китабында бәйән ителгән, ошо мәсьәләгә арналған аналитик мәғлүмәттәр уҡыусыларыбыҙҙа ҡыҙыҡһыныу уятыр, тип уйлайбыҙ.**

# ӨФӨНӨҢ БАРЛЫҠҠА КИЛЕҮЕ -

## миф һәм ысынбарлыҡ



Революцияға тиклемге тарихи хеҙмәттәрҙә, мәҫәлән, Карамзинда, Өфө ҡалаһы Иван Грозный нигеҙләгән ҡалалар иҫәбендә иҫкә алынмай. Ул былай тип яҙа: "Ошо батшалыҡ итеү осорондағы маҡтауға лайыҡ эштәр иҫәбенә беҙҙең сиктәребеҙ хәүефһеҙлеге өсөн байтаҡ яңы ҡалалар төҙөүҙе индерергә була. Иҫкә алынған Лайыш, Чебоксар, Козмодемьянск, Болхов, Орел һәм башҡа ҡәлғәләрҙән тыш, Донков, Епифан, Венев, Чернь, Кокшажск, Тетюши, Алатыр, Арзамас ҡалаларына Иоанн нигеҙ һалды".

Башҡортостанда боронғо карталар тыйылғайны. Бары тик һуңғы ваҡытта, башҡорт халҡының күскенселек концепцияһы һәм Өфө ҡалаһы һалыныуҙың урыҫ версияһы авторҙары был донъянан киткәс кенә, беҙ А. Псәнчиндың "Башҡортостан боронғо карталарҙа" тигән китабын күрә алдыҡ.

Ә шулай ҙа 1574 йылда Сутолоканың уң ярында Иван Нагойҙың стрелецтары нимә төҙөгән һуң? Өфөгә оҡшатып төҙөлгән, Сутолокоград тип аталырға тейеш булған ошо Кремль ниҙән ғибәрәт булған икән?

Был нығытма - дөйөм майҙаны 1,2 га булған дүртмөйөш. Стеналарының оҙонлоғо 440 метр. Стеналар имән бүрәнәләрҙән һалынған. Нығытмала имәндән буралған өс башня булып, икәүһе ат менән үтеп йөрөү, береһе йәйәүлеләр өсөн тәғәйенләнгән.

Ә хәҙер "Өфө тарихы" китабына күҙ һалып, ошо 1,2 га майҙанда нимәләр урынлашҡанын ҡарайыҡ. Күрәһең, ошо Сутолокоградҡа ниндәйҙер мөһабәтлек бирергә теләптер инде, уның авторҙары Кремлдә собор сиркәүе, дары мөгәрәптәре һәм ашлыҡ келәттәре, воевода өйө, приказ ыҙмаһы, төрмә, ҡаҙна һәм сиркәүгә ҡараған башҡа биналар булыуы тураһында яҙа. Иң билдәле кешеләр өсөн дә ошонда өйҙәр һалынған: йәнәһе, тыныс ваҡытта улар үҙ ауылдарында йәшәһә, хәүеф тыуғанда ошо ҡәлғәгә инеп йәшеренер булған.

Ҡәлғә стенаһы менән уратып алынған ошо 1,2 га ерҙе күҙ алдына килтерегеҙ инде. Ябайыраҡ итеп, был һәр яғы 120-125 метр оҙонлоғондағы дүртмөйөшлө майҙан, тиһәк, бигүк асыҡ булмаҫ. Был нығытманы нимә менәндер сағыштырып ҡарау яҡшыраҡ булыр. Ҡәҙимге ауыл өйө ихатаһының 30 сутыйлап йәшелсә баҡсаһы булһа, өй, мунса урыны, емеш-еләк баҡсаһына 10 сутый ер кәрәк. Бөтәһе бергә - 40 сутый. Тимәк, 1,2 га майҙанға өс хужалыҡ урынлаша ала. Юғарыла һанап үтелгәндәрҙе ошо территорияла нисек урынлаштырып бөтмәк кәрәк? Быны бер нисек тә эшләп булмаясаҡ.

Былар барыһы ла Сутолока ярҙарында стрелецтар төҙөгәндең баһаһын арттырыр өсөн уйлап сығарылған. Ошоға бәйле, ХХ быуаттың 50-се йылдары иҫкә төшә. 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы емереклектәренән илебеҙ саҡ-саҡ ҡына ҡалҡынып килгән ваҡыт. Крәҫтиәндең һәр йортона ҙур налогтар һалынған. Ауыл кешеләре дәүләткә ит, йөн, йомортҡа тапшыра. Һәр бер районды үҙенең әҙерләүҙәр контораһы бар.

Был учреждение тап бына ошо 1,5-2 га ерҙе биләй ине, бейек ҡойма менән уратып алынған, уның өҫтөнән сәнскеле тимерсыбыҡ һуҙылған. Мөйөштәрендәге вышкаларҙа һаҡсылар тора. Ике ҡапҡаһының береһе контора эргәһендә, төп инеү урынында булһа, ылауҙар сығып йөрөй торғаны артҡы яҡта була торғайны. Ошо территорияла, административ бинанан тыш, келәттәр, ат һарайы, башҡа һарайҙар, бәҙрәф бар ине. Ошо учреждениеның майҙаны бер район өсөн дә ҡыҫынтыраҡ ине.

Сутолока йылғаһы ярында Иван Нагой стрелецтары ошондай "заготконтораны" төҙөгән дә инде.

Кремль тип ололап аталған Сутолока нығытмаһы ҙур булмаған административ үҙәк булып, яһаҡ йыйыу һәм уны ылау менән Ҡаҙанға, йә тура Мәскәүгә ебәреү өсөн тәғәйенләнгән. Уны төҙөү 1572 йылда Ҡаҙан тарафтарында көслө бола сығыуҙан һуң башлана. Ҡырым ханы Дәүләтгәрәй менән берләшеп, татарҙар һәм сирмештәр баш күтәрә, Рәсәйҙән айырымланырға тырыша. Мәскәүҙе баҫып алып яндырған хан Иван батшанан Ҡаҙанды һәм Әстерханды үҙенә биреүҙе талап итә. 1572 йылдың көҙөндә Иван Ҡаҙанға ғәскәр ебәрә, әммә Дәүләтгәрәй Ҡаҙанды яуларға килмәй. Бер йылдан һуң баярҙар И. Мстиславский, Н. Романов-Захарьин, И. Шереметев һәм башҡалар етәкселегендә көсәйтелгән урыҫ армияһы Муромға йүнәлә.

Бола тынһа ла, хәл ышаныслы булмай. Был хәлдә Рәсәйҙең көнсығыш сиктәрендәге ҡалаларҙы нығытыу, башҡорттарҙан яһаҡ йыйыуҙы болалы Ҡаҙандан Өфөгә күсереү маҡсатҡа ярашлы була. Тап ошо ваҡытта арҙаҡлы баярҙар ҡулы аҫтында стрелецтар Муромдан Белая Воложкалағы Өфө ҡалаһына һәм Өфө йылғаһы үрендәге Сәғәтин ҡалаһына (урыҫ йылъяҙмаларында - Жукотин) йүнәлә лә инде. Улар бында үҙҙәренең нығытылған пункттарын - форттар төҙөй.

Башҡорттар Өфө ҡәлғәһен бер ни тиклем ваҡыт Имән ҡала тип атап йөрөтә. "Ҡала" һүҙе төркисә "калан"дан килеп сыҡҡан, ул хакимға түләгән яһаҡты белдергән. Өфө ҡалаһы Алтын Урҙа дәүерендә лә яһаҡ түләү урыны булған. Шуның өсөн башҡорттар тәүҙә яһаҡ түләү урынын - "ҡалан" тип атап, һуңынан "ҡала", тип әйтә башлаған.

Әлбиттә, һәр ҙур нәмә бәләкәйҙән башлана, әммә ошо Сутолокоград Өфө ҡалаһының башланғысы, тип әйтеп булмай. Дөрөҫөрәк әйткәндә, электән үк бында булған ҡалаға йәнәш һалынған ошо нығытманан Өфө ҡалаһында һәм Башҡортостанда урыҫ хакимлығы башланған.

Әгәр ысынлап та Ағиҙелдең ошо бөгөлөндә яңы ҡалаға нигеҙ һалынған булһа, ул Өфө тип аталмаҫ та ине. Ул Бельск, Прибельск, йә Белорецк тип аталыр ине. XVIII быуатта 1,2 га ерҙә төҙөлгән Кремлде түгел, ә стеналары 4 метр бейеклегендә булған, һәр урамының башында торған алты ҡапҡалы яңы ҙур ҡәлғәне күргән П. Рычков ошо хаҡта ғәжәпләнеп яҙып ҡалдырған: "Өфө ҡалаһы атамаһының яңы ҡушылмаған булыуы, ә электән булғанының яңыртылыуы тураһында тоҫмалларға мөмкин... Өфө йылғаһынан ике тапҡыр ҙурыраҡ булған Ағиҙел йылғаһы өҫтөндә төҙөлгән ҡаланы ошо йылғаға ҡойған Өфө исеме менән атауҙан бер мәғәнә лә булмаҫ ине".

Әлбиттә, Рычковтың бында ҡәлғә төҙөлгәнгә тиклем үк Өфө ҡалаһы булғанлығы тураһында яҙыуы тарихсыларға Өфөнөң урыҫ стрелецтары тарафынан нигеҙләнеүен иҫбатлау өсөн билдәле ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Ҡара менән аҡҡа яҙылғанды балта менән тураҡлап бөтөрөп булмай бит. Шунан һуң бер нәмә икенсеһе менән алмаштырылып ҡарала башлай. Йәнәһе, бында кешеләр йәшәгән урын булһа ла, ҡала түгел, ә "шайтан ҡаласығы" тип аталған боронғо емереклектәр, ҡәлғә стенаһы һәм ур ҡалдыҡтары ғына булған. Был "иҫ киткес" идеяның да авторы шул уҡ Ә. Усманов була.

Әммә ул үҙ-үҙенә ҡаршы килә. Ҡаҙан ханы тарафынан ҡуйылған Өфө кенәзе Ҡара Килембәт 1505 йылда ошо харабалар араһында йәшәгән булып сыға түгелме һуң?

**(Дауамы. Башы 37-38-се һандарҙа.)**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

Ете телле, бер бөтөн халыҡтың ете ырыуара телендә һөйләшкән ҡәбиләләре боронғо бер дәүләткә буйһонған, күрәһең, артабан ошо территория "Бөйөк Башҡорт иле" тип атала башлаған да инде. Башҡорт лингвист-тюркологы Ж.Ғ. Кейекбаев менән СССР ФА мөхбир ағзаһы С.Е. Малов 1950 йылдарҙың башында Геродот үҙенең билдәле хеҙмәтендә иҫкә алған күсмә ҡәбиләләрҙең (саҡтар, мәсәғүттәр, иирктар, дахтар, аримастар, агриппейҙар) башҡорт телендә һөйләшеүе хаҡында яҙа. Бынан шундай һығымта ла яһарға була: билдәле ғалимдар был ҡәбиләләр йөҙөндә башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларын күргән. Мәшһүр башҡорт шәреҡсеһе Әхмәтзәки Вәлиди менән башҡорттар хаҡындағы этнография фәненә нигеҙ һалыусы Сергей Руденко ла шундай уҡ фекерҙә (90, 66-сы бит). Дахо-мәсәғүт һәм төрки ҡәбиләләр араһындағы туғанлыҡ танылa. Мәсәғүттәр менән саҡтарҙы гректар төрки телле халыҡтарға индерә (76, 202-се бит). Күп быуаттарға һуҙылған ассимиляция һөҙөмтәһендә был төбәктә төрки телле халыҡ өҫтөнлөк ала башлай. Тарихсылар б.э.т. VII - IV быуаттарҙа Урта Волгала һәм Көньяҡ Уралда йәшәүсе ҡәүемдәрҙең мәҙәниәтен Прохоров, б.э.т. III-I быуатына ҡарағанын Суслов мәҙәниәтенә индерә. Һуңғараҡ беҙҙең эраның II-IV быуаттарында тарихи аренаға һун ҡәбиләләре килә. Б.э.т. II быуатына һәм беҙҙең эраның III быуатына ҡараған 2200 ҡәберлекте өйрәнеп, ғалимдар Пьянобор мәҙәниәте барлығын асыҡланы. Башҡорт ғалимы Нияз Мәжитов б.э.т. VIII-II быуаттарға ҡараған мәҙәниәтте Ананьин мәҙәниәтенә индерә, был мәҙәниәткә ҡараған ҡәбиләләр Ағиҙел һәм Кама йылғалары һәм уларҙың ҡушылдыҡтарында мәсәғүттәр менән күршеләш йәшәгән, бер үк ваҡытта ғалим уларҙы Прохоров мәҙәниәтенә лә индерә. Ҡайһы бер ғалимдар был мәҙәниәтте сарматтарҙыҡы тип атау яғында, әммә Марков тигән ғалим был мәҙәниәттең сарматтарҙыҡы булыуын инҡар итә, сөнки сарматтар дәүерендә был ерҙәр Ананьин мәҙәниәтенә ҡарай. Был хаҡта ентекләберәк һуңғараҡ яҙырбыҙ (Марков, 2007, 44-се бит). Көнбайыш Уралда Бахмутин мәҙәниәтенә ҡараған йөҙәрләгән ауылдар һәм ҡалалар иҫәпләнә. Уларҙың яҡынса яртыһы тиерлек б.э.т. VII-III быуаттарға ҡарай, ә б.э.т. II быуаттан беҙҙең эраның II быуатыныҡылар Пьянобор мәҙәниәтенә ҡарай. Был дәүер ултыраҡ тормош менән йәшәүсе халыҡтың туҡтауһыҙ мәҙәни үҫеш йылдары тип иҫәпләнергә хаҡлы. Башҡа ҡәбиләләр күсеп килгәндән һуң Урал алдындағы ерҙәрҙә йәшәүсе халыҡтар яңыса урынлаша. Билдәле булыуынса, иртә тимер быуатында (б.э.т. 3-2-се меңйыллыҡ) Уралда эре баҡыр ятҡылыҡтарын эшкәртеү башлана. Хәҙерге Ырымбур ҡалаһы янындағы Ҡарғалы руднигы - Евразия далаларындағы иң эре рудниктарҙың береһе. Ул XIX быуат башына тиклем алдынғы һанала. Бронза дәүерендә Көньяҡ Уралдың урман-далалы зонаһында 20 нығытма барлығы билдәле, уларҙың береһе - Арҡайым ҡаласығы. "Боронғо ҡалалар иле"-нең һаҡлыҡ нығытмалары һәр береһенән 40-60 саҡрымда урынлашҡан (67, 10-14-се биттәр). Б.э.т. 445 йылда Геродот Тимербикә батшабикә етәкселегендәге мәсәғүттәрҙең Фарсы батшаһын еңеүе хаҡында яҙа. Ул мәсәғүттәрҙе ҙур территорияны биләүсе күп һанлы халыҡ тип атай. И.В. Пьянков үҙенең "Геродот мәсәғүттәре" тигән хеҙмәтендә Көньяҡ Урал далаларында Прохоров мәҙәниәтенә ҡараған мәсәғүттәр һәм дахалар йәшәүе хаҡында яҙып үтә (Пьянков И.В.,1975, 67-68-се биттәр). Автор был халыҡтарҙы яҡшы ҡоралланған, бай, юғары мәҙәниәтле һәм Тәңре диненә табынған ҡәүем булараҡ телгә ала.

**(Дауамы бар).**

**✓ *Өйөндә кем атаһы менән конфликтта йәшәгән һәм йәшәй, кем атаһы менән уртаҡ тел тапмай, шулар секталарға китә. Ундайҙар үҫеп еткәс, власты, дәүләтте атаһы итеп күрә.***



**Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты рәйесенең беренсе урынбаҫары Айнур Нурғәле улы Арыҫланов 1985 йылда Баймаҡ районының Ишмөхәмәт ауылында тыуған. 2002 йылда Сибай гимназия-интернатын тамамлағас, Ҡазандағы "Мөхәмәҙиә" мәҙрәсәһенә уҡырға инә һәм 2004 йылда Өфөләге Рәсәй Ислам университетының "Теология" факультетына 3-сө курсҡа ситтән тороп уҡыу бүлегенә күсә, бер үк ваҡытта Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистикаһы бүлегенә уҡырға инә. 3-сө курста уҡығанда факультетта студенттар советын, 2005 йылда "Наркотиктарһыҙ ҡала" тигән ирекмәндәр ойошмаһын етәкләй. 2006 йылда Египеттың Ҡаһир ҡалаһындағы ғәрәп телен өйрәнеүсе "Фаджир" үҙәгендә белем ала. Бөгөн ул М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының психология факультетында ситтән тороп уҡый, һайлаған йүнәлеше буйынса ғилми эш яҙа. Айнурҙың биографияһына күҙ һалғанда уның туҡтауһыҙ белем алыуға, камиллашыуға ынтылышын күрергә була. Әлбиттә, уның ғилемгә булған был ынтылышы башҡарған ғәмәлдәрендә лә сағылыш таба. Унын менән әңгәмәлә гәзит уҡыусылар үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған бик күп һорауҙарға яуап табыр, тигән уйҙабыҙ.**

**▸ Совет осоронда кешеләр араһында иптәшлек, дуҫлыҡ, интернационализм кеүек күркәм мөнәсәбәттәр йәшәне. Бөгөн килеп, дингә ихтыяр бирелеп, кешеләр күпләп ошо юлға баҫҡас, кешеләр араһында беҙ совет осоронда күҙ алдына ла килтерә алмаған дошманлыҡ мөнәсәбәттәре барлыҡҡа килде. Был иһәт-**

Ҡөрьән уҡығанда иламай. Бындай күркәм ғәҙәттәр - Аллаһы Тәғәләнең бүләге, тик ул бүләктең ҡәҙерен белергә кәрәк, йәғни ундай кешеләр намаҙ уҡырға, Аллаһҡа зекер әйтергә, рәхмәтле булырға бурыслы. Әгәр ҙә улар рәхмәтле булмаһа, Аллаһы Тәғәлә был сифаттарҙы уларҙан кире тартып алыуы ла бар бит. Бында

юҡҡа сыҡҡандай тойола. Үҙем шаһиты булған бер парадоксаль күренеш: эскелектең ныҡ таралған сағында мин йәштәрҙе был йоғонтонан араларға теләп, уларҙы намаҙ уҡырға, тәүбәгә килергә, дин юлына саҡырҙым. Тап шул мәлдә күптәр эскелектән ҡотолдо, дини тормош менән йәшәй башланы. Бөгөн килеп эске-

ни булғанын һөйләгәс, хәҙрәт мине уҡыта башланы.

Рамаҙан айы ине, ураҙа тоттом. Минең арттан эйәреп, класташтарым, ҡырҡлап егет һәм ҡыҙ мәсеткә йөрөргә тотондо. Чечняла һуғыш барған 90-сы йылдар ине был. Директор мине мәсеткә йөрөгән өсөн интернат-гимназиянан ҡыуып сығарҙы. Шул саҡ өс кластың егеттәре һәм ҡыҙҙары мине яҡлап митинг яһаны. Һөҙөмтәлә, директор мине уҡыуымда ҡалдырырға мәжбүр булды, тик дөйөм ятаҡта йәшәргә рөхсәт итмәне. Мин Әгләмәтдин хәҙрәттең рөхсәте менән мәсеттә йәшәй башланым, унда йыйыштырыусы булып эшләнем. Тәүҙә иҙән йыуҙым, аҙаҡ һаҡсы, шунан имамдың ярҙамсыһы булып киттем. Артабан Сибайҙа дин юлындағы йәштәрҙең ойошмаһын ойоштороҙом, Ҡазандағы Мөхәмәҙиә мәҙрәсәһенә уҡырға киттем. Мәҙрәсәне тамамлағас, Башҡортостан мо-

һөйләй торғайны: элек башҡорттар ат һайлағанда уны туғарып ебәреп, уның ниндәй өйөргә барып ҡушылыуын күҙәтер булған. Бәҡтиһәң, һау аттар бер өйөрҙә, ауырыуҙары икенсе өйөргә туплана икән. Һау аттарҙың айырыу өйөргә ауырыу атты, ауырыу аттарҙыҡы һау атты ҡабул итмәй икән. "Дуҫтарың кем, һин дә шул", тип әйтә торғайны атайым. Дин юлына килгән кеше лә, ошо аттар һымаҡ, үҙенең өйөрөн табып ала.

Минең менән Сибайҙа мәсеткә йөрөй башлаған егеттәрҙең тиҫтәләбе төрлө секталарға китте. Уларҙың ни өсөн был юлдан китеүенең сәбәбе ғаиләләренә, бала саҡтарына ҡайтып ҡала, ундайҙар шул саҡта уҡ йәмғәтселек тарафынан ҡабул ителмәйенсә, унан ситтәрәк торалар ине. Дингә килгәс, ул егеттәрҙә ниндәйҙер агрессия барлыҡҡа килде, элек улар өндәшмәҫ, шым ғына инеләр.

# ИЛЕҢДЕ, ТЕЛЕҢДЕ,

## Аллаһы Тәғәләнең

**тән күренекле яҙыусы, шағир Мәүлит ағай Ямалетдинов ҡыҙыҡлы фекер әйтте: "Дин лакмус кеүек, унда кешенең асылы нығыраҡ сағылыш таба..." Бик ҡыҙыҡлы фекер: әгәр ҙә кеше асылында изге булһа, уның изгелеге тағы ла нығыраҡ күренә, кире сифаттары ла шуға ярашлы сағылыш таба. Әлбиттә, бында Мәүлит ағай менән бәхәсләшергә лә урын бар, сөнки беҙ тәүбәгә килгән кешеләрҙең дә барлығына шаһитбыҙ. Шул уҡ ваҡытта йөрәгең "Аллаһ!" тип типмәйенсә, йәғни Аллаһтың барлығын, Уның берҙән-бер илаһ икәненә ихлас ышанмайынса, телең менән генә доға башҡарыуың да Уны алдарға тырышыуға тиң икәне бәхәсһеҙ. Шулай түгелме?**

- Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт с.ғ.л. янына килеп: "Ышанғым килә, әммә ышана алмайым. Аңым менән ҡабул итәм, тик йөрәгемдә бушлыҡ. Минә нимә эшләргә?" - тигән кешеләр ҙә булған. Бәйғәмбәребеҙ уларға дини тормош менән йәшәргә, намаҙ уҡырға ҡушҡан. Минә республикабыҙ ауылдары һәм ҡалалары буйлап бик күп йөрөргә тура килә. Шул саҡта үҙенең ғилеме, әхлағы, тәртибе менән ғәжәйеп сифаттарға эйә кешеләрҙе осратырға тура килә. Улар намаҙ уҡыған һәр бер мосолмандан артығыраҡ, мәҙрәсәлә биш йыл белем алған шәкерттән яҡшыраҡ. Тик ундай кешеләр мәсеткә йөрөмәй, намаҙ уҡымай, дини йола үтәмәй. Улар кешеләр менән яҡшы мөғәмәлә итә, ваҡытын да, аҡсаһын да йәлләмәй, асыҡ күнелле, йомарт, йәмғиәт өсөн янып йәшәй. Шундайҙарға ҡарап, аптырауға ҡалам. Ундайҙар һин доға уҡыған ваҡытта илап ултыра, ә һәр мулла

мәсьәлә ике яҡлы: һин ышанмайынса намаҙ уҡыһаң да, ышанып намаҙ уҡымаһаң да насар. Шул уҡ ваҡытта намаҙ уҡыу ғына иман күрһәткесе була алмай. Дини булмаған ойошмаларҙа һәр бер мулланан иманлыраҡ, теүәтәй кейеп һаҡал үҫтергән һәр бер мосолмандан шәфҡәтлерәк, әҙәплерәк, ихласыраҡ кешеләр менән осрашҡанда шундай уйҙар башҡа килә. Ундай кешеләр араһында бер кемгә лә күрһәтмәй, тик үҙҙәре генә белеп намаҙ уҡығандары ла бар.

Әлбиттә, мин төн уртаһында тороп Аллаһ менән икеһе генә ҡалып, күҙ йәше менән илай-илай намаҙ уҡыусы имамдар барлығын да беләм. Бер үк ваҡытта дин әһелдәрендә профессиональ сифаттар ҙа бар. Ғүмере буйы операция яһаған хирург нисек итеп бер ниндәй йәлләүһеҙ пациенттарының ағзаларын ҡырҡып алып ташлаһа, дин әһелдәренең дә тойғолары йыуылыуы бар.

**▸ Һәр төрлө үҫештең, прогрестың нигеҙендә ҡапма-ҡаршылыҡ ята. Ҡапма-ҡаршылыҡһыҙ тормош кешене ойота, хистәрҙе йоклата. Аллаһы Тәғәлә гонаһтары өсөн Әҙәм менән Һауаны оҗмахтан ергә ҡыуған саҡта ла арттарынан Иблисте эйәртә. Бында ла оло мәғәнә, фәтүә барҙыр...**

- Ҡапма-ҡаршылыҡ, юлында кәртәләр булмағанда кеше тыныслана, уның иманы кәмей башлаған һымаҡ. Әйтәйек, һин мәсеттә намаҙ уҡып ултыраһың, шунан урамға сығаһың да, өйөңә ҡайтаһың, төрлө сараларға, йәмғәтселек урындарына йөрөйһөң. Бар урында ла һине мосолмандар уратып алған. Барыһы ла тәртипле, иманлы, дөрөҫ итеп йәшәйҙәр - бындай шарттарҙа һинең үҫешең өсөн шарттар

лек элекке һымаҡ уҡ көнүҙәк проблема булыуҙан да туктаны, дингә эркелеп килеүселәр ҙә кәмене. Мин бында дингә килер өсөн иң тәүҙә эсергә кәрәк, тип әйтергә лә теләмәйем, бары тик кешенең сифати үҙгәрешендә тәүбәгә килеүҙең мөһим роле барлығы хаҡында ғына әйтергә теләйем.

**▸ Хәҙерге ваҡытта дингә килгән йәш кешегә шикләнеп ҡарау һаман дауам итә әле. Ә бына һин был юлға нисек килдең?**

- Минең ҡарт ҡартәсәйем Кинйәбикә ун-ун биш йәшендә Мөжәүир хәҙрәттә хеҙмәтсе булып йөрөгән, уның өйөн, йорт-ҡураһын ҡараған, иҙәнен йыуған. Хәҙрәт уға: "Ҡыҙым, йөҙ йәшә, һау-бәхетле бул", - тип теләк теләгән. Ысынлап та, ҡарт ҡартәсәйем йөҙ йәшәне, мин уның янында үҫтем. Ул минә Мөжәүир хәҙрәт менән бергә намаҙ уҡыуҙары, зекер ҡылыуҙары хаҡында һөйләй торғайны. Атайым менән әсәйем эштән бушаманы, мин тәрбиәне ҡарт ҡартәсәйемдән алдым.

Үҫә килә бер саҡ үҙемдең юлдан яҙа башлауымды ла тойҙом. Ун өс йәшемдә Сибай интернатында уҡығанда һыра эскән, тәмәке тартҡан тиҫтерҙәремә эйәрә башланым. Шулай итеп, эскелеккә бирелдем. Башҡалар туҡтай, мин туҡтай алмайым. Бер мәл төндә йоҡлай алмай ятҡанда күктән утлы шар килеп төштө лә: "Айнур, тор, тәһәрәтләнеп таҙарын да, намаҙға баҫ. Һин Аллаһы Тәғәләгә яҡынайған һайын, Ул һиңә тағы ла яҡынаясаҡ", - тине. Өн менән төш араһындағы был мөғжизәнән ҡурҡып килеп торҙом. Ҡарт ҡартәсәйем өйрәткәнсә, тәһәрәтләнеп, намаҙ уҡып, Сибай мәсетенә, Әгләмәтдин хәҙрәт янына киттем. Уға үҙем менән

солмандары Диниә назаратында йәштәр бүлеген етәкләнем, хәҙерге ваҡытта Диниә назараты мөфтөйө Нурмөхәмәт хәҙрәттең 1-се урынбаҫары вазифаһын башҡарам. Был вазифаны башҡарғанға тиклем Төркиәлә, Египетта белемемде камиллаштырҙым, Башҡорт дәүләт университетын, Рәсәй Ислам университетын тамамланым. Әйткәндәй, Нурмөхәмәт хәҙрәт янында 8 йыл хеҙмәт итәм, унан дини һәм тормош һабаҡтары алам. Нурмөхәмәт хәҙрәт тәрән дингеҙ кеүек хикмәтле Остаз. Мин уға сикһеҙ рәхмәтлемен!

**▸ Дингә килгән йәштәр тиҙ генә ниндәйҙер йоғонтоларға бирелеп, хәрәкәттәргә, секталарға ҡушылып барыусан. Был хәл Рәсәйҙә нисектер контролгә алып булмаҫлыҡ хәүефле күренешкә әйерелде. Был нимәнән килә? Наҙанлыҡтанмы, әллә уның беҙ белмәгән башҡа сәбәптәре бармы? Нисек кенә булмаһын, беҙҙә дин юлына аяҡ баҫыу кире йоғонтоға бирелеү һымаҡ ҡабул ителә башланы.**

- Мин үҙем дә дин юлына килгәс, иң тәүҙә шундай хәрәкәттә йөрөгән егеттәр араһына барып юлыҡтым һәм йыл ярым самаһы уларҙың йоғонтоһонда булдым. Мине уларҙың бер кемдән дә ҡурҡмауы ҡыҙыҡһындырҙы, улар барлыҡ етәкселәрҙе лә, органдарҙы ла һүгә, улар тураһын әйтә, асыҡ, ғәҙел кеүек. Бындай секталар барлыҡҡа килеүенең, минеңсә, ике сәбәбе бар. Беренсенән, наҙанлыҡ, ғилем булмауы, икенсе сәбәп психологияға бәйле. Атайым шулай

**▸ Бында баяғы Мәүлит ағай Ямалетдиновтың лакмус хаҡында әйткән һүҙҙәре иҫкә килеп төшә. Һин әйткән егеттәргә лә бит, нисектер, үҙҙәрен бойомға ашырырға, шәхесен раҫларға кәрәк булған. Бының өсөн улар динде файҙалана ғына, ысынында, ошо юл менән улар үҙҙәрен раҫларға, күрһәтергә теләй, шулай түгелме?**

- Теп-теүәл унлыҡҡа барып тейә. Элек йәш быуынды, үҫмерҙәрҙе октябряттар, пионер, комсомол ойошмалары тәрбиәләй торғайны. Хәҙер иһә әхлаҡһыҙлыҡҡа юлдар ап-асыҡ. Ғаиләлә төплө тәрбиә нигеҙе һалынмағандар ана шундай секталарға инеп китә. Тағы ла мин бер нәмәгә иғтибар иттем: өйөндә кем атаһы менән конфликтта йәшәгән һәм йәшәй, кем атаһы менән уртаҡ тел тапмай, шулар секталарға китә. Ундайҙар үҫеп еткәс, власты, дәүләтте атаһы итеп күрә. Шуға күрә улар атаһына протест белдерер өсөн һаҡал ебәрә, үсеккән үгеҙ, күркә кеүек ҡылана.

**▸ Һинең был дәлилдәрең шундай әйтемде иҫкә төшөрә: "Атайым һаҡал ебәрмәйенсә, мин мыйыҡ үҫтермәйем..." Тимәк, "һаҡалтайҙар" был юлға барып, атаһын ихтирам итмәүен белдерә булып сыға. Бик ҡыҙыҡ һәм ҡыҙғаныс күренеш...**

- Бындай күренештең дин менән һис бер уртаҡлығы юҡ. Ғаилә, йәмғиәтселек тарафынан "ситкә тибелгәндәр" һәр бер ауылда тиерлек бар, улар бер-береһен тиҙ генә табып ала һәм динде файҙаланып, үҙҙәренең йәмғиәтән барлыҡ-

✓ *Хәҙер иһә дингә еңел ҡараш барлыҡҡа килде, дин, үкенескә күрә, модаға әйләнеп бара. Намаҙ уҡыусы, ураҙа тотоусы кешегә күп осраҡта ышанып та булмай.*



# ЕРЕҢДЕ ҺАҠЛАУ...

## аманаты

**АЙНУР АРЫҪЛАНОВ:**

*Бәйғәмбәребеҙҙең бер хәҙисендә кемдәр берәү үҙенең атаһын һәм халҡын танымаһа, икенсе кешене үҙенең атаһы тип таныһа, үҙен башҡа халыҡтың вәкиле итеп белһә, уға тамуҡта урын әҙерләнеүе хаҡында әйтелә. Тимәк, кемдәр үҙенең балаһына туған телен өйрәтмәй, үҙ милләтенең рухында тәрбиәләмәй, уларға Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында яуап бирергә тура киләсәк.*



ҡа килтерә. Ә инде ғаиләһендә яҡшы тәрбиә алған, аталарын ихтирам иткән, әммә бындай ойошмаларға яңылыш һәм осраҡлы барып эләккән егеттәр ваҡытында аҡылға килеп, уларҙан сығып китте. Мин ундай хәрәкәттәрҙе эстән беләм, бик хәүефле күренеш. Унда ғаиләлә, тормошта үҙ-үҙҙәрен тапмаған, уҡырға, эшләргә, ниндәйҙер маҡсатҡа ынтылмаған егеттәр йөрөй. Улар бер урында ла эшләй алмай, ғаиләләрен, балаларын ҡарамай, бер ерҙә лә эшләмәүҙәрен дини юлда йөрөүе менән аҡларға тырыша. Холоҡтары тотороҡло түгел уларҙың, тиҙ генә ҡыҙып баралар, ярһыуҙар. Улар был донъяны инҡар итә, уны шайтанға тиңләйҙәр. Үҙҙәренең йәмғиәтенә башҡаларҙы йәлеп итер өсөн эшһеҙ йөрөгән егеттәргә аҡса ла бирәләр. Бындай йоғонтоға бирелгән егеттәрҙе аңлай алмай аптырағас, мин Башҡорт дәүләт педагогия университетының психология факультетына уҡырға индем. Әле шул темаға диссертация яҙам, темаһы "Рухи ҡиммәттәрҙең формалашыуы" тип атала.

Секталарҙа, төрлө хәрәкәттәрҙә йөрөгән егеттәрҙең 98 процентының юғары белеме юҡ. Ә уларҙағы агрессия ҡайҙан килә? Көсһеҙлектән, ихтыярһыҙлыҡтан килә. Теләһә ниндәй көсһеҙ кешене алығыҙ, ул - агрессив. Агрессив кеше күпселек осраҡта ҡарт кеше, бабай йә әбей, йә булмаһа, бәләкәй бала, ҡурҡаҡ эт. Яҙыҡ юлда йөрөүсе егеттәрҙең агрессияһы уларҙың был донъянан, уның проблемаларынан ҡурҡыуынан килә.

**Рухһыҙлыҡ, бушаҡ ихтыяр булған урында агрессия алға сыға, тигән һүҙ ҙә бар. Мине тағы бер мәсьәлә борсоуға һала: дингә килгән кешеләрҙең милләтте инҡар итеүе. Ундайҙар кемгә кейәүгә сыҡһаң да, кемгә өйләнһәң дә була - мосолман булһа еткән, тип һанай. Дин менән милләтте бутау ҡайҙан килә тип иҫәпләйһең? Динле бер башҡорт ағайы: "Мин - мосолман, ҡыҙҙарымды кемгә теләйем, шуларға бирәм: төрөк булһын, әзербайжан йә чечен булһын, миңә барыбер - мосолман булһа еткән", - тигәс, беҙ уға: "Ә нинә улдарыңа уларҙың ҡыҙҙарын алмайһың?" - тигәс, ауыҙына һыу уртлағандай, шымып ҡалды. Урынлы һорау тыуа: ни өсөн башҡорт ҡыҙҙары башҡа халыҡтарға балалар тыуҙыра ла, ниңә башҡа милләттәрҙең ҡыҙҙары башҡорт балалары тыуҙырмай һуң? Ни өсөн фәҡәт ошо мәсьәләлә дин беҙгә зыян килтерергә тейеш?**

- Ни өсөн Ислам динендә милләт булмаҫҡа тейеш һуң? Ҡөрьән милләтте инҡар итмәй. Унда "мин һеҙҙе халыҡтар, ҡәбиләләр итеп яралттым, бер-берегеҙҙән өйрәнһен өсөн, һеҙҙең арала иң тәҡүәлеләре миңә иң яҡындары... " тиелә. Тимәк, Аллаһы Тәғәлә башҡорттарҙы - башҡорт, урыҫтарҙы - урыҫ, инглиздәрҙе - инглиз, француздарҙы француз итеп яралтҡан. Мөхәммәт бәйғәмбәр Мәккәнән ҡыуылғас, унда ҡалған үҙ халҡын һағынып илай, үҙенең тыуған ере, халҡы өсөн ҡылыс тотоп һуғышып йөрөй. Ғәскәр төҙөгәс, иң тәүҙә Мәккәне, халҡын азат итә. "Ожмах - әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтында, атайҙарға хөрмәт", тип әйтте Бәйғәмбәребеҙ. Әсәйең, атайың, туғандарың - улар барыһы бергә һинең ҡәбиләң, халҡың, ошоларҙан һуң нисек дин милләтте инҡар итһен инде?

Диндә милләтте инҡар иткән фекер күберәк Сәғүд Ғәрәбстанынан килә. Улар бар мосолмандарҙы ла ғәрәп итеп күргеһе килә. Мин Египетта уҡыным һәм күп осраҡта уларҙың тәкәбберлегенә шаһит булдым. "Мин - Мәккәнән", тип, улар хатта беҙҙең менән һөйләшмәй ҙә торғайны. Улар беҙгә икенсе сорт мосолман итеп ҡарай һәм өҫтән аҫҡа ҡарап ҡына һаулыҡ һораша. Унда уҡыған төрөктәрҙән, татарҙарҙан, Кавказ мосолмандарынан һорағыҙ, улар барыһы ла минең һүҙҙәрҙе ҡеүәтләр.

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең һуңғы бөйөк бәйғәмбәр икәнен таныһаҡ та, беҙ Аллаһы Тәғәлә тарафынан башҡа халыҡтарға ла бәйғәмбәрҙәр ебәрелгәнен беләбеҙ. Бәлки, Урал батыр ҙа беҙҙең халыҡҡа ебәрелгән бәйғәмбәрҙер. Беҙҙең халыҡ оҙаҡ ваҡыт дингә килмәй тора ла, бер килһә, ныҡлап, йөрәге, һөйәктәре менән килә. Сөнки халҡыбыҙҙа ихласлыҡ көслө. Мин Рәсәй һәм донъя буйлап күп йөрөйөм. Тик беҙҙең ерҙәргә генә иң ихлас дингә килеүселәр йәшәй. Башҡа яҡтарҙа, бер ҡараһаң, күмәкләп дингә килеү күҙәтелә, мәсеттәренә һыймайҙар. Урамға сыҡҡан шул уҡ мосолмандар һине алдап китергә мөмкиндәр.

Һәр мосолман үҙенең милләтен һаҡларға, яҡларға бурыслы. Беҙ Аллаһы Тәғәләнән ҡалған аманат. Бәйғәмбәребеҙҙең бер хәҙисендә кемдәр берәү үҙенең атаһын һәм халҡын танымаһа, икенсе кешене үҙенең атаһы тип таныһа, үҙен башҡа халыҡтың вәкиле итеп белһә, уға тамуҡта урын әҙерләнеүе хаҡында әйтелә. Тимәк, кемдәр үҙенең балаһына туған телен өйрәтмәй, үҙ милләтенең рухында тәрбиәләмәй, уларға Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында яуап бирергә тура киләсәк. Мин дә ҡыҙым Ғәйшә менән улым Нурсолтанды шулай тәрбиәләргә бурыслымын.

**Беҙҙең халыҡта "Үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел", тигән әйтем бар. Шуны нисек аңлайһың?**

- Был мәҡәл-әйтем Бәйғәмбәребеҙҙән килә, ул "Һәр кешене яҡшы итеп күр" тип әйтә. Динле кешеләрҙә тәкәбберлек тә барлыҡҡа килеүсән. Улар бер нисә доға ятлай ҙа, үҙҙәрен гонаһһыҙ бәндә итеп тоя, тәмәке тартыусы, эсеүсе кешеләрҙе бер туктауһыҙ тәнҡитләй, уларҙы кешегә лә һанамай башлай. Был тәкәбберлектең иң ҡурҡынысы - рухи тәкәбберлек.

**Бер яҡтан ҡарағанда, ҡыҙыҡ - "рухи", икенсе яҡтан ҡарағанда, ҡыҙғаныс - "тәкәбберлек..."**

- Эйе, логика буйынса бергә ҡулланып булмаҫлыҡ төшөнсәләр, әммә улар дин юлындағы кешелә булыуы бар. Ундайҙар, сусҡа ите ашаусы кешеләр менән бер ваҡытта ла сәй эсмәйем, араҡы эскәндәр, тәмәке тартҡандар менән һөйләшмәйем, ти. Күрәһең, Бәйғәмбәребеҙ "Үҙеңдән башҡаны әүлиә итеп бел" тигән һүҙҙәрҙе әйткән саҡта ошондай рухи тәкәбберлеккә юл ҡуймауҙы маҡсат итеп ҡуйғандыр.

**Минең дә был әйтемгә ҡарата үҙ фекерем бар. Унда "Үҙеңдән башҡаны" тип әйтелгәс, "үҙеңдән башҡаларға" яҡшы кеше лә, яуызы ла, ике йөҙлөһө лә, алдаҡсыһы ла, батыры ла, ҡурҡағы ла, хатта дошмандарың да инә. Яҡшыға ҡарап - яҡшы булырға, яуызға ҡарап - яуыз булмаҫҡа, ике йөҙлөгә ҡарап - ике йөҙлө булмаҫҡа, алдаҡсыға ҡарап - алдашмаҫҡа, батырға ҡарап - ҡурҡаҡ, бахыр булмаҫҡа, ҡурҡаҡҡа ҡарап - батыр булырға, дошманға ҡарап - дуҫ булырға өйрәнәһең икән, ысынлап та, һин кемгәләр оҡшарға тырышаһың йә ғибрәт алаһың икән, ул кеше, ысынлап та, һине нимәгәләр өйрәтеүсе, һабаҡ биреүсе әүлиә булып сыға инде. Тағы бер мәсьәлә. Әйтәйек, Рәсәй Федерацияһында христиандар, мосолмандар, католиктар, буддистар, индуистар, протестанттар һ.б. диндәге кешеләр йәшәй. Беҙҙә, бигерәк тә Чечнялағы ваҡиғаларҙан һуң, хиджаб кейеүсе ҡатын-ҡыҙҙы ҡуйынында мина йөрөтөүсе "шәһиҙәгә" тиңләй башланылар. Шул арҡала Рәсәй ҡалаһы урамында хиджаб кейеүсе ҡатын-ҡыҙға ҡарап, башҡа диндәге кешеләрҙең күңелендә агрессия барлыҡҡа килә икән, был гонаһ түгелме?**

- Гонаһ, әлбиттә. Ә шулай ҙа беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарға ғәрәп стилендәге хиджаб кейеү кәрәкмәйҙер. Беҙҙең ҡартәсәй-өләсәйҙәр баштарына яулыҡ ябынып, өҫтәренә милли кейем кейеп йөрөгән. Һуңғы ваҡытта барлыҡҡа килгән ағинәйҙәр хәрәкәтендә шул ҡуркәм йоланы кире тергеҙергә ынтылыш барлыҡҡа килде. Диндә шулай: башҡа кеше һинең кейгән кейемеңә ҡарап, һиңә оҡшарға ынтылып торорға, һинән өлгө алырға тейеш. Шул саҡта һин үҙеңә оҡшарға тырышҡан кешегә "Хоҙай" тип бер тапҡыр әйтмәйенсә лә, уны дингә килтерә алаһың.

Ғөмүмән, беҙ бәләкәй саҡта мәсеткә йөрөүсе, намаҙ уҡыусы олатайҙар, нисектер, хикмәтле күренә, бик төплө инеләр. Атлап барыуҙары һоҡланғыс ине, өйгә килеп инһәләр, өй эсе яҡтырып китер ине. Хәҙер иһә дингә енел ҡараш барлыҡҡа килде, дин, үкенескә күрә, модаға әйләнеп бара. Намаҙ уҡыусы, ураҙа тотоусы кешегә күп осраҡта ышанып та булмай. Бәйғәмбәребеҙҙең бер хәҙисендә, ҡиәмәт көнө яҡынлашҡан саҡта дингә килеүселәрҙең дингеҙҙәге күперек кеүек күбәйере, әммә уларҙың сифаттары түбән булыры хаҡында әйтелә. Уйлай китһәң, ҡиәмәт көнөнөң билдәләре күп ҡалманы. Хәҙер донъя икегә бүленергә, Сәғүд Ғәрәбстанының сүллектәре йәшеллеккә күмелергә тейеш. Быйылғы йәйҙә, ысынлап та, Сәғүд Ғәрәбстанында ямғырҙар яуҙы, шишмәләр урғылып сыҡты, сүллек уртаһынан йылғалар ағып, оазистар ҙурая башланы. "Сәғүд Ғәрәбстаны йәшеллеккә күмелмәйенсә, ҡиәмәт көнө етмәҫ", тине Бәйғәмбәребеҙ. Йыһан карабынан тороп был ерҙе фотоға төшөргәндәр һәм унда йәшел ерҙәрҙең һиҙелерлек артыуы күҙәтелгән. Ҡыҫҡаһы, ҡиәмәт көнөнөң күп кенә билдәләре һиҙемләнә, уйымса, ҡиәмәт көнө ишек артында тора.

(Дауамы 12-се битә).

✓ **_Усығыҙҙа, бармаҡ остарығыҙҙа ниндәйҙер йылылыҡ бар. Шуны тегә саҡта ла, бөгөн дә тотош тәнем менән тойҙом. Һыҙланыуым баҫылғандай итте. Рәхмәт һеҙгә. Хушығыҙ._**






Теләкһеҙ генә яуапланым: Ҡытай шағиры Ли Бо.

- Яҡшы. Шул шағирҙың берәй шиғыр юлдарын яттан әйтә алмаҫһығыҙмы?

- Бәлки кәрәкмәҫ.

- Кәрәк! - Ирендәр үсеккәндәгеләй турһайҙылар.

- ... И моя где нынче дорога,
Та, что к дому родному ведет... Ҡәнәғәтләндерҙемме?

- Тулыһы менән. Здорово!

- Ә хәҙер саҡ ҡына ауыртыуы ихтимал, бармаҡтарымды тәрәнгәрәк батырам.

Яңаҡтар ҡыҙылғандай итте, күҙҙәр һыҙланыуҙы белдерҙе.

- Ошо ерегеҙ ауыртамы?

- Саҡ ҡына уң яҡтараҡ.

- Әрнеп ауыртамы, әллә сәнсә генәме?

- Тынымды тарыҡтырып ҡыҫа.

- Ҡуптәнме?

- Бер ай тирәһе.

- Врачтарға ваҡытында мөрәжәғәт итеүең хәйерле.

- Үтер, тип өмөтләнгәйнем. Тағы ҡурҡыныс диагноз ҡуйырҙар, тип ҡурҡтым да.

- Күремегеҙ ваҡытында киләме?

Матур күҙҙәр асыла төшөп ғәжәпләнеп төбәлделәр.

- Ят бүленеүҙәр юҡмы?

- Һеҙ үҙегеҙҙең нимә хаҡында төпсөнөүегеҙгә баһа бирәһегеҙме, старшина? Ҡатын-ҡыҙҙың ҡағылырға ярамаған серле биләмәһенә күҙ һалырғамы иҫәбегеҙ?

- Сәбәләнмәй, тыныс ҡына ятығыҙ әле. Был һорауҙы боҙоҡлоҡтан бирмәнем. Беҙ һеҙҙең менән прогулкала ла йөрөмәйбеҙ.

Яна, теләһәң ни эшлә, тигәндәй ҡабаттан һуйҙайҙы:

- Әгәр әйтмәһәм?

- Был үтә мөһим!

- Һеҙгә ҡабул итеүгә килгәнемә үкенә башланым.

- Минә төбәп килергә тәкдим иткәндәр түгелме? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күрәҙәсе лә, әүлиә лә түгелмен, белешмәйенсә, төпсөнмәйенсә, һыҙланыуығыҙҙың сәбәптәрен асыҡлай алмайым.

Яна ҡабаттан шаршау артына инеп китеп кейенеп сыҡҡас, ҡаршыма ултырып, сумочкаһынан алған бәләкәй йомро көҙгөнән бит-йөҙөн күҙҙән үткәрҙе, маңлайына төшкән сәс бөҙрәләренә бармаҡ осон тигеҙҙе, әлеге хәлдән ояларғандай, ҡарашын йәшерҙе.

"Эсте ҡапшағанда бармаҡ остарым менән һиҙҙем, хәлдәр шәптән түгел... Аналыҡ торбаһының янында ниндәйҙер шеш бар... Бәлки, Яна балаға уҙғандыр ҙа ғоман шунда туҡтап ҡалып үҫешә башлағандыр? Әгәр шулай икән, торба тиҙҙән ярыласаҡ, ҡорһаҡ ҡыуышлығына ҡан китәсәк, ә ундай ҡан һарҡыуын туҡтатыу еңелдән түгел, уны фәҡәт диагностик маҡсатта яһалған операция менән генә башҡарырға мөмкин. Улай тиһән, шеш йәнһеҙ, һалҡын, ҡаты һымаҡ тойолдо... Яман шеш була күрмәһен... Ундай сир башта үҙенең барлығын белдермәй, ҙурайып, эргәһендәге башҡа туҡымаларҙы ҡыҫа башлағас, һуңғы стадияла ғына һыҙланыу барлыҡҡа килә... Йәнә тегә саҡта осҡонланып янған күҙҙәрҙең нуры күпкә ҡайтышланған. Был да етди сирләү билдәһе... "

- Нимә әйтерһегеҙ, старшина?.. Инде һеҙгә Азамат тип кенә өндәшергә мөмкинме?

- Мөмкин әлбиттә... Яна Хәйретдиновна...

- Яна!

- Эйе, Яна... Әйтерем шул, кисекмәҫтән поликлиникаға акушер-гинекологҡа барығыҙ. Ары нимә эшләргә кәрәклекте ул әйтер.

- Бында, ҡалала ғына дауаланып булмаймы?

- Булмай.

- Бер ни тиклем ваҡыттан сирем үҙаллы үтмәҫме?

- Ниндәйҙер сир хаҡында әйтеү иртәрәк. Тикшерелһәгеҙ, профилактик йәһәттән зыян итмәҫ. Ауырыуҙы дауалағанса, уны иҫкәртеү хәйерлерәк.

- Минән нимәнелер йәшерәһегеҙ, әйтеп еткермәйһегеҙ булһа кәрәк.

- Алдығыҙҙа күҙегеҙгә тура ҡарап ултырам түгелме?

Яна кабинеттың ишеге төбөнә килгәс, ҡайырылды:

- Һеҙҙең яҡта умырзая үҫәләр?

- Үҫә. Яҙ етте иһә тау биттәренә зәңгәр яулығын яба.

- Үтә, бик-бик матурҙарҙыр... - Паркта минең уға биргән баһаны хәтерләгәндер, һүрәнке йылмайҙы. - Күрергә ине... Ә һеҙ әйткән тауҙар ҡайһы яҡтарҙа?

- Башҡортостандың көн яғында.

Янаның керпек остары сабырһыҙ дерелдәп ҡуйһалар ҙа йөҙө үҙгәрмәне. Ул киңәт, тегә саҡтағы һымаҡ, һөйләшеү темаһын үҙгәртте:

- Усығыҙҙа, бармаҡ остарығыҙҙа ниндәйҙер йылылыҡ бар. Шуны тегә саҡта ла, бөгөн дә тотош тәнем менән тойҙом. Һыҙланыуым баҫылғандай итте. Рәхмәт һеҙгә. Хушығыҙ.

- Сәләмәтләнегеҙ ҙә тағы шәмбе көн беҙгә киноға килегеҙ.

- Ә һеҙ ун өсөнсө рәттән ҡарашығыҙҙы алмай мине күҙләйәсәкһегеҙме?

- Юҡ. Һеҙ бит ир ҡатыны. Кино ғына ҡарармын.

- Күҙләгеҙ. Рөхсәт итәм. Ул саҡта мин үҙемде кемгәлер кәрәкле итеп тойормон. Кисә тегә саҡ майҙанда сәскәләр менән һатыу иткән ҡарсыҡты урамда тап итеп, кәрт һалдырҙым, оҙаҡ, бәхетле йәшәрһең, тине.

- Яҡты күңелле ҡарсыҡтың әйткәндәренә мин дә ышанам.

"Күҙҙәрҙең нуры һүнгән... "

Айҙан ашты инде, Слуквиндар киноға йөрөмәй. Тегә ҡара "Волга" көткән еремә боролмай, штаб тирәһендә һирәк-һаяҡ күренгеләй ҙә юҡҡа ла сыға. Мәҙәниәт һарайының йәме китте, ул ғына ла түгел, тотош мәктәптән йылылыҡ, ҡот, толҡа ҡасты һымаҡ. Бер нисә тапҡыр теләкһеҙ генә киноға барып әйләндем, әммә гел генә, мине ирештерергә теләгәндәй, көлкөнө килтермәгән еңел-елпе комедияларҙы күрһәтәләр. Кистәрҙе китап уҡып үткәрәм, йә бер ниндәй шөғөлһөҙ ҡулдарымды баш аҫтына ҡуйып, түшәмгә төбәлеп ятам. Ни сәбәптәндер, ошо арала өйҙән дә хаттар һирәк килә башланы, әсәйем сырхап китмәһә ярар ине, тип борсолам. Балтик буйы үҙенең һис ҡасан үҙгәрмәҫ тиҫкәре холҡон күрһәтергә тотондо, тамам ипкә килмәҫлек хәлгә төшөп, көндәр боҙолдо. Туҡтауһыҙ һибәләгән бысҡаҡҡа ҡойонған ҡала көңгөрт һоро төҫкә инде, йорттар, тротуар буйлап теҙелгән ағастар ыжғыр елдән өшөй, төпһөҙ күктән елгәрелгән сиркандырғыс тамсыларҙан күшегә. Йәшенән шәмәреп шешмәкләнгән, буҫыҡҡан йөҙгә оҡшап бүртенгән, урын-урыны менән күләүекләнгән ер өҫтөн һары, ҡыҙғылт, көрән япраҡтар япҡан. Ҡуйы томан һәммәһен шәүләләй тоноҡ күрһәтә. Шул бәләнгертлек сараһыҙлыҡ тыуҙыра, йәнде ашай.

Мәктәпкә пополнение килде. Яңы хеҙмәткә алынған, күтән һурпаһын татып ҡарамаған шыйыҡ буыныһы малай-шалайҙар. Шуғалыр, ҡырыҫ хәрби хеҙмәт кәлейәһенә төшә алмай ыҙалайҙар, беҙҙе ыҙалаталар. Ошоғаса итек-сылғау күрмәгән аяҡтары күберсей, дымлы һауаға күнекмәгәнгә әллә, һыуыҡ тейҙереп тымаулай һалып баралар, саҡ ҡына сыйылған ерҙәре лә бөтәшмәҫ сей яраға уҙа ла китә. Күптәрәнә һыҙлауыҡ, эренле сәбәртке сығып яфалай. Санчасҡа мөрәжәғәт итеүселәр быуа быуырлыҡ, ваҡ-төйәк дауалау эштәре баштан ашҡан. Өҙләкһеҙ мыжыуһыҡтауҙан, йән болоҡһоуынан асыуым ҡабара, сәбәпһеҙгә талағым таша. Хәлемде йыйыштырыусы Анна Максимовна тиҙ арала төшөнөп алды. Күңелемде күтәрергә теләптер, эшкә килеү менән яҙғы ҡояштай балҡып, мәрәкәләп ебәрҙе: "Шунан, көйһеҙ кейәү, хәлдәрең нисек? Нинә улай балтаң һыуға төшөп йөрөй әле? Кәләш итеп алаһы ҡыҙың хат яҙмаймы? Адресын бир, ҡыҙҙырып алмаһам булмаҫ... ", "Бөтәһе лә һәйбәт, тик бынау көнө бигерәк йонсоу..." тип, танау аҫтынан мығырҙап ҡуйыу менән генә сикләндем.

Ҡыуандырған, йәнемә тынослыҡ биргән бер ваҡиға булып алды. Яңы пополнение менән беҙҙең яҡтан берәү килгән. Күрше районнан. Шул хаҡта ишетеү менән яҡын туғандай күреп, тегә егетте эҙләп табып, санчасҡа алып ҡайттым, алдына военторгтан килтергән тәмтомдо өйөп ташланым. Үҙемсә һый-хөрмәт күрһәтәм инде. Ҡунағым яңы ун һигеҙе тулған сибек буйлы, аҫҡалаҡ йөҙлө баҙнатһыҙ үҫмер. Минең биргән һорауҙарыма йүнләп яуап та ҡайтара алмай, старшина погондарына ҡурҡыулы ҡарап ала ла шымтайып тик ултыра. Барыбер күңелгә рәхәт, ни тиһәң дә, яҡташ бит.

Бер аҙна самаһы үткәндән һуң тегә һалдатым ҡабул итеүгә килгән. Нишләптер, иң аҙаҡҡа ҡалып килеп инде:

- Иптәш старшина, инергә рөхсәт итегеҙ?

- Маладис яҡташ, килеп өлгөрмәгәнһең, ана бит, устав ҡағиҙәләренә лә төшөнә башлағанһың, һалдатҡа ла оҡшап киткәнһең! - Тәненә төшкән гимнастеркаға, аяҡтарында килбәтһеҙ күренгән кирза итектәренә ҡарап алдым. - Нимә, сырхап киттеңме?

- Юҡ, иптәш страшина. Мин шуға килдем... - Ары нисек дауам итергә белмәгәндәй, туҡтап ҡалды. - Тыуған яҡтың еҫен еҫкәгегеҙ киләме?

- Нисек? - Аптырап киттем. - Әллә китер саҡта беҙҙең яҡтың һауаһын берәй һауытҡа тултырып алдыңмы?

- Юҡ та. Бына, - алдыма ҡулына тотоп индергән китабын һалды, - ошоно килтергәйнем.

- Нимә ул? - Һаман төшөнмәй ултырам.

- Минең дуҫ ҡыҙым быйыл биология факультетына уҡырға инде. Ул гербарий йыйырға ярата. Армияға китерҙән алда бүләк иткәйне.

Китапты ҡулыма алдым, унда һәр биткә киптерелгән үлән йә сәскә ҡыҫтырылған: юл япрағы, көтөүсе сумкаһы, үгәй инә үләне, тау йыуаһы, муйыл, ҡыңғырау сәскәләре, мәтрүшкә, һары мәтрүшкә... Тыуған яғымда үҫкән үҫемлектәрҙән тулы коллекция йыйылған.

- Китсе, бына күпме байлыҡ!

- Һоҡланыуымды йәшермәй, китап биттәрен асҡылап, үләндәрҙе сиратлап еҫкәргә керешеп киттем. Рәхмәт, Сережа, һин ысынлап та бында беҙҙең яҡтың төҫөн, еҫен килтергәнһең.

- Теләгән үләнегеҙҙе һайлап алығыҙ...

- Әлләсе? Килешер микән? - Ҡыйынһынып ҡалдым.

- Мин бит һеҙгә тотошлайы менән бирмәйем. Бүләгемдең бер өлөшө менән генә бүлешәм.

- Бынау күк умырзаяны алайым. - Сәскәне ҡәҙерләп кенә алдымдағы блокнот араһына ҡыҫтырҙым.

Кешенең кәйефен күтәреү өсөн күпме генә кәрәк тиһең, дарыу еҫе һеңгән кабинетым күҙ менән ҡаш араһында яҡтырып киткәндәй итте.

Кискеһен китапхананан бер ҡосаҡ китаптар алып, бүлмәмә инеп кенә тора инем, әллә һағалап көткән, артымдан уҡ Андрей Диденко күренде:

- Инергә рөхсәт итегеҙ, иптәш старшина? - Бармаҡ остарын пилоткаһының ситенә тигеҙеп алды.

- Әртисләнмә, саф алдында түгелбеҙ. Үт.

- Беҙ армияла, иптәш старшина, шуға уставтың һәр пунктын тайпылышһыҙ үтәү - һәр һалдаттың изге бурысы.

- Килештерәһен. Ә бит һөнәребеҙ ҡайһылыр кимәлдә бындағы ҡағиҙәләргә тап килмәй. Беҙҙең бурыс - иң тәүҙә ауырыуҙарҙы дауалау.

- Һин хаҡлы... - Саҡырыуымды ҡабул итмәгән Диденко асыҡ ишектең яңағына һөйәлде, тәү ҡат күргәндәй бүлмәмде ентекләп күҙҙән үткәрҙе. - Ә шулай ҙа насар йәшәмәйһең, ә, старшина? Санчасть залында телевизор, бүлмәңдәге тумбочка өҫтөндә телефон, эргәндә кассеталы магнитофон, гражданкалағы һымаҡ көн итәһең! Тик бер генә нәмә һаман аңлашылып етмәй, хәрби хеҙмәткә бер осорҙа алындыҡ һымаҡ - әлеге мәлдә һин старшина, хан һарайындай урын биләйһең, офицерҙарға тип әҙерләнгән тәмле ризыҡты йыпыраһың, ә мин бахыр хужалыҡ взводының казармаһында йоҡлайым һәм тауыҡтай тары бутҡаһын суҡырға мәжбүрмен. Погондарым да өлкән сержанттыҡы ғына, шул хаҡта, исмаһам, бер тапҡыр булһа ла уйлап ҡараманыңмы? Был бит мине урынһыҙ рәнйетеү, икенсерәк итеп әйткәндә, ил алдында күрһәткән хеҙмәттәремде лайыҡлы баһаламау!

- Ҡасан да булһа тыуған ил үҙенең исемһеҙ геройын күрер, уның ҡан һәм тир менән яулаған наградаһын тантаналы шарттарҙа тапшырыр, тәғәйен хөрмәтен күрһәтер, тип ышанайыҡ.

- Сарказмығыҙҙы үҙегеҙҙә ҡалдырығыҙ! - Сәпкә тейгән мыҫҡылдан Диденко сыпранлап китте лә, үҙен ҡулға алып өлгөрөп, һин дә мин дауам итте.

**(Дауамы бар).**

✓ *Уҡытыусы исеме һәм даны кешегә билдәле һөнәрҙәр араһында барыбер ҙә иң юғары рейтинг йыйғаны икән. Мәҫәлән, 2015 йылғы рейтингта уҡытыусы һөнәре биш балдан 3, 82 процент йыйған.*



ҺЕҘҘЕҢ ҺОРАУ БУЙЫНСА



# УҠЫТЫУСЫМ!



## (Халыҡ-ара уҡытыусылар көнөнә байрам сценарийы)

**Уҡытыусылар көнөнә арналған байрамды уҡыусылар ойоштороһа, ҡыҙыҡлыраҡ була. Шунлыҡтан, был сценарий уҡыусылар өсөн. Әммә уйында уҡытыусылар ҙа ҡатнаша. Кластағы парта артында уҡытыусылар ултыра (ветеран уктыусылар ҙа булырға мөмкин). Улар алдына сәскәләр ҡуйылған. (Класс бүлмәһен алдан көҙгө гербарийҙар, сәскәләр, плакаттар, фотолар менән биҙәргә кәрәк). Байрамды уҡыусылар алып бара. Бер класс уҡыусыларын ойоштороусы булһа, башҡалары тамашасы булып ултыра ала.**

*(Матур көй уйнай).*

**Беренсе уҡыусы:** Хәйерле көн, хөрмәтле уҡытыусыларыбыҙ! Һаумыһығыҙ, балалар, саҡырылған ҡунаҡтар!

**Икенсе уҡыусы:** Бөгөн беҙ ошо матур залға Халыҡ-ара уҡытыусылар көнөн билдәләргә, йәғни ҡәҙерле уҡытыусыларыбыҙҙы байрам менән ҡотларға йыйылдыҡ.

Уҡытыусы - ниндәй гүзәл исем!
Кеше итеп һине әҙерләй.
Тормоштоң ул көрәшсеһе итә,
Кескенәнән һөйә, ҡәҙерләй.

**Беренсе уҡыусы:**
Күҙҙәр ҡамашырлыҡ яҡты була
Тиҙ булһа ла йәшен йәшнәүе.
Ниндәй гүзәл, бер көн булғанда ла
Кеше булып Ерҙә йәшәүең!

**Икенсе уҡыусы:** Ысынлап та, халҡыбыҙҙың сәсән телле бөйөк улы, халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың был шиғыр юлдары менән килешмәү мөмкин түгел. Заман ни тиклем генә алға бармаһын, ниндәй генә алдынғы технологиялар уйлап табылмаһын, белем алыуҙың ниндәй генә киң даирәләре булмаһын, уҡытыусы ил изге, иң кәрәкле һөнәр булып ҡала. Ҙур тормош юлына илтеүсе, тәүге белем баҫҡыстарына баҫтырыусы, серҙәренә мәңге төшөнөп бөтә алмаҫлыҡ матур ҙа, ауыр ҙа донъяны танытыусы бөйөк зат бит ул уҡытыусы!

**Беренсе уҡыусы:** Беҙ йыл һайын уҡытыусыларыбыҙҙы ошо байрам менән тәбрикләйбеҙ. Әммә беҙҙең уларға булған оло һөйөү тик бер көнлөк кенә түгел. Улар беҙҙең бала саҡтың матур бер өлөшө, уларға булған хистәребеҙ гүмер буйы оҙата килә беҙҙе. Юҡҡамы ни, ололарҙың һәр береһе үҙенең уҡытыусыларын йылы һүҙҙәр менән иҫкә ала.

**Икенсе уҡыусы:** Шуға ла беҙ бөгөн байрамды уҡытыусыларыбыҙға арналған йырҙан башлайыҡ! Йыр-бүләгебеҙ һеҙҙең өсөн, хөрмәтләләребеҙ!

*(Уҡытыусыларға арналған матур йыр)*

**Беренсе уҡыусы:** Уҡытыусыларҙың да уҡытыусылары була. Бөгөн беҙҙең залда әллә нисә быуын балаларға белем биргән (исем-атамаһы) ултыра. Бөгөн уның әллә нисә уҡыусыһы үҙҙәре үк уҡытыусыларҙыр, әммә уның да уҡытыусыһы булған һәм (исем-атамаһы) үҙенең тәүге уҡытыусыһы хаҡында иҫтәлектәре менән бүлешә.

*(Ветеран уҡытыусы һөйләй)*

**Икенсе уҡыусы:** Хөрмәтле (исем-атамаһы), һеҙҙең өсөн беренсе синыфтар йыр әҙерләне.

Йылы ҡараш, наҙлы һүҙҙәрендән
Тойҙом һинең йөрәк йылыңды
Уҡытыусым, иң ҡәҙерле кешем,
Бүләк итеп ал һин йырымды.

*(Йыр).*

**Икенсе уҡыусы:** Хөрмәтле дуҫтар! Әйҙәгеҙ, уҡытыусының халҡыбыҙ тарихындағы ролен ҡарап, баһалап үтәйек әле. Борон-борондан халҡыбыҙҙа "уҡытыусы" тигән һүҙгә тәрән мәғәнә һалынған.

**Беренсе уҡыусы:** Иң тәүге мәктәптәр Боронғо Көнсығышта беҙҙең эраға тиклем IV - V мең йыллыҡтарҙа уҡ барлыҡҡа килгән.

**Икенсе уҡыусы:** Урыҫ дәүләтендә 988 йылда кенәз Владимир иң яҡшы кешеләрҙең балаларын "китап эшенә" тапшырырға ҡушҡан.

**Беренсе уҡыусы:** Баланы ата-әсәһе һабаҡҡа, йәғни уҡыу-яҙыуға, белемгә өйрәтеү өсөн мөғәллимгә тапшырған. Боронғо башҡорттар ҙа уҡытыусыны "мөғәллим" тип атаған.

**Икенсе уҡыусы:** Халыҡта мөғәллим булырҙай баланы йәштән Мысыр, Ғәрәп илдәренә ебәреп уҡытып алғандар. Улар күп йыллап белем эстәп, ер-һыу күреп йөрөп ҡайтҡан. Бер уҡытыусы яҙманы ла, тарихты ла, дини тәғлимәттәрҙе лә, географияны ла, хатта музыканы ла уҡыта алған. Тимәк, ул универсал кеше булған!

**Беренсе уҡыусы:** Борон тик аҡсалы кешеләр генә уҡытыусы яллай йәки мәҙрәсәләрҙә балаларын уҡыта алған.

**Икенсе уҡыусы:** Ауылдарҙа уҡытыусы ролен мулла йәки мәзин башҡарған. Улар ғәрәп яҙмаларында яҙырға, уҡырға өйрәткән.

**Беренсе уҡыусы:** Белемгә өйрәтеүсегә оло хөрмәт беҙҙең халыҡта шул замандарҙа уҡ булған. Уҡытыусыға ҡаршы һүҙ әйтмәгәндәр, уны ололағандар, хатта йәш кенә уҡытыусыны ла ауыл ҡарттары менән бер кимәлгә ҡуйғандар.

**Икенсе уҡыусы:** Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, ил буйынса ир-егет уҡытыусылар бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡала, хатта ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, иң беренсе булып фронтҡа юллаçан.

**Беренсе уҡыусы:** Балалар уҡытыусыларын дәрестән һуғышҡа оҙата. Бына бер баланың иҫтәлегенән: "Уҡытыусыбыҙ дәрескә килде лә, журналы менән аҡбурын өҫтәленә һалғас, беҙгә оҙаҡ итеп ҡарап торҙо. Беҙ уның рус теле дәресен башлағанын көтәбеҙ. Унан ул: "Балалар, бөгөн беҙҙең дәрес булмаясаҡ. Беҙ һеҙҙең менән тыуған ил, атай-әсәй, улар алдындағы яуаплылыҡ хаҡында һөйләшәсәкбеҙ", - тине. Беҙ дәрес булмауына бик шатландыҡ. Ул оҙаҡ ҡына беҙгә үҙенең бала сағы, ни өсөн тап уҡытыусы һөнәрен һайлауы тураһында һөйләне. Беҙҙе яҡшы уҡырға, ил өсөн намыҫлы йәштәр булып үҫеп етергә саҡырҙы. Беҙ аңламағанбыҙ, был уҡытыусыбыҙҙың беҙҙең менән хушлашыу дәресе булған икән. Тәндә ул фронтҡа киткән. Шул китеүҙән әйләнеп ҡайтманы ла. Ҡайҙалыр Украина фронтында һәләк булған, тигән хәбәре генә килде.

**Икенсе уҡыусы:** Ошоноң кеүек уҡытыусылар һәр ҡала һәм ауылдан, һәр мәктәптән булған. Улар даны мәңгелек!

*(Темаға ярашлы концерт номеры).*

**Беренсе уҡыусы:** Уҡытыусы исеме һәм даны кешегә билдәле һөнәрҙәр араһында барыбер ҙә иң юғары рейтинг йыйғаны икән. Мәҫәлән, 2015 йылғы рейтингта уҡытыусы һөнәре биш балдан 3, 82 процент йыйған. Шулай ҙа уҡытыусылар һаны ил буйынса кәмей бара икән. Быйыл ун йыл элек ил буйынса 1,7 миллион уҡытыусы булһа, быйыл улар һаны 1, 2 миллион булып ҡалған. Һаҡлайыҡ уҡытыусыларыбыҙҙы!

**Икенсе уҡыусы:** Ә хәҙер "педагогика" һөнәренә бәйле ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр. Боронғо гректарҙа "педагог" һүҙе "баланы йөрөтөүсе" мәғәнәһенән аңлатҡан. Улар иң аңлы, әммә ғәрип ҡолдан балаларын өйрәтеүсе, ҡараусы кеше яһаған.

**Беренсе уҡыусы:** Ә арифметика уҡытыусыһы атамаһы уларҙа "таш" һүҙенән килеп сыҡҡан. Йәғни, таштар менән һанағандар ҙа, уҡытыусыны ла шул һүҙ менән атағандар икән.

**Икенсе уҡыусы:** Рәсәйҙә революциянан һуң уҡытыусыны "шкраб" тип атап алғандар. "Школьный работник" тигәнде ҡыҫҡартып алғандар, йәнәһе.

**Беренсе уҡыусы:** Ә беҙ уҡытыусыларҙы хөрмәтләп Уҡытыусы тип атайбыҙ. Сөнки ул беҙҙе белемгә һәм аңға әйҙәүсе!

*(Концерт номеры)*

**Беренсе уҡыусы:** Ә хәҙер уйын уйнап алабыҙ! Беҙ мәктәптәге уҡытыусыларҙы ҡылыҡһырлайбыҙ, ә һеҙ (парта артында ултырыусы уҡытыусыларға мөрәжәғәт итә) яуаптарын табаһығыҙ. Уҡытыусылар белә алмаһа ғына балалар ярҙам итә. Башлайбыҙ!

*(Алып барыусылар алмашлап уҡытыусыларҙы тышҡы һәм эске сифаттары буйынса ҡылыҡһырлайҙар, уның ҡыҙыҡлы яҡтары, ҡабатларға ятҡан һүҙҙәре һыҙыҡ өҫтөнә алына. Мәҫәлән: һары сәсле, зифа буйлы, ятҡан һүҙҙәре: "Тынлайбыҙ!", "Ҡабатлап әйтәм" һәм "Хәтерләгеҙ". Артыҡ уҫал түгел, әммә аңғармаҫтан "ике"ле сәпәргә мөмкин. Ятҡан шөғөлө - сәскәләр, сөнки кабинеты ла сәскәләргә күмелгән һ.б. ).*

*(Концерт номеры)*

**Икенсе уҡыусы:** Шундай бер ҡыҙыҡ мәғлүмәт уҡыным әле. Ун йыл мәктәптә бер предметты уҡытҡан уҡытыусының "предмет ҡалыбы" барлыҡҡа килә икән.

**Беренсе уҡыусы:** Нисек инде?

**Икенсе уҡыусы:** Мәҫәлән, ҡупшы кулдәк, костюм, прическа һәм һөйләү телмәрен алайыҡ. Тикшеренеүселәр ун йыл мәктәптә эшләгән уҡытыусыны ошо билдәләре буйынса урамда ла, автобуста ла танырға һәм яңылышмай ғына уның һөнәрен әйтеп бирергә була, тип яҙалар.

**Беренсе уҡыусы:** Һөнәренән тыш, уның ниндәй фән уҡытыусыһы икәнлеген дә әйтеп була, тиҙәр.

**Икенсе уҡыусы:** Нисек белергә инде уны?

**Беренсе уҡыусы:** Мәҫәлән, тарих уҡытыусылары фәлсәфәүи уй-фекерле, төрлө фекерле кешеләр булып ҡалыплаша икән. Улар менән һөйләшеү, аралашыу ҡыҙыҡлы.

**Икенсе уҡыусы:** Математика уҡытыусылары аныҡ хәл итеүсе, һөйләшеүҙе ҡыҫҡа тотоусы кешеләр. Улар ваҡыттың, аҡсаның һәм, гөмүмән, һандарҙың ҡәҙерен белә.

**Беренсе уҡыусы:** Тел уҡытыусылары һөйләшеүгә әүәҫ була. Улар эҙләнергә, күп нәмә менән ҡыҙыҡһынырға, һиңә күберәк мәғлүмәт бирергә тырыша.

**Икенсе уҡыусы:** Химия уҡытыусыһы үлсәп кенә һөйләй, үлсәп кенә эшләй, бар нәмәнең дә самаһын белә торған кеше.

**Беренсе уҡыусы:** Былар, әлбиттә, шаяртыу булды, ә иң мөһиме, уларҙың барыһы ла яҡшы, изге кешеләр! Улар беҙҙе уңышлы һәм белемле булыуға өндәй!

Уҡытыусы! Ошо исемдән дә
Бөйөгөрәк ниндәй исем бар!
Күңелем тулы һиңә рәхмәтем бар,
Йырҙа әйтеп бөтмәҫ хисем бар.

*(Концерт номеры).*

**Беренсе уҡыусы:** Ә хәҙер хөрмәтле уҡытыусыларыбыҙҙы бәләкәстәр ҡотлай (балалар баҡсаһы ла булырға мөмкин йәки 4-5 йәшлек кесе туғандарҙы алып килергә мөмкин). Беҙ уларға бер нисә һорау бирәсәкбеҙ.

*(Дүрт-биш бала сығып баҫа).*

**Икенсе уҡыусы:** Бәләкәстәр, кем белә: кем ул уҡытыусы?

**Беренсе уҡыусы:** Ул ни эшләй?

**Икенсе уҡыусы:** Уҡытыусыны һеҙ танығыҙмы?

**Беренсе уҡыусы:** Ни өсөн уҡытыусы балаларҙы уҡыта?

**Икенсе уҡыусы:** Һеҙ уҡырға теләйһегеҙме?

**Беренсе уҡыусы:** Уҡытыусы булыр инеме? Ни өсөн?

**Икенсе уҡыусы:** Уҡытыусыларға бөгөн ниндәй теләктәр әйтәбеҙ?

*(Кескәйҙәрҙән ҡотлау).*

**Беренсе уҡыусы:** Ә хәҙер һүҙҙе ата-әсәләргә бирәбеҙ. Рәхим итегеҙ.

*(Ата-әсәләрҙән бер вәкил ҡотлау һүҙе әйтә, бәлки, музыкаль бүләк тә булыр).*

**Икенсе уҡыусы:** Дуҫтар, ә хәҙер хөрмәтле уҡытыусыларыбыҙҙы ла уйынға ҡушылырға саҡырабыҙ. Һынап ҡарайбыҙ остаздарыбыҙҙы, улар икенсе фәндәрҙе лә белә микән? Әйҙәгеҙ, ҡәҙерле уҡытыусыларыбыҙ, кем үҙен һынап ҡарарға теләй?

*(Өҫтәлгә төрлө фәндәрҙең әсбаптары һалына: химия, тарих, рус теле, башҡорт теле, алгебра һ.б. Уҡытыусы саҡырып сығарыла, уның күҙен бәйләйбеҙ, өҫтәлдәге китаптарҙы тиҙ генә бутайбыҙ һәм ул бер китапты һайлап алғас, бәйләм алынып, ул ошо фән буйынса белгәндәрен әйтә. Мәҫәлән, башҡорт әҙәбиәте икән, бер шиғыр өҙөгө йәки әҫәр, яҙыусы тураһында мәғлүмәт бирә. Математика икән - бер ҡағиҙә, тарих икән - бер тарихи ваҡиғаны әйтергә тейеш. Шулай бер нисә уҡытыусыны сығарып уйнатырға була. Уҡытыусыларға призлар бирелә).*

**Беренсе уҡыусы:**
Уҡытыусым! Һүҙ хатаһын түгел
Күңел хатаһын да төҙәттең,
Дөрөҫ итеп уҡыу- яҙыуға ла,
Дөрөҫ йәшәргә лә өйрәттең.
Уҡытыусым! Аҡыл бирҙең миңә
Белем тауҙарына менгән саҡта,
Был тормошта әле уйлармын мин
Һинең бөгөн әйткән һүҙҙәр хаҡта.

*(Концерт номеры).*

**Икенсе уҡыусы:** Хөрмәтле дуҫтар, беҙ бөгөн уҡытыусыларыбыҙҙы ҡотланыҡ, хөрмәтләнек. Бөгөн уларҙың көнө. Ә башҡа көндәр бөтәһе лә беҙҙеке. Сөнки уҡытыусыларыбыҙ көн һайын беҙҙең менән эшләй, беҙҙең киләсәк өсөн көс түгә.

**Беренсе уҡыусы:** Беҙ улар ҡулында белем донъяһына инәбеҙ, киләсәкте күҙаллайбыҙ, үҙаллы шәхестәр булып формалашабыҙ.

**Икенсе уҡыусы:** Күп йылдар үтер, бөгөнгө уҡытыусыларыбыҙ ялға китер, беҙ үҫербеҙ, әммә уларҙың нурлы йөҙөн һәм яҡшы һүҙҙәрен бер ваҡытта ла онотмабыҙ. Бәлки, бөгөн беҙ уларҙы аңлап та етмәйбеҙҙер, әммә был шулай буласаҡ!

**Беренсе уҡыусы:** Хөрмәтле уҡытыусыларыбыҙ, һеҙҙе тағы ла бер тапҡыр байрам менән ҡотлайбыҙ! Ауыр хеҙмәтегеҙҙә сабырлыҡ һәм һаулыҡ, шәфҡәтлек һәм күңел бөтөнлөгө теләйбеҙ!

**Икенсе уҡыусы:** Байрамығыҙ менән һеҙҙе!

Музыка. Бәләкәстәр уҡытыусыларға сәскәләр, үҙҙәре эшләгән һүрәттәрен тапшыра. Юғары синыфтар уҡытыусыларҙы бейергә саҡыра.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КИҘЕҮҘЕ...
## кемдәр ауырыраҡ кисерә?

■ Бала йоҡоһоноң сифаты һәм оҙайлығы уның сәләмәтлегенең дөйөм торошо тураһында һөйләй. Статистика буйынса, бала тыуған ғаиләлә сабыйҙың йоҡоһона ҡағылған һөйләшеүҙәр тәүге урынға сыға. Боронғолар ҙа, йоҡлай, тимәк, үҫә, тигән һәм бында дөрөҫлөк бар, ти ғалимдар. Белгестәр фекеренсә, бала саҡта йоҡо менән бәйле проблемалары булған кешеләрҙең ҙурайғас сәләмәтлектәре насарыраҡ була икән. Шуға ла баланың йоҡоһона етди иғтибар бүлергә кәрәк.

■ Табиптар әйтеүенсә, ғүмер оҙайлы булһын өсөн сәләмәт йәшәү рәүешe алып барырға кәрәк. Ә бына "Forbes" журналы 100 йәштән уҙған кешеләрҙән һорау алып, уларҙың оҙаҡ йәшәү серен асыҡларға тырышҡан. Баҡтиһәң, 100 йәшлек иң сәләмәт кешеләр Японияла йәшәй икән, сөнки улар йәшелсәне, балыҡты күп ашай. Йоморҡта, ит, һөт аҙыҡтары бында аҙыраҡ ҡулланыла. Мәҫәлән, АҠШ-та йәшәүсе Дэйзи Макфадден уларҙың миҫалына эйәреп, емешләк, балыҡ, йәшелсә менән туҡлана, уға ноябрь айында 101 йәш туласаҡ. Оҙаҡ йәшәүселәр әйтеүенсә, газлы эсемлектәр сәләмәтлеккә зыян килтерә. Унын урынына һыу, мүк еләге һуты, һөт йәки сәй эсергә кәрәк. Ҡәһүә һәм алкоголле эсемлектәр тыйыла. Шулай ҙа ҡайһы берҙә үҙенә яратҡан аҙыҡтарынды ашарға рөхсәт итергә кәрәк, ти табиптар. Көн һайын нимә мәнәндер шөғөлләнеү шулай уҡ ғүмерҙе оҙайта. Телевизор алдында ултырыуға ҡарағанда хәрәкәт итеү күпкә яҡшыраҡ. Баҫкыстан йәйәү менеү, урамда йөрөп килеү шулай уҡ сәләмәтлек сығанағы икән. Доктор Эрик Раков әйтеүенсә, баш мейеһе лә ял итергә тейеш түгел. Быны өсөн иң ябай ысул булып кроссвордтар сисеү тора. Берәй музыка ҡоралында уйнау ҙа мейене йәш һаҡлай. Оло кешеләр өсөн доғалар уҡыу ҙа кәрәк, был уларҙы тынысландыра һәм оҙайлы йәшәүгә булышлыҡ итә. Психиатр Гэри Кеннеди раҫлауынса, йәштәр менән аралашыу, уларҙы тәрбиәләү шулай уҡ үҙенде кәрәкле итеп тойорға мөмкинлек бирә.

■ Зирәклек күрһәткән кеше башҡаларҙың күҙе алдында бик уңышлы кеше булып күренә, ти Квинсленд университеты ғалимдары. Тикшенеүселәр ҡатнашыусылар араһында эрудицияны тикшереүсе һорауҙарға тиҙ яуап биреүселәрҙе шулай баһалағандар. Һөҙөмтәләр аҡыл ҡеүәһенә, кешенең шәхси сифаттарына бөтөнләй бәйле булмай сыҡҡан. Ғалим Уильям фон Гиппель билдәләүенсә, социаль интеллект - ул белгәнен практикала ҡуллана алған кеше. Бындай кешеләр йыш ҡына лидер булып тора һәм уларҙы тап зирәклеге берләштерә лә инде.

■ Дархэм университеты неврологы Аманда Эллисон белдереүенсә, ир-ат ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда һалҡын тейҙереү һәм киҙеү симптомдарын ауырыраҡ кисерә. Доктор әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егеттең баш мейеһе үҫешенең бер осоронда айырмалыҡтар барлыҡҡа килә. Күп күрһәткестәр, шул иҫәптән, тән температураһы өсөн яуап биреүсе баш мейеһе өлөшө ир-егеттәрҙә тестостерон бүленеп сығыу һөҙөмтәһендә тиҙерәк үҫешә. Мейенең был өлөшө организмға инфекция инеүенә шунда уҡ тәьҫир итә һәм үҙенең эшен башлай, һөҙөмтәлә, тән температураһы күтәрелә. Тимәк, ирҙәр дәүмәл яғынан ҙурыраҡ булыу сәбәпле, нығыраҡ сирләйҙәр.

ЗАМАН БАШҠОРТО

# ИЛЕҢДЕ, ТЕЛЕҢДЕ, ЕРЕҢДЕ ҺАҠЛАУ...

## Аллаһы Тәғәләнең аманаты

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**Хәҙерге ваҡытта, совет осоронда ла шулай булды, күптәр ғәрәп телен белмәйенсә, аңламайынса, намаҙҙарҙың кириллица менән бирелгән транскрипцияһын ятлап, намаҙ уҡып йөрөй. Бындай осраҡ өсөн "Уҡыуымдағы кәмселек-хаталарымды ғәфү ит..." тигән һүҙҙәр ҙә уйлап сығарылған. Бер үк ваҡытта транскрипция аша намаҙ уҡыуҙы ла инҡар итеп булмай, сөнки, әгәр ҙә беҙ быны дөрөҫ түгел тип таныһаҡ, илебеҙҙең намаҙ уҡыусы иң күпселек мосолмандарын диндән кире дүндерәбеҙ бар. Ошо мәсьәләгә һинең ҡараш нисек?**

- Миненсә, оло быуындың транскрипциянан уҡыуын аңларға була. Бында уларҙың ғәйебе юҡ. Улар транскрипциянан уҡыһа ла, доғаларҙағы һәр һүҙҙең мәғәнәһен аңларға тейеш. Сөнки әйткән һүҙеңдең мәғәнәһен аңламайынса топ, эске дөрөҫ инаныу барлыҡҡа килмәйәсәк. Һәр һүҙҙең мәғәнәһен аңлар өсөн дә юл бар: хәҙерге ваҡытта төрлө телдәргә тәржемә ителгән Ҡөрьән китаптарында сүрәләр өс төрлө рәүештә: ғәрәпсә, тыуған телдә һәм транскрипцияла бирелә.

Беҙҙең боронғо ата-бабаларыбыҙ дүрт-биш тел белгән. Баймаҡ районының Ғабдулла Сәиди нигеҙ һалған Муллаҡай мәҙрәсәһендә йыл һайын 200-300 шәкерт уҡып сыҡҡан. Улар ғәрәп, фарсы, төрки телдәрен, Ҡөрьәнде, 40 мең хәҙисте яттан белгән, уҡып сыҡҡас, бөтөн донъяға таралған, Ислам динен Рәсәйҙә, Кавказда тотоп торған. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ Евразияла дин тотҡаһы булған. Шуға күрә диндә дөрөҫ аңлау беҙҙең халыҡтың күнелендә генетик кимәлдә ята. Ә хәҙерге көндә Башҡортостандың барлыҡ мәҙрәсәләрен тамамлаусыларҙың дөйөм һаны 50-гә лә тулмай.

**Башҡорт дәүләт педагогия университетының психология факультетында уҡыу һиңә диндәге ниндәй күренештәрҙе аңларға ярҙам итте?**

- Ҡайһы бер студенттар дингә килә лә, юғары уҡыу йортонда белем алыуҙан баш тарта, донъяуи ғилемдәрҙе хәрәм тип таный башлай. Әммә физикаһыҙ, биологияһыҙ, психологияһыҙ Ҡөрьәнде аңлап булмай. БДПУ-ла уҡыу миңә Ҡөрьәнде, динде нығыраҡ аңларға ярҙам итте. Үҙемде-үҙем нығытап аңлай башланым. Йәмғиәттә, унда кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен аңларға ярҙам итте. Иң мөһиме: төрлө секталарға йөрөгән егеттәрҙе аңларға ла мөмкинлек бирҙе. Миңә факультеттағы уҡытыусылар "Психология кеше күнелен (йәнен) өйрәнеүсе фән" тип өйрәтте. Ә мин шуны ла беләм: күнел - ул рух. Ҡөрьәндә бер кем дә рухты өйрәнә алмай, тип әйтелә. Тимәк, психология нәфсене өйрәтә. Психологик процестарға уйлау, иғтибар, хәтер, телмәр инә, нәфсе лә шуларҙан тора. Тимәк, нәфсендә тыям, тиһәң, һин иң тәүҙә фекерләүеңде тыйырға тейешһең, фекерләүҙән нәфсе башлана. Икенсенән, һин яланғас ҡыҙға иғтибар итәһең, уны хәтерәнә һалып ҡуйып, ҡайҙалыр шул хаҡта һөйләп йөрөйһөң икән - нәфселеһең. Мин хәҙер үҙемдең нәфсемдә энәһенән ебенә тиклем өйрәндем. Ә ниңә Аллаһы Тәғәлә миңә ул нәфсене биргән һуң? Рух нимә ул? Ул - көс, аккумулятор, ток. Нәфсе машина эсендә ултырыусы водитель, машина үҙе - беҙҙең тән. Рух юҡҡа сыҡһа, машина һүнә. Ҡөрьәндә әйтелгәнсә, нәфсе тамуҡта яна.

**Нәфсене кире күренеш тип әйтергә лә ярамайҙыр. Сөнки ул булмаһа, кешенең тормошта маҡсаты ла юҡҡа сығыр ине, хатта балалар ҙа тыумаҫ ине. Шулай түгелме?**

- Нәфсендә үҫтереү фарыз. Нәфсеһе көслө кешелә генә көслө рух була. Суфыйҙар ҙа нәфселәрен үҫтерә, тик уларҙың ысулдары саҡ ҡына икенсерәк, йәғни кеше ашамаған, туҡтауһыҙ зекер әйткән саҡта уның нигеҙҙәге ихтыяждары ла кәмей. Бындай осраҡта кешенең нәфсеһе үҫә һәм параллель рәүештә шәхес үҫеше лә килеп сыға. Шәхси үҫеште мин нәфсене үҫтереү тип аңлайым.

**Шунан үҫешкән нәфсендә ҡәнәғәтләндереүгә ҡаршы барлыҡҡа килгән ихтыярың, көсөң рух буламы?**

- Шулайыраҡ. Нәфсеһе ныҡ үҫкән кеше генә үҙен-үҙе тота ала. Мин бала саҡта аттар менән дуҫ булдым. Атым тыңлаһа, уға һоло, тәмлекәстәр бирҙем, әгәр ҙә тыңлашмаһа, ҡыш көнө ҡалын көртҡә төшөрөп ҡыуып, уны тирләтеп хәлен ала торғайным. Миненсә, һәр кемдең өйрәткән атылыр ул нәфсеһе. Нәфсебеҙ беҙҙең иң яҡын дуҫыбыҙ ҙа.

**Дуҫ, тигәндән, психологтарҙың дошманлыҡ хаҡында әйткән бер һүҙе иҫтә ҡалған. Улар "Дошман юҡ ул, ул һинең үҙ-үҙеңдәге еңә алмаған кире сифатың. Кеше үҙеңдәге кире сифатын еңә алмай ҙа, уның образын башҡа кешегә күсереп, уны дошман тип атай..." Психологияла бындай күсереүҙе сублимация тип тә атайҙар.**

- Бик ҡыҙыҡ. Был модулде секталарға йөрөүсе егеттәргә ҡарата ла ҡулланып булыр ине. Улар ҙа үҙҙәрендәге еңә алмаған сифатын бар донъяға, абруйлы кешеләргә, ата-әсәһенә күсереп, донъяны харам тип атай...

**Һуңғы ваҡытта барлыҡҡа килгән традицион дин төшөнсәһе динде төрләсә ҡабул итеүгә алып килде. Ҡайһылар шәриғәт ҡануны буйынса ғына йәшәүҙе: биш тапҡыр намаҙ уҡыуҙы, ураҙа тотоуҙы, ҡорбан салыуҙы, хаж ҡылыуҙы традицион дин тип атау яғында. Миненсә, атамаһынан уҡ күренеүенсә, традицион дин - ул беҙҙең атай-олатайҙар тотҡан дин, тигәнде аңлата.**

- Бер кемгә лә сер түгел был: беҙҙең атай-олатайҙар суфыйсылыҡ, тәриҡәт юлында торған. Әммә элекке суфыйҙар менән хәҙергеләре ныҡ айырыла. Дөрөҫөн әйткәндә, элекке суфыйҙар бөтөнләй икенсе төрлө булған. Хәҙерге көндә ундай имамдар ҙа юҡ. Әгәр ҙә Зәйнулла ишан Рәсүлев һымаҡ әҙерлекле, динебеҙ, халҡыбыҙ өсөн йәнен фиҙа ҡылған кеше килеп сыға икән, мин иң беренсе булып уға бәйғәт ҡыласаҡмын. Уның артынан эйәреп барыусы иң беренсе кеше мин, уның уң ҡулы буласаҡмын. Ундай кеше юҡ шул.

**Үҙебеҙҙең ерлектәге дини кадрҙар әҙерләү мәсьәләһе әле булһын көнүҙәк мәсьәлә булып ҡала килә. Был йәһәттән Сибайҙа асыласаҡ мәҙрәсәгә ҙур өмөттәр баглайбыҙ.**

- Аллаһ бойорһа, Сибай мәҙрәсәһе бында ҙур роль уйнар тип өмөт бағлайбыҙ. Юғиһә, үҙебеҙҙең ҡала-ауылдарҙа үҙебеҙҙең көс менән төҙөлгән мәсеттәргә имамдарҙы ситтән ҡуйырға мәжбүрбеҙ. Беҙгә мәсеттең ниндәй материалдан эшләнеүе мөһим түгел, ә уның эсендә ултырыусы имамдың ниндәй телдә нинде вәғәз һөйләп ултырыуы мөһим. Хәҙерге беҙҙең мәҙрәсәләрҙә уҡыусы шәкерт иң беренсе нәүбәттә традицион динде, башҡорт әҙәбиәтен, тарихыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе өйрәнергә бурыслы. Уларҙың кеше алдында яҡшы сығыш яһауы оратор булыуы ла фарыз. Мәҙрәсәнән һуң улар донъяуи ғилем биреүсе юғары уҡыу йортона барырға, физика, математика, тарих, философия, психология, биология фәндәре буйынса аспирантурала уҡырға тейештәр. Диниә назараты уларға стипендия түләргә лә тейеш. Хәҙерге заман имамдар алдына ана шундай бурыстар ҡуя. Тик ошо шарттар үтәлгән шартта ғына дин Рәсәй илебеҙҙе, телебеҙҙе, еребеҙҙе, республикабыҙҙы һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итеүсе көскә әүерелә ала.

**Тағы бер һорау: дини кеше, әлбиттә, тәүге урында - Аллаһыға һөйөү, тип йөшәй. Ләкин был телһөйәрлекте, илһөйәрлекте кире ҡағыу, тигәнде аңлатмайҙыр...**

- Чечняла дөрөҫ дини һәм ғаилә тәрбиәһе алған егеттәр үҙҙәренең республикаһы, милләте хаҡында ғорурланып сығыш яһай. Татарстанда татар егеттәре "Беҙнең Татарстаныбыҙ, халҡыбыҙ, динебеҙ", тип һөйләй. Уларҙың Ҡол Шәриф мәсете, мәҙрәсәләре ғөрләп эшләп тора. Башҡортостанға ҡайтып: "Мин башҡорт", - тип әйтеүең була, милләтсегә әйләнәһең дә ҡуяһың. Нишләп улай һуң? Ни өсөн Аллаһы Тәғәлә мине башҡорт итеп яралтып, мин үҙ республикамда үҙемде башҡорт итеп тойоп йәшәүем менән милләтсе булып һаналам? Мин Рәсәй илемде лә яратам, ул нығынын, көслө дәүләт булһын, тип, көнө-төнө доға ҡылам. Шул уҡ ваҡытта мин үҙемдең республикамды ла, милләтемде, тамырҙарымды, ҡурай моңон яратам. Шулай булыуым башҡалар тарафынан милләтселек тип һанала икән, милләтсе тип һаналайым атыу. Тыуған илен, ата-әсәһен, халҡын яратҡан кеше милләтсе икән, милләтсе булырға ла ризамын. Был һүҙҙәремде мин бөтөн кешеләр алдында, һәр ранғтағы власть алдында әйтә алам. Былар минең Аллаһы Тәғәләгә тәрән инаныуымдан, иманымдан килгән хистәр. Кемдең йөрәгендә ошондай хистәр бар, улар тоғро юлда.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Илем, телем, ерем тип йәшәгән кеше үҙенең нәфсеһен генә ҡайғыртмай. Психологтар фекеренсә, шәхес үҫеше - ул нәфсе үҫеше һәм был үҫештең тәүге баҫҡысында кеше үҙе өсөн ҡайғырта башлай, икенсе баҫҡыста ул ғаиләһен, өсөнсө баҫҡыста туғандарын, дүртенселә ырыуын, халҡын, милләтен, бишенсе баҫҡыста республикаһын, илен ҡайғыртып йәшәй башлай. Нәфсе үҫешенең иң юғары баҫҡысында Бәйғәмбәребеҙ ҙә өммәтен, йәғни барлыҡ мосолмандарҙы ҡайғыртып йәшәү дәрәжәһенә өлгәшкән. Айнур Арыҫланов та ошо юлда.**

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ
әңгәмә ҡорҙо.

*ӘЙ, БЫЛ ӘҘӘМ...*

**"Эй, ҡаты күңелле кеше булып сыҡты. Йылы һүҙ ишетеү түгел, һуңғы осорҙа йылмайып ҡарағанын да күргәнем юҡ. Турһайып ала ла, эркет уртлаған һымаҡ йөҙөн сирып тик йөрөй... Бер көн ауырыуға һалышып яттым, яныма килеп берәй йомшаҡ һүҙ әйтмәҫме, йәнәһе. Эргәмә килеп тә ураманы, нишана. Шул тиклем эрелек, һерелек йәш кешелә ҡайҙан килә-ләр. Ҡоҙағыйҙы әйтәм, ҡыҙын тормошҡа ла, ҡәйнәһенә ярай белергә лә өйрәтмәгән..." - тип, тик торғандан киленен яманланы ла китте танышым.**

# ҠАТЫ КҮҢЕЛ



Таныш тигәс тә, бер-беребеҙҙе яҡындан түгел, исемләп тә белмәйбеҙ. Бөтә танышлығыбыҙ автобус туҡталышында күрешеү менән сикләнә. Ғөмүмән, ҡатын туҡталыштағы бөтә кешегә лә күптәнге танышы кеүек хәбәрен һөйләй ҙә бөтә. Яҙ көнө ошонда автобус көткәндә мин дә уның берҙән-бер улы кәләш алыуы, күптән түгел туй яһағандары тураһында белгәйнем.

- Ай тормай атың маҡтама, йыл тормай килеңең маҡтама, тиҙәр халыҡта. Улың өйләнеүгә ярты йыл да юҡ түгелме? Боронғолар, йыл тормай килен маҡтама, тигәс, яманларға ла иртәрәк түгелме икән? - тим.

- Киленде лә, атай-әсәһен дә күптән беләм бит мин. Туй булғансы уҡ йәштәр бер-береһенә барып йөрөнө, киленебеҙ һуңғы осор бөтөнләй беҙҙә йәшәне. Улым атаһының: "Үҙең ятаҡанға түгел, һине ятаҡанға өйлән", - тигән һүҙен тотто, шикелле. Һайлап алырлыҡ ҡыҙҙар була тороп, ошо артынан бер тотам ҡалмай йөрөгән ҡыҙға өйләнде лә ҡуйҙы. Яратҡас, күҙеңә генә ҡарап тора, нимә теләгәнеңде әйтергә лә кәрәкмәй, хаталарыңа ла күҙ йома, ғәфү итә, йәнәһе. Хәҙер, ана, кәләше үҙен орсоҡ урынына зырылдата, - ҡатын тынyслана алмай, асыуы йөҙөнә сыҡҡан, хатта ауыҙынан төкөрөктәре сәселеп киткәндәй. - Бер көн эштән ҡайтһам, бисәһенең алъяпҡысын бәйләп алған да, һауыт-һаба йыуып йөрөй, тегенеһе күренмәгәс, ул булмағанда улыма бер аҙ аҡыл өйрәтеп алайым әле, тип, уның ым-ишараһын да абайламай, һүҙ һөйләй башлағайным, икенсе алъяпҡыс кейгән килен залдан килеп сыҡты. Үҙе тураһында насар һүҙҙәрҙе ишетһә лә, ләм-мим, ауыҙ асып һүҙ өндәшмәй, уның ҡарауы, улым, асҡан ауыҙын да ябырға онотоп, тын алырға ла ҡурҡып ҡалды.

Хәҙер килен ишекте шарт ябып сығып китерме икән, тип, мин дә шөр ебәргәйнем, әммә ул бер нәмә ишетмәгәндәй, үҙ эшен дауам итте.

Уның миңә ҡарата шулай һалҡынлығы, дөрөҫөрәге, өндәшмәй ҡалыуы зитыма тейҙе. Мине ахмаҡ итеп күрә инде. Быға тиклем ныҡ бәрелгәнем юҡ ине, был юлы түҙмәнем, уның тураһында нимә уйлайым, бөтәһен дә әйтеп һалдым да, сыҡтым да киттем. Хәҙер бына нисек өйгә инергә белмәй, аптырап йөрөйөм. Улым, ниңә ҡыҫылаһың, тип ябырылырмы, әллә килен яу күтәрерме? Күңелемә шул тиклем ҡыйын булғаны юҡ ине әле. Мин үҙем бик йомшаҡ күңелле бит, йөрәгемә яҡын алам. Ә бына килендең ҡатылығы, ҡанһыҙлығы мине шулай уҫал, әҙәпһеҙ булырға мәжбүр итә. Мин дә бит кеше балаһы, миңә лә иғтибар кәрәк...

Яҡты йөҙ күргең килһә, үҙеңә яҡшы булырға кәрәк. Тик был хаҡта ҡатынға әйтеүҙең кәрәге юҡ. Үҙенең зәһәрлегенән үҙе сәсәргә торған кеше алдында һүҙең көмөш булһа, өндәшмәгәнең - алтын. Был хаҡта йәш килен дә белеп, ҡәйнәһе янында өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрәләр. Шулай булһа, бик аҡыллы килен булып сыға түгелме? Уның хаҡында мин, әлбиттә, бер нәмә лә белмәйем, күргәнем дә юҡ. Әммә яңы ғына килен булып төшкән ҡыҙ балаға бер ҙә һүҙ тейҙергем килмәй, сөнки мин дә күптән түгел генә ҡыҙымды кейәүгә биргән әсәймен...

...Ә ҡаты күңеллелеккә килгәндә, был ҡатындың туң йөрәкле, бәғерһеҙ кеше икәнен сырамытҡайным инде.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ*



# ХӨРӘФӘТИ ХИКӘЙӘЛӘР,

## йәки йәнәшәбеҙҙә кемдәр йәшәй?

### Һыу инәһе

Һунарсының һөйләүҙәренә ҡарағанда, йәй көнө ауланған ҡиммәтле йәнлек тиреләренең сифаты булмай, тире ҡабул итеүселәр быны яҡшы белә. Йәй көндәрендә һунарсы үҙ ваҡытын ҡош-ҡорт аулап үткәрә.

Элекке заманда ауланған ҡоштарҙы һатып, байтаҡ табыш алыу мөмкин булған. Йылға буйҙары, урман эстәре ҡоштарға бай булған. Шулай бер көндө Иҙел буйында ҡыр өйрәктәре аулап, һунарсы бик һуңға ҡала. Бәхетенә күрә, төн яҡты, айлы була. Иҙел буйы әрәмәлектәренән сығып, ул йылға туғайы буйындағы юл менән бара башлай. Күпмелер бара торғас, артынан кемдеңдер эйәреп килгәнен һиҙеп ҡала:

- Һин кем, кил минең яныма, - тигән өндәшеүгә лә яуапһыҙ ҡала. Һунарсы ҡурҡыуға төшә. Шәп-шәп атлап, юлын дауам итә. Бер аҙ ошолай барғандан һуң, артына әйләнеп ҡарай - теге кешене тағы ла күрә. Һунарсы туҡтай ҙа ҡысҡыра:

- Минең янға килмәһәң, һинең яныңа үҙем барам, - ти ҙә уға яҡынлаша башлай, ә теге уның һайын артҡа сигенә. Был юлы инде ул уның кеше затынан түгел икәненә тамам ышана ла уны йәтешләп ҡарай башлай. Нисек ул быны элегерәк күрмәгән: эйәрткән кеше әсәнән тыума шәрә, бик оҙон, һары төҫтәге сәстәре теҙҙәренә үк төшөп тора. Ай яҡтыһында ялтырап күренеп торған ҡабарынҡы түштәре был йән эйәһенең ҡатын-ҡыҙ енесенән икәнен аңғарта. Ошоларҙы күреп, һунарсы уның һыу инәһе икәненә төшөнә. Был заттың кешеләрҙе төрлө мажараларға дусар итә алыуын, хатта алдаштырып, һыу аҫтына алып китеүен дә ишеткәне була. Ләкин һыу инәһе уның янына яҡын килергә баҙнат итмәй, быға һунарсының доғалар белеүе сәбәп була. Һунарсы доғаларын уҡып, ян-яғына төкөрөнә, юл ситенән ағас ботағы һындырып алып, әлхәм уҡып, төкөрөп, юлға арҡыры һала ла атлауын дауам итә. Етеҙ атлап бер аҙ барғас, артына әйләнеп ҡарай, ләкин һыу инәһе инде күренмәй. Әлхәм уҡып төкөрөп, юлға арҡыры һалынған сыбыҡтың тылсымлы көсө һыу инәһенең юлын бүлә, артабан ебәрмәй.

Һунарсы үҫмер сағында мулланан әрләнә-туҡмала ошо доғаларҙы уҡып ятламаһа, ошоноң кеүек ҡурҡынысл ы осраҡтарҙа ул ни эшләр ине? Бәлки, һыу инәһе уны төрлө бәләләргә юлыҡтырыр, бәлки, алдаштырып һыу төбөнә алып китер, әжәлен дә шунда табыр ине...

**Рауил АСИҒОЛОВ.**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

### Ҡайҙа булырға теләйһегеҙ - шундаһығыҙ

Был һеҙгә оҡшаймы, юҡмы, әммә әлеге ваҡытта ҡайҙа булырға теләйһегеҙ - шундаһығыҙ. Бәлки, бәхетһеҙһегеҙҙер, бәлки, яратмаған эшкә йөрөргә тура киләлер. Бәлки, никахығыҙ тарҡалыу алдында торалыр, мөхәббәтегеҙ һүрелгәндер, туғандарығыҙ менән мөнсәбәттәрегеҙ ҡатмарлылыр. Киләсәгегеҙ шикле, әммә бары тик үҙегеҙ генә аңлы йәки аңһыҙ рәүештә тап ошондай хәлдә ҡалырға рөхсәт иткәнһегеҙ. Барлыҡ дәлилдәр ҙа һеҙҙең үҙгәрештәр өсөн кәрәкле хаҡты түләү урынына әлеге хәл-торошта булыуҙы хуп күреүегеҙгә ишара. Ғәҙәттәге яуаптар шулай яңғырай: "Һеҙ аңламайһығыҙ", "Минең хәл-торош башҡасараҡ", "Мин был хәл-торошҡа баттым", "Тормошомдо үҙгәртергә теләйем, әммә булдыра алмайым, сөнки..." Бәлки, яуаптарығыҙҙы ысын күңелдән әйтәһегеҙҙер, әммә килеп тыуған шарттарға фекерләүегеҙҙе сикләргә рөхсәт иткәнһегеҙ. Кешегә, хәл-торошҡа, шарттарға үҙ бәхетегеҙгә йоғонто яһарға рөхсәт итеп, һеҙ тышҡы көстәргә тормошоғоҙҙо контролдә тоторға мөмкинлек бирәһегеҙ. Ғәмәлдә, килеп тыуған хәл-торош һеҙҙең уны үҙгәртергә һәләтле эске көсөгөҙҙән көслөрәк икәнен раҫлайһығыҙ. Төпкө аң кире раҫлауҙы ҡабул иткән, эҙемтә булараҡ, һеҙ һораған нәмәнең барыһын да бирен тора.

### Тормошҡа ғәмәлдәр аша ҡарағыҙ

Тормошҡа ҡурҡып, баҙнатһыҙ ҡарау инерция тыуҙыра, уңышһыҙлыҡҡа һәм күңел ҡайтыуға килтерә. Күптәр әүҙем ғәмәлдәр башлауҙан баш тарта, сөнки хаталаныуҙан ҡурҡа йәиһә хыялдарының тормошҡа ашырына ышанмай. Бөйөк асыштар һәм ҡаҙаныштар авторҙарының: "Минең идеямдың бер генә мөмкинлеге лә юҡ!" - тип ҡулын һелтәп ҡуйыуы һөҙөмтәһендә билдәлелек яуламай ҡала. Был - ҙур фажиғә, сөнки донъя һәр кемебеҙ тәҡдим итә алған нәмәләргә мохтажлыҡ кисерә. 1880 йылда АҠШ-тың Патент ведомствоһы хеҙмәткәре эштән китеү тураһында ғариза яҙа. "Кеше уйлап таба алған бөтөн нәмә уйлап табылған, - ти ул. - үҙ эшемдең мәғәнәһен күрмәйем". Был кешегә оҡшамағыҙ! Хыялын ысынбарлыҡҡа әйләндерергә ҡурҡмағандарҙы ғына киләсәктә иҫ киткес мөмкинлектәр көтә.

### Уңыш ҡыйыуҙарҙы ярата

Бер ваҡытта ла ошо психологик хәҡиҡәт тураһында онотмағыҙ: уңыш ҡыйыуҙарҙы ярата. Аңығыҙҙа үҙегеҙ йәшәргә теләгән донъяға, идара итергә теләгән хәл-торошҡа, яуларға теләгән бөйөклөккә башланғыс һалығыҙ. Сикһеҙ ҡеүәт тураһындағы идеяны бары тик әле үк актив ғәмәлдәр ҡыла башлап ҡына тормошҡа ашырырға мөмкин. Буш хыялдар теләктәрҙең тормошҡа ашыуына булышлыҡ итмәй. Тарих һабағын онотмағыҙ: "Кем шикләнә - шул еңелә". Ошо урында хәтер төпкөлөн байҡаһағыҙ, тормошоғоҙҙа тиҫтәләрсә осраҡта бары тик шикләнгән өсөн генә еңелгәнегеҙҙе иҫләрһегеҙ. Әгәр ҡыйыу ғәмәлдәр эшләргә өйрәнһәгеҙ, башҡаса бер ваҡытта ла еңелмәҫһегеҙ. Әгәр азат булырға һәм үҙ-үҙегеҙгә ныҡлы ышаныс булдырырға теләһәгеҙ, уйҙарығыҙ сикләүҙәрегеҙҙе контролдә тоторға тейеш, киреһенсә түгел.

**Роберт Энтони.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Сочи хоккей командаһы менән уйындан һуң клуб етәкселегенең юлаевсылар-ҙың саңын "ҡаҡҡылап" алыуына аптырарға түгел. Һөҙөмтә - Братиславаның "Слован"ы юлаевсыларҙан 6 шайба "йотоп" ҡайтып китергә мәжбүр булды.*



*ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА*



# ӘРЕМ

**Әрем эрен барлыҡҡа килтерә торған бөтә инфекцияларҙы юҡҡа сығара, йоҡоһоҙлоҡто, нервы ауырыуҙарын дауалай, матдәләр алмашыныуын яйға һала, һимереү менән яфаланыусыларға ла ярҙам итә.**

Был үлән ауырыуҙарҙы тиҙ арала аяҡҡа баҫтырырға ярҙам итә. Әрем терапияһы бөтә шешеү процесын йүнәлтә, бигерәк тә аш һеңдереү юлы һәм енес ағзалары зарарланғанда файҙалы. Әремде гинекологик ауырыуҙар, простатит, бәүел юлының ауырыуы, тире, ашҡаҙан, эсәк, бауыр, ашҡаҙан аҫты биҙе, бөйөр ауырыуҙары менән яфаланғанда ҡулланалар. Шулай уҡ ул эт һәм бесәй тотҡан кешеләргә лә кәрәкле.

Әрем ярҙамында дауаланыу курсы үтеү өсөн 100 грамм киптерелгән үлән етә. Алдан әҙерләп, киптерелгән әремде ҡул менән ыуалап, тишек сүмес аша үткәрергә. Шунан тишек сүмес аша үткәнен ҡоро көйөнсә ҡабырға, үтмәй ҡалған өлөшөнән клизма өсөн төнәтмә эшләүгә, яраны һиптереп йыуҙырыу, күҙгә, ҡолаҡҡа тамыҙыу йәки ауыҙ сайҡатыуға ҡулланырға.

Әрем бөтә ашҡаҙан-эсәк юлын тулыһынса үтеп сығып, сирҙәрен дауалаһын өсөн уны ҡоро көйөнсә ҡулланырға тәҡдим ителә. Сөнки әрем төнәтмәләре эсәккә тиклем барып етмәй. Был үләнде бер ай ҡулланғандан һуң миома юҡҡа сыға, ул бер күҙәнәкле организмдарҙан таҙарта. Әсе әрем менән ете көн дауаланалар. Тәүге өс көндә 2-2,5 сәғәт һайын бер семтем кипкән әремде ауыҙға һалып, төкөрөк менән сылатып йоторға һәм һыу эсергә. Был өс көндә 5-6 тапҡыр ашайһың, төндә ял итәһең. Был рәүешле дауаланғанда бөтә организм таҙара һәм ете көн дауамында ҡаты диета тотоу талап ителә. Ит һәм балыҡ аштары, һөт продукттары, йомортҡа, кондитер изделиелары ашамай торорға кәрәк. Бигерәк тә спиртлы эсемлектәр һәм тәмәке ҡулланмаҫҡа тәҡдим ителә. Уның ҡарауы, йәшелсә, емеш-еләк, сәтләүектәр, ярма бутҡалары, үҫемлек майы, картуф ашарға ярай. Икмәкте бер аҙ киптереп, көнөнә ике-өс бәләкәс телем генә ашарға була.

Әрем менән дауаланған осорҙа быға тиклем һиҙелмәгән төрлө ауырыуҙар ҡалҡып сығыуы бар. Бер аҙ быуындар һыҙларға, ҡабырға сәнсергә мөмкин, был организм тулыһынса таҙарыныуын аңлата. Әгәр ҙә ҙур таштар урынынан шылһа, ҡаты ауыртыу тойһағыҙ, тамырҙарҙы киңәйтеүсе дарыу эсергә була (2 төймә "Но-шпа" йәки 1 төймә "Папаверин").

Бәүел-енес юлдары ауырыуҙарын дауалағанда көнөнә ике тапҡыр - иртәле-кисле сирле урындарҙы әрем төнәтмәһе һиптереп йыуҙырырға кәрәк. Һуңынан йыл һайын яҙлы-көҙлө профилактика үтеп тороу мөһим. Йөклө ҡатындарға һәм аҙ ҡанлылыҡ менән яфаланыусыларға әрем менән дауаланыу ҡәтғи рәүештә тыйыла.

*ҠЫҘЫҠ ТАҺА!*

## СЕЙ РИЗЫҠ АШАҺАҢ...



**Әгәр кеше 44 көн бешкән аҙыҡ ашамаһа, иммунитет көс йыя һәм эске системаны көрәшкә әҙерләй.**

- 62, 71-се көндәрҙән һуң иммунитет ҡеүәте шул тиклем көсәйә, хатта ул иң ҡаты ауырыуҙы ла еңергә һәләтле.
- 80 көн сей емеш-еләк, йәшелсә менән генә туҡланыу организмды сирҙәрҙән арыныу мөмкинлеге менән тәьмин итә. Был ваҡытта иммунитет ауырыуҙы, шеште ҡыуып сығара, уны тәндән айыра.
- 80 көндән 107 көнгә тиклем бешкән аҙыҡ ашамағанда иммунитет мейе менән берләшеп, патология юҡмы, ҡабат терелмәгәнме, сир тыуҙырыусы мөхит барлыҡҡа килмәгәнме икәнлеген тикшерә.
- 116 көн сей ризыҡ ашағанда тамырҙарҙың диаметры һайлана (махсус күнекмәләр ярҙамында уларҙа баҫым барлыҡҡа килтерелә, организм тамырҙарға тура килгән диаметр тапҡанмы, улар ныҡлымы икәнлеге тикшерелә), үт ҡуйылығы, ҡанға гормондар сығыуы күҙәтелә.

**Әгәр ошо системала 125 көн тора алһағыҙ, организмығыҙ шул тиклем яңырасаҡ, һәм тормошоғоҙ уңыш, сәләмәтлек, ҡыуаныс толпарҙарында алға еләсәк!**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Сентябрь - Октябрь (Зөлхизә - Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 (24) дүшәмбе | 5:41 | 7:11 | 13:30 | 17:32 | 19:02 | 20:32 |
| 27 (25) шишәмбе | 5:43 | 7:13 | 13:30 | 17:30 | 19:00 | 20:30 |
| 28 (26) шаршамбы | 5:45 | 7:15 | 13:30 | 17:27 | 18:57 | 20:27 |
| 29 (27) кесе йома | 5:47 | 7:17 | 13:30 | 17:24 | 18:54 | 20:24 |
| 30 (28) йома | 5:48 | 7:18 | 13:30 | 17:22 | 18:52 | 20:22 |
| 1 (29) шәмбе | 5:50 | 7:20 | 13:30 | 17:19 | 18:49 | 20:19 |
| 2 (1) йәкшәмбе | 5:52 | 7:22 | 13:30 | 17:17 | 18:47 | 20:17 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИҒЛАН*

Студенческий билет № с-1918, выданный Уфимским колледжом статистики, информатики и вычислительной техники на имя Свидерского Владислава, считать недействительным в связи с утерей.

*ХОККЕЙ*

САЛАУАТ ЮЛАЕВ хоккейный клуб

## ТЕЛӘК БУЛҺА...
### еңеүҙәр ҙә көттөрмәй

**Был аҙнала "Салауат Юлаев" хоккей командаһы көйәрмәндәрен көйҙөрҙө лә, һөйөндөрҙө лә. Ғөмүмән алғанда, әлегә сентябрь юлаевсылар өсөн һөҙөмтәле түгел. Был айҙағы һигеҙ осрашыуҙың тик икәүһендә генә Өфө командаһы еңеүгә өлгәште. Ағымдағы аҙнала ла юлаевсылар хоккей яратыусыларҙың нервы ҡылдарын арыу ғына тартты.**

"Өфө-Арена"ға "Салауат Юлаев"тың Сочи хоккей командаһы менән уйынын ҡарарға йыйылған алты меңдән ашыу кешенең өмөтөн "Йәшел машина" аҡламаны. Тәүге мәрәйҙе үҙ иҫәбенә яҙһа ла, уйын барышында юлаевсылар ҡунаҡтар ҡапҡаһына башҡаса юл тапманы. Уның ҡарауы, Сочи хоккейсылары хужаларға өс шайба "бүләк" итте. Уйын иҫәбе ҡунаҡтар файҙаһына - 1:3.

Әлбиттә, иң көслө командалар иҫәбендә булған "Салауат Юлаев"тан бындай уйын көтмәйҙәр. Көйәрмәндәр ҙә, клуб етәкселеге лә. Шуға күрә, Сочи хоккей командаһы менән уйындан һуң клуб етәкселегенең юлаевсыларҙың саңын "ҡаҡҡылап" алыуына аптырарға түгел. Һөҙөмтә - Братиславаның "Слован"ы юлаевсыларҙан 6 шайба "йотоп" ҡайтып китергә мәжбүр булды. Еңеүгә айырыуса Линус Умарк ҙур өлөш индерҙе - ул ике шайба хужаһы. Шулай уҡ юлаевсылар Андреас Энгквист, Игорь Макаров, Александр Логинов һәм Артем Чернов та үҙ иҫәптәренә берәр мәрәй яҙҙы. "Слован" тик 3 шайба менән генә яуап бирә алды. Шулай итеп, матч 6:3 иҫәбе менән Игорь Захаркин командаһы файҙаһына тамамланды. Афарин, егеттәр! Теләк булһа, еңеүҙәргә өлгәшеп була икәнлеген тағы ла бер иҫбатланығыҙ.

Киләһе уйынды юлаевсылар Хорватияның "Медвешчак" командаһы менән уҙғарасаҡ. Әйткәндәй, ял көнө булыуын иҫәпкә алып, уйын 16.30 сәғәттә башлана. Уңыштар юлдаш булһын яратҡан командабыҙға.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Учалы районының Ҡәйепҡол ауылынан ҡәҙерлеләрҙән-ҡәҙерле әсәйебеҙ, һөйөклө өләсәйебеҙ

**Рәшиҙә Абдрәхим ҡыҙы МӘҒӘСҮМОВАны**

**75 йәшлек оло юбилейы** менән ысын күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ.

Әсәй! Һинең менән тормошобоҙ бөтөн, аҙымдарыбыҙ ышаныслы. Тормош һынауҙарына бирешмәйсә, ауырлыҡтар алдында баш эймәйенсә, йәм табып, изгелектәреңдең игелеген күреп, балаларыңдың күңел йылыһын тойоп, бәхет-шатлыҡта, мул тормошта, иҫәнлектә-һаулыҡта ғүмер кисерергә насип итһен!

Балаларыңдың һәм ейән-ейәнсәрҙәреңдең яҡты киләсәген күреп, уларҙың һөйөнөстәренә ҡыуанып, донъя рәхәтлектәре кисереп, яҡындарыңа йәшәйеш сығанағы булып, күңел нуры менән килер көндәребеҙҙе яҡтыртып йәшә!

**Иң изге теләктәр менән балаларың һәм ейән-ейәнсәрҙәрең.**

* * *

Сентябрь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Күгәрсен районы** Мораҡ ауылынан Лариса Килмәтова, Мәҡсүт ауылынан Таңһылыу Хәмиҙуллина, **Мәләүез ҡалаһынан** Рауза Хазиева, **Ғафури районы** Красноусол ауылынан Рәмзиә Монасипова, Юлыҡ ауылынан Нурсилә Ҡасҡынова, **Өфө ҡалаһынан** Миңлеямал Йәнбулатова, Сәлиә Ишбулатова, **Шишмә районы** Новотроицкое ауылынан Гөлйыһан Фазлыева, **Учалы районы** Оҙонгүл ауылынан Жәүәт Миһранов, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Һәҙиә Әбдрәшитова, **Сибай ҡалаһынан** Фәрит Әхмәров, **Әбйәлил районы** Буранғол ауылынан Мөнирә Хашимова, **Бөрйән районы** Иҫке Собханғол ауылынан Рәмилә Юлсурина, **Көйөргәҙе районы** Ялсыҡай ауылынан Финсур Хәмитов, **Белорет районы** Железнодорожный поселогынан Ирина Әбсәләмова, Рысыҡай ауылынан Нурия Бадалова, **Ейәнсура районы** Хоҙайбәндә ауылынан Люциә Кинйәбулатова, **Әлшәй районы** Иҙрис ауылынан Урал Ғабдрафиҡов һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ! Гәзитебеҙҙең тоғро дуҫтарына сәләмәтлек, бәрәкәтле оҙон ғүмер теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 сентябрь** 97-се ижад миҙгелен асыу **"Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим)

**29 сентябрь "Йософ һәм Зөләйха"** (Ҡол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт

**30 сентябрь "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**27 сентябрь "Театр төнө"** акцияһы - Әҙәби-поэтик видео-флешмоб; **"Приключение" с огнем"** (Н. Шор), әкиәт, башлана 15.00. **"Гонаһлы хыялдарым..."** (Ф. Ғәлимов), комедия, башлана 19.00

**28 сентябрь XXVI концерт миҙгелен асыу.** "Киношлягер" Рәсәй киноһы йылына бағышланған концертта филармония солистары, рус халыҡ уйын ҡоралдары оркестры ҡатнаша

**29 сентябрь** XXVI театр миҙгелен асыу **"Ғәлиәбаныу"** (М. Фәйзи), музыкаль драма

**30 сентябрь "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Киске Өфө" гәзитенең "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө менән берлектә иғлан иткән "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылған уҡыусыларыбыҙҙың тәҡдимдәрен һәр һанда күрһәтә киләбеҙ. Бөтәһе лә уҡырға тейешле китаптар исемлеге яйлап үҫә бара. Әлегә ул бына ниндәй:**

**1. "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосы**
**2. М. Аҡмулланың шиғырҙар йыйынтығы**
**3. Ҡол Ғәли "Йософ ҡиссаһы"**
**4. Ризаитдин Фәхретдин "Нәсихәттәр"**
**5. Ғайса Хөсәйенов "Тормош" һәм "Донъя" парсалар китаптары**
**6. Шәйехзада Бабич, "Ғазазил" поэмаһы, шиғырҙар**
**7. Зәйнәб Биишева "Кәмһетелгәндәр" трилогияһы**
**8. Һәҙиә Дәүләтшина "Айбикә" повесы**
**9. Әхмәтзәки Вәлиди "Хәтирәләр"**
**10. Һәҙиә Дәүләтшина "Ырғыҙ" романы**
**11. Мостай Кәрим, "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесы һәм поэзияһы**
**12. М. Ғафури "Фәҡирлектә үткән тереклек" хикәйәһе**
**13. М. Ғафури "Шағирҙың алтын приискыһында" повесы**
**14. Ғ. Хәйри "Боролош" романы**
**15. Әхиәр Хәкимов "Өйөрмә" романы**

**Сибай ҡалһы Тыуған яҡты өйрәнеү модель китапханаһы мөдире Рәйсә Ҡунаева Ноғман Мусиндың "Мәңгелек урман" дилогияһын тәҡдим итте:**

- "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһын иғлан иткәндә үк мөхәрририәт, әгәр ҙә сит ил милләт кешеһенә башҡорт халҡы, тарихыбыҙ, рухи ҡомартҡыларыбыҙ, әҙәбиәтебеҙ тураһында һөйләргә тура килһә, яуап бирә алырһығыҙмы, тигән фекер яҙып сыҡҡайны. Ысынлап та, сит милләт кешеләре менән хәҙер, бигерәк тә йәштәргә, тығыҙ аралашырға бар мөмкинлектәр асыҡ, сит илдә йәшәгән яҡташтарыбыҙ ҙа байтаҡ. Уларға башҡорт әҙәбиәтенең иң аҫыл әҫәрҙәрен белеү генә түгел, ошо әҫәрҙәрҙе ижад итеүселәр хаҡында ла мәғлүмәтле булыу мөһим. Әле тулылана килгән исемлеккә "Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы" тигән маҡтаулы исем алыусы өс шәхесебеҙҙең әҫәре, ике Башҡортостандың халыҡ шағиры индерелгән. Бик күп әһәмиәтле, йөкмәткеле, камил башҡортса әҫәрҙәр араһынан бары һанаулы ғына автор үҙ ижады өсөн ваҡытында халыҡ тарафынан шундай юғары баһаланған һәм уларҙың әҫәрҙәре бөгөн дә ошо исемлектең башында тора икән, тимәк, артабан да шундай күренеклеләрҙең әҫәрҙәренә тәү сиратта иғтибар бүленергә тейеш. Ошо фекеремде дауам итеп, үҙ сиратымда, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы исемен 2001 йылда алған Ноғман Мусиндың иң билдәле романдарының береһен - "Мәңгелек урман" дилогияһын уҡырға тәҡдим итәм. Был китапты һәр быуын кешеһе ентекләп, аңлап уҡырға тейеш. Сөнки "Мәңгелек урман" башҡорттоң тәбиғәт менән бер бөтөн булып яралыуын, быуындар бәйләнешен сағылдырған әҫәр. Иң мөһиме, ҙур тиҙлек менән барған үҙгәрештәр заманында йәшәгән йәштәр был романды ашыҡмай ғына өйрәнһен, юғиһә, тәбиғәтте һүрәтләүҙәр аша бирелгән бик күп мәғәнәләр уларҙың иғтибарынан ситтә ятып ҡалыр, һүҙ ҡөҙрәтен тоймаҫтар. Башҡорт халҡының тарихи үткәне, боронғо йәшәү рәүеше, башҡорт кешеһенең холҡо, асылы, күп нәмәгә ҡарата мөнәсәбәте - барыһы ла ошо китаптарҙа сағылыш тапҡан. "Мәңгелек урман" дилогияһында әҙип үткәндәр менән бөгөнгөбөҙ һәр ваҡыт үҙ-ара бәйле булыуын күрһәтә, ошоно белгән халыҡтың киләсәге лә бар.

Хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ! "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына һеҙ ҙә ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-иңдәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

Иҫкәрмә: аңлағанһығыҙҙыр, был исемлек башында барыбер ҙә әҙәбиәтебеҙҙең классиктарының, аҡһаҡалдарының әҫәрҙәре урын алырға тейеш. Мәктәптә уҡыған ул әҫәрҙәр барыбер ҙә күңелегеҙҙә һаҡланалыр - шуларҙы барлайыҡ тәүҙә, ә бөгөнгө быуын яҙыусыларының әҫәрҙәре тураһында саҡ ҡына һуңыраҡ, исемлек аҙағына етә башлағас һөйләшербеҙ.

ВИКТОРИНА



# ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР

**Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ" әҙәби-публицистик әҫәре буйынса һорауҙар тәҡдим итәбеҙ. Был юлы яуаптарҙың варианттарын бирмәйбеҙ, гәзит уҡыусыларҙы был мәңгелек фәлсәфәүи төшөнсәләр тураһында уйланырға, үҙ фекерҙәрен шылтыратып әйтергә йә яҙып ебәрергә саҡырабыҙ.**

1. "Арғымаҡ" китабында далан менән бәхет төшөнсәләренең айырмаһы нисек күрһәтелгән?
2. Һәр беребеҙгә арғымаҡлы булырға кәрәк, тигән автор. Арғымаҡлы, тимәк...
3. Нимә ул йәшәү ҡото?
4. Тыуған тел менән моң бер-береһе менән нисек бәйле?

**Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап табып, иң беренсе булып беҙгә шылтыратып, яуаптарын әйтә, шуға Мәрйәм Бураҡаева үҙенең автографы ҡуйылған "Арғымаҡ" китабын бүләк итә. Лира Яҡшыбаеваның "Мөжәүир хәҙрәт" повесын Илеш районы Үрге Йәркәй ауылынан Көнһылыу Насыртдинова, Наил Ғәйетбайҙың "Сит планета ҡыҙы" романын Вадим Йәһүҙин отто.**

**Иҙел РӘХИМОВ.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ҺЕРКӘҺЕ...

## һыу күтәрмәй

**Эт тылҡаһын сығарып** - туҙҙырған, болартҡан.

**Ҡаҡлыҡҡан** - ҡапыл сығып киткән.

**Арттары шөштойған** - һиҙмәгәндәр ҙә.

**Бынамса ништәгән** - быға тиклем ни эшләгән.

**Бикташ икән** - ныҡ икән, ауыҙ ҙа асмаған.

**Төпһән** - таптә, төпкөлдә, ситтәрәк.

**Ин таҡтаға ҡалған** - үтә ябыҡҡан, кипкән, бөршәйгән.

**Яғы әйҙәнгән** - туҡтамай баҡыра.

**Билән** - тауҙың билеп киҫеп аша сыҡҡан юл.

**Уҡаһы ҡойолмаһын** - һүҙ күтәрмәй, үсегә.

**Һеркәһе һыу күтәрмәй** - үпкәсел, шаяртҡанды аңламай.

**Әнүәрә МОНАСИПОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИҪӘР ЙҮКӘ ҺУЙЫР...

## аҡыллы тәкә һуйыр

Дуҫ итеп серең һөйләмә, танда дошман булмаһын, дошман тип хәтерен ҡалдырма, танда дуҫың булмаһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бер аҙым эшләү өсөн егерме йыл икеләнергә мөмкин, әммә ул аҙымды эшләгәнһең икән, сигенергә ярамай.

**(Альфред де Мюссе).**

Үҙ уйҙарығыҙға ҡарата иғтибарлы булығыҙ, улар һәр ҡылыҡтың башы.

**(Лао-цзы).**

Доғалар яуапһыҙ булырға тейеш, шунһыҙ, ул доға булыуҙан туҡтар һәм ҡара-ҡаршы әйтешкә әүерелер ине.

**(Оскар Уайльд).**

Йәшәү мәғәнәһе - ул барлыҡ теләктәреңде ҡандырыу түгел, ә теләктәреңдең булыуы.

**(Михаил Зощенко).**

Кеше үҙенең ҡайғыларын һанарға ярата, ә бына шатлыҡтарын һынамай.

**(Федор Достоевский).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер саҡ Һиндостан батшаһына бик үҙенсәлекле бүләк бирәләр: өс алтын һын һәм барыһы ла бер төрлө. Был бүләккә, һындарҙың һәр береһенең үҙ тәғәйенләнеше бар һәм уларҙың береһе генә үтә ҡиммәтле баһаға эйә, тип яҙылған хат та беркетелгән була. Батша үҙенең барлыҡ кәңәшселәрен һәм аҡыл эйәләрен саҡырып ала һәм был бүләк-һындарҙағы айырманы табырға бойора. Аҡыл эйәләре бик оҙаҡ баш вата, һындарҙы төрлөсә тикшерә: уларҙың ауырлығын да, алтынының сифатын да, эшләнешен дә тикшереп ҡарай, әммә береһе лә улар араһындағы айырманы таба алмай. Шул саҡ батша һарайына көскә-көскә атлап бер ҡарт килеп инә. Тикшереп сыҡҡас, һындарҙың ҡолағында бәләкәй генә тишек булыуын шәйләй. Тишектәргә нәҙек тимерсыбыҡ тығып ҡарай. Тәүге һындың ҡолағына тығылған тимерсыбыҡ осо - икенсе ҡолағынан, икенсе һындыҡы- ауыҙынан, өсөнсө һындыҡы кендегенән килеп сыға. Ҡарт был йомаҡ өҫтөндә бер аҙ уйланғандан һуң, шундай аңлатма бирә:**

**- Был һындарҙы хикмәте шунда: беренсеһе бөтә хәбәрҙәрҙең бер ҡолағынан инеп, икенсеһенән сыҡҡан кешене кәүҙәләндерә. Икенсе һын - ул һәр ишеткән хәбәрен ныҡлап уйлап,тикшереп-үлсәп тормай, башҡаларға һөйләргә ашыҡҡан кеше. Ә өсөнсө һын һәр ишеткәнен йөрәге аша үткәреп, хәтеренә һеңдереп, һығымталар яһаған кешене хәтерләтә. Тимәк, ошо өсөнсө һын иң ҡиммәт баһаға эйә..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
23 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4417
Заказ - 1783/09